✓ Башҡорт тоҡомло аттар һәм бал ҡорттары беҙҙән күпкә бәхетлерәк. Уларҙың паспорттарында "башҡорт" тигән яҙыу бар.

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10 йыл

10 - 16 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№45 (515)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тамыр тартҡан...**

тарыҡмаҫ



4

**Демографияла...**

"туғыҙынсы тулҡын"!



5

**Ҡатыға ултырмайыҡ, тиһәк...**



8-9 аҡылға ултырайыҡ

**Ниндәй йәмғиәттә йәшәйһең...**

шуның йырын йырлайһың



12

14 ТВ-программа

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Полиция адресына күберәк тәнҡит әләгә, әммә уларһыҙ йәшәүҙе лә күҙ алдына килтерә алмайбыҙ. Әрләү, рәнйеү түгел, ә маҡтау, рәхмәт яуҙырыу өсөн улар ниндәй булырға тейеш?

***Ғилемдар СЕРҒӘЛИН, "Халыҡ участковыйы" Бөтә Рәсәй конкурсының республика этабында еңеүсе, полиция майоры:*** Хоҡуҡ һаҡлау органдарында хеҙмәт итеүемә 18 йыл да булып киткән. Унан алда районның "Урал" гәзитендә эшләнем, милиция хеҙмәткәрҙәре менән рейдтарға сыға инем, уларҙың фиҙаҡәр хеҙмәт өлгөһө хаҡында күп яҙырға тура килде. Шуғалыр ҙа, был өлкәләге проблемалар миңә яҡшы таныш ине, өҫтәүенә, эргәмдә файҙалы кәңәштәре, бай тәжрибәләре менән уртаҡлашып тороусы өлкән хеҙмәттәштәрем булды, уларға рәхмәтлемен. Ни өсөн был турала һүҙ башлауыма аптырап ҡалмағыҙ: ошоноң менән мин һеҙҙең һорауҙың бер өлөшөнә яуап бирҙем, тип уйлайым. Һәр һөнәргә хас булғанса, полицияла ла үҙ өлкәңде яҡшы белеү, йәғни компетентлыҡ һәм тәжрибә - уңышҡа илтә торған төп сифаттар. Полиция хеҙмәте күп көс һәм фиҙаҡәрлек талап итә, сөнки ул һәр ваҡыт халыҡ араһында уларҙың хәстәрлектәре менән йәшәй һәм эшләй. Башҡаларҙы тикшереү, уларға ниндәйҙер дәғүәләр белдереү өсөн иң тәүҙә үҙеңә намыҫлы, изге уйлы һәм ярҙамсыл булырға кәрәктер, тигән фекерҙәмен. Үҙемдең участкалағы халыҡты яҡшы беләм, тип әйтә алам: нисек донъя көтә, көнкүреше, ғаиләһе ниндәй, балалары нисәү... Хатта нисә баш мал аҫырауҙары тураһында белеү ҙә зыян итмәй. Кешеләр менән ипле, әҙәпле мөғәмәлә итеү, түҙемлек, сабырлыҡ та бик кәрәк беҙҙең эштә. Ә шулай ҙа участка ҙур, бер кеше көсө менән генә булмай, әлбиттә, терәк көс - ярҙамсылар кәрәк. Ауыл хакимиәте, уның активистары, пенсионерҙар менән даими бәйләнештә булыу мотлаҡ. Бары тик йәмғәтселеккә таянып, ололар һүҙенә ҡолаҡ һалып эшләгәндә генә эштең һөҙөмтәһе була. Был айырыуса эскелек һәм уның эҙемтәләре буйынса проблемаларҙы хәл иткәндә мөһим. Беҙҙең адреска күберәк тәнҡит, әрләү әләгә, тиһегеҙ. Дөрөҫ, ләкин полицияға осраҡлы килеп эләккән йә унан үҙенә файҙа эҙләүсе, үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртыусылар арҡаһында әләгә ул әрләүҙәр. Шул уҡ ваҡытта хоҡуҡ һағында тороусылар араһында фиҙаҡәр, үҙ эшенә яуаплы ҡараған намыҫлы хеҙмәткәрҙәр ҙә күп, бөтәһен бергә бутап фекер йөрөтөргә ярамайҙыр, минеңсә.

***Фәйрүзә ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Балыҡ башынан серей, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Бәлки, бөтә бәлә лә тап ана шул "баш"тарҙалыр? Бына яңы ғына, үҙәк гәзиттәрҙең 31 октябрь һанында, Рәсәй Эске эштәр министрлығының бер юлы 5 генералын эштән сығарыу тураһындағы мәҡәләне уҡып, сәстәр үрә торҙо. Иҫәп палатаһы Министрлыҡҡа мәғлүмәтләштереү өсөн бүленгән 38 миллиард (!) һум аҡсаның тейешенсә файҙаланылмау фактын асыҡлаған. Киң мәғлүмәт сараларынан уҡып, беҙ тағы ла полициялағы әллә күпме ришүәтселек, көс ҡулланыу, хатта кеше үлтереү кеүек факттарҙы беләбеҙ, хәҙер быға аптырарлыҡ та түгел, улар ғәҙәти хәлгә әүерелгән. Бына, мәҫәлән, "Комсомольская правда"ла ошо арала ғына баҫылған тағы бер хәбәр аяҡтан йығырлыҡ: "Башҡортостандың хоҡуҡ һаҡсылары өс меңгә яҡын енәйәтте йәшереп ҡалдырған", тип атала был мәҡәлә. Республика прокуратураһы тикшереүҙәренән шул асыҡланған: 2 816 енәйәт полицияла теркәлмәй ҡалдырылған. Шуның прокуратура ярҙамында иҫәпкә ҡуйылған яртыһынан ашыуы (1542) кеше милкенә яҫҡыныу - урлыҡ, талау, уҫал ниәттән алдау кеүек енәйәттәр менән бәйле. Аҡса талап итеү, хатта кеше үлтереү кеүек ҡайһы бер факттарҙың да йәшереп ҡалдырылыуын асыҡлаған прокуратура. Үҙ бурыстарына бына ошондай мөнәсәбәттә булған ведомствоны нисек әрләмәһен дә халыҡ, нисек итеп уға ышанһын инде? Мин тотош полиция ошондай хәлдә тип әйтергә теләмәйем. Бар намыҫлы, фиҙаҡәр хеҙмәткәрҙәр ҙә, ләкин әлеге яманатлылар арҡаһында уларҙың да абруйы төшә. Абруйҙы бит уны исематаманды алыштырып ҡына яулап булмай. Нимәгә, кемгә кәрәк булды икән ул ғүмер буйы килгән "милиция"ны беҙҙең менталитетҡа хас булмаған "полиция" атамаһына үҙгәртеү? Исем үҙгәреүҙән генә есем үҙгәрмәй шул. Ярай, уныһы ваҡ мәсьәлә, ти. Ә бына уның сафтарын "погонлы әүермәндәр"ҙән таҙартыу өсөн ни эшләргә икән һуң? Етәкселәр килә тора, ғәйепләнеп, икенсе берәй йылы урынға күсерелә тора, ә йөк һаман да урынында.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## "КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# БАШ ҠАЛАНЫҢ МӨҒЖИЗӘҺЕ...

"Киске Өфө"- баш ҡаланың бер биҙәге,
Ил тип янған күңелдәрҙең игеҙәге.
Һәр бер бите һуғарылған ғилем менән,
Йәнәш атлай баш ҡала һәм илем менән.

"Киске Өфө" - баш ҡаланың мөғжизәһе,
Уның менән мөмкин бергә ил гиҙәһе:
Ниндәй хәлдәр ҡалабыҙҙа, ниндәй эштәр,
Илебеҙҙә бара ниндәй үҙгәрештәр...

"Киске Өфө" - баш ҡаланың иманы ул,
Кемгә генә ярҙам ҡулын һуҙманы ул?!
Айыҡ тормош, гүзәл әхлаҡ, күркәм имән
Булыр һиндә шул баҫманы уҡып барһаң.

"Киске Өфө" - баш ҡаланың йөҙө булыр,
Һәр кешенең күңелендә эҙе булыр.
Ил-йорт ҡәҙерен белгәндәргә ул - саф алтын,
Үтәй ерҙә олатайҙар аманатын!

Зөлфиә ХАННАНОВА.



"Киске Өфө" кисәһен күтәреүселәр - Академтеатр коллективы һәм сибайҙар.

БАШ ЙОРТТА...



# АКВАПАРК ТА КӘРӘКТЕР...

**Глумилино микрорайонында тулы ҡеүәт менән аквапарк төҙөлөшө бара. Объектты билдәләнгән ваҡытынан алдараҡ тапшырмаҡсылар. Ҡуҙаллаңыуынса, комплекс ҡаланың иң иҫтәлекле урындарының береһенә әйләнәсәк. "Планета" тип аталасаҡ комплексҡа гипермаркет, сауҙа галереялары, кинокомплекстар, күп һанлы рестарандар һәм кафелар инәсәк. Ләкин аквапарк төп өлөштө алып торасаҡ.**

Ҡала округы Советының рәсми сайтында үткәрелгән һорау алыуҙарға ярашлы, өфөләләр аквапарк төҙөлөүенән ҡәнәғәт. Ҙур булмаған төркөм генә был проектҡа кире ҡараш белдерә. Әйткәндәй, был һорау алыуҙар аквапарк төҙөлә башламаҫ борон түгел, төҙөлә башлағас үткәрелде.

Баш ҡалабыҙҙа, ниһайәт, аквапарк төҙөлөүенә үҙ ҡарашымды яҙып китмәксемен. Минең фекер күптәр өсөн сәйер тойолор. "Дөрөҫ фекер йөрөтмәйһең", тип әйтеүселәр ҙә булыр. Ғаиләм менән ял итеү урындарының ҡала сиктәрендә күберәк булыуын теләһәм дә, тап аквапаркты күңелем ҡәҫәп етмәй. Ҡаршы булыуымдың объектив һәм субъектив сәбәптәре бар. Мин ялангас ирҙәр менән ҡатындарҙың бер ҡыйыҡ аҫтында, балаларының күҙ алдында ял итеүен ҡабул итә алмайым. "Енәйәт ҡараштан башлана", тигән боронғолар. Күп эксперттар, ғалимдар түлһеҙлектең иң мөһим сәбәптәренең береһе - ул кешеләрҙең бала саҡтан уҡ ҡаршы енес вәкилдәрен шәрә килеш күреүҙән ул, тип тылҡый. Тап ошо "сирҙе" бәләкәйҙән йоҡторғандар араһында көсләүселәр, педофилдар барлыҡҡа килә. Енси бәйелһеҙлектең дә сәбәбе ошо. Соҡона башлаһаң, тема тәрәнгә китә. Үкенескә ҡаршы, аңлы һәм аңһыҙ рәүештә яман идея күңелгә ятышлы проекттар аша тормошҡа ашырыла шул.

Һис шикһеҙ, тауҙан һырғалап төшөп, һыуға сумыу - ылыҡтырғыс. Ялын нисек ойоштора белмәй йөрөгән йәштәр, ғаиләләр, ғөмүмән, йәмғиәттең күп өлөшө өсөн аквапарк күңел асыу өсөн яҡшы варианттыр ул. Ләкин дәүләт тарафынан финансланмаған, хәйриә фондтары хәстәренән дә мәхрүм ҙур мәсеттәр төҙөлөө туҡтап ҡалғанда, ҡайһы бер мәктәптәрҙәге уҡыу процесы ярым емерек биналарҙа ойошторолғанда, яңы социаль объекттар төҙөлөүе ҡырҡа кәмегәндә күҙ асып йомған арала төрлө төнгө клубтар, күңел асыу йорттары ҡалҡып сығыуы - дәүләттен, йәмғиәттең ҡиммәттәр системаһы бер аҙ ҡаҡшауын күрһәтә түгелме? Хәйер, аквапарк та кәрәктер. Юҡһа, Өфөлә йәшәүсе ҡайһы бер ғаиләләрҙең аквапарк өсөн генә сит илдәргә, күрше Ҡаҙанға йөрөүҙәрен ишеткәнем бар. Ни эшләмәк кәрәк, заман шаукымы. Ә шулай ҙа киләсәктә ошондай объекттарҙың кәрәклеге йә кәрәк булмауы тураһындағы фекер алышыуҙар, фекер белешеүҙәр төҙөлөш эштәренән алда уҡ башланыр ҙа, беҙҙең кеүек йәмғиәттең сәләмәт, иманлы булыуы тураһында хыялланыусылар һүҙенә лә ҡолаҡ һалырҙар, тигән ышаныс йәшәй күңелдә.

**Мораҙым АЙСЫУАҠОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Полиция адресына күберәк тәнҡит әлегә, әммә уларһыҙ йәшәүҙе лә күҙ алдына килтерә алмайбыҙ. Әрләү, рәнйеү түгел, ә маҡтау, рәхмәт яуҙырыу өсөн улар ниндәй булырға тейеш?*

(Башы 1-се биттә).

*Зәкирйән ӘМИНЕВ, хоҡуҡ һаҡлау һәм прокуратура хеҙмәте ветераны:* Мин үҙем оҙаҡ йылдар прокуратура органдарында эшләнем. Эшем гел милиция менән бәйле булғас, мин уларҙың эшен эстән беләм, тип әйтә алам. Полиция хеҙмәте көндәлек көсөргәнешлекте талап итә торған ифрат ауыр хеҙмәт. Көнө-төнө ғаилә яңъялсыларын, һуғыш суҡмарҙарын, эскеселәрҙе тыңлау, төрлө уғрылар, юлбаҫарҙар, кеше үлтереүселәр һәм башҡа шундай енәйәтселәр менән эш итеү кеше психикаһына енелгә түгел. Былар бөтәһе бергә әкренләп кенә полиция хеҙмәткәрҙәренең психикаһын ҡаҡшата. Шуға ла улар пенсияға иртә китә.

Миненсә, полицейскийҙар иң тәүҙә намыҫсан, әҙәпле, тәүфиҡле булырға тейеш. Уларға закон тарафынан кешеләрҙең мәнфәғәттәрен ҡайғыртып, уларға ярҙам итер өсөн ҙур власть бирелгән. Был бик ауыр, кешенән һәр саҡ үҙен-үҙе фиҙа ҡылырға әҙерлек талап иткән эш. Үкенескә ҡаршы, енәйәтселек әле бер ҙә кәмемәй, киреһенсә, арта ғына. Тимәк, полиция хеҙмәте әле бик тә кәрәкле һөнәр. Нисектер бер һөйләшеп ултырғанда, әңгәмәләшем: "Хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәрен күрә алмайым", - тип ысҡындырҙы. Шунан, минең дә шул органдарҙа оҙаҡ йылдар эшләүемде иҫенә төшөрөпмө икән, "Был һинә ҡағылмай", тип төҙәтеп ҡуйҙы. Уның был уйламай әйткән һүҙҙәренә ҡаршы, "Һин, тимәк, бөхетле кешеһең - үҙенә лә, таныш-тоноштарыңа ла яҡлау эҙләргә тура килмәгән", тип яуапланым. Бер-бер хәл булһа, ҡайҙа бараһың - полицияға бит. Әлбиттә, полицейскийҙар араһында төрлөһө осрай. Араларында бигүк шәптән булмағандары ла етерлек. Әммә был бөтә полицияны яманларға, әрләргә кәрәк, тигәнде аңлатмайҙыр, тип уйлайым. Совет заманында ла милицияла төрлө хәлдәр булғылай торғайны. Минең үҙемә уларға ҡаршы енәйәт эштәре асып, уларҙы судҡа тиклем алып барып еткерергә тура килгеләне. Әммә былар сығып, мин бөтә полицияны яманлай алмайым. Ғөмүмән, бөтә Рәсәй йәмғиәтен ниндәй сирҙәр йонсотһа, полиция хеҙмәткәрҙәре лә шул уҡ сирҙәр менән ауырыйҙыр. Тик ябай кешеләрҙә был етешһеҙлектәр бигүк күренеп бармаһа, погон йөрөткән кешеләрҙә улар әллә ҡайҙан ҡысҡырып, күҙгә ташланып тора. Шуға күрә, полицияға эшкә алғанда уларҙы энә күҙәүенән үткәреп тикшерергә кәрәк. Бер курсташымдың һүҙҙәре менән әйткәндә, әхлаҡи-психологик яҡтан тотанаҡлы, оят тигән нәмәне яҡшы белгән, намыҫсан кешеләр генә эшләргә тейеш полицияла һәм, ғөмүмән, хоҡуҡ һаҡлау органдарында. Власть яратҡан кешене унда яҡын да ебәрергә ярамай. Власть полиция хеҙмәткәренә былай ҙа бирелә. Әгәр инде түрәлекте яратҡан, уға нисек булһа ла ынтылған кеше власть структураларына эләкһә, өҫтәүенә, форма ла кейеп алһа, бында инде "бөттө баш, ҡалды муйын һерәйеп", тиергә генә ҡаласаҡ. Тирә-йүн өсөн был кеше бәлә-ҡазаға әүереләсәк. Полиция хеҙмәткәре кешене тыңлай, уның зарын үҙенеке кеүек ҡабул итә белергә тейеш, тип әйтергә теләйем. Полицияға кеше бит шатлыҡ уртаҡлашырға килмәй, ә бәлә-ҡазаға тарығанда ғына килә.

Минең үҙемә ысын мәғәнәһендә кешене яҡлаған милиционерҙарҙы күрергә, ҡайһы берҙәре менән бергә хеҙмәт итергә тура килде. Мәҫәлән, милиция полковниктары Тәлғәт Саях улы Әмирханов (Бөрө) Фәтҡислам Ғәйнислам улы Тоҡомбәтов (Сибай) кеүектәр, китаптарҙа яҙғанса, ысын совет милиционерҙары ине, тип әйтә алам. Советтар заманында кешеләргә һәр саҡ ярҙамға килергә әҙер торған Дядя Степа, Анискин тигән милиционерҙарҙың әҙәбиәт аша ыңғай образы формалаштырылғайны. Хәҙер ундайҙар заманы үтте.

Миненсә, хәҙерге Рәсәй полицияһы хеҙмәткәрҙәре кешегә йөҙ менән боролорға тейеш, тип уйлайым. Халыҡ уларҙан шуны көтә. Сөнки полиция һалым түләүселәр аҡсаһына эш хаҡы ала һәм кешегә, дәүләткә намыҫлы хеҙмәт итергә тейеш. Хәҙер уларға эш хаҡын да ярайһы ғына күтәрҙеләр, тимәк, кешеләр уларҙан фиҙаҡәр хеҙмәт талап итә ала.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы ҡыҙыу тоҫ алды. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**




● 2013 йылдың тәүге яртыһына **50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 360 һум 24 тингә яҙылырға була.** Ноябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 10 уҡыусыға - Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыға - **"Айыҡ тұй сценарийҙары"**, 10 уҡыусыға Әхмәр Үтәбайҙың **"Мин айыҡ тормош башланым"** китаптарын бүләк итәсәкбеҙ. Октябрҙә яҙылғандар исемлеген ошо көндәрҙә асыҡлаясаҡбыҙ.

● Кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**, беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**, беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов төбәктең агросәнәғәт комплексының иң яҡшы вәкилдәренә дәүләт наградалары тапшырҙы. Төбәктең 30 аграрийы Салауат Юлаев орденына, "Башҡортостан Республикаһындағы фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн" отличие билдәләренә, Башҡортостан Республикаһының Почет грамоталарына, "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре" һәм "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған аҙыҡ-түлек индустрияһы хеҙмәткәре" исемдәренә лайыҡ булды.

✔Республика йортонда ауыл хужалығы һәм аҙыҡ-түлек сәнәғәте байрамына арналған тантанала Башҡортостан Президенты билдәләүенсә, Рәсәй төбәктәре араһында беҙ һөт, бал, ҡымыҙ етештереү, аттар һаны буйынса - беренсе, картуф, мал һәм ҡошҡорт ите етештереү буйынса - икенсе, иген культуралары, йоморҡа етештереү, кәзә-һарыҡтар һаны буйынса бишенсе урында торабыҙ. Үн ай һөҙөмтәләре буйынса беҙҙә ауыл хужалығы продукцияһы етештереү күләме 95 миллиард һумға етте.

✔Өфөгә эш визиты менән Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Павел Астахов килде. Ике көнлөк сәфәр сиктәрендә ул төрлө балалар учреждениеларында булды, Киров районында урынлашҡан "Изгелек" халыҡты социаль хеҙмәтләндереү комплексы үҙәге эшмәкәрлеген һәм Рудольф Нуриев исемендәге Башҡорт хореография колледжы менән танышты. Башҡортостан Президенты менән Павел Астахов төбәктә Рәсәй субъекттарында Бала хоҡуҡтары буйынса вәкилдәрҙең VII съезын үткәреү мәсьәләләрен тикшерҙе.

✔Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Башҡортостан Республикаһының ҡайһы бер ауыл биләмәләрендә хайуандарҙың ҡотороу ауырыуы буйынса сикләү саралары (карантин) индереү тураһында"ғы Указға ҡул ҡуйҙы. Улар иҫәбендә - Белорет районы Ҡоҙон-Әхмәр ауылы, Борай районы Әбдрәшбаш ауылы һәм Бөрйән районы Килдеғол ауылы. Был ауылдарҙа ҡоторған ҡырағай хайуандарҙың кешеләргә ташланыу осраҡтары теркәлгән. Указ үтәлешенә контроллек итеү Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Эрнст Исаевҡа йөкмәтелде.

**✓ Яңылыҡтарҙы бөтөнләй ҡарай алмайым. Енәйәттәрҙән башлана бар тапшырыу, енәйәттәр менән тамамлана. Мәскәү тапшырыуҙарына эйәреп, беҙҙең урындағы радио-телевидение ла шуны уҡ ғәҙәт итеп алды.**

ИШАРА

# ҠАҠ ТҮШӘКТӘГЕЛӘР...
## беҙ түгелме?

**Гәзитебеҙҙең быйылғы 41-се һанында "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһында үҙгәртеп ҡороуҙар заманы хаҡында фекер алышыу ойошторолдо. Матур фекерҙәрҙе уҡып сыҡҡас, ниңәләр, бер көләмәс иҫемә төштө.**

Зоология дәресендә уҡытыусы Сидоровты таҡта янына саҡыра ла: "Ҡаҙ беҙгә нимә бирә?"- тип һорай. Сидоров: "Ҡаҙ беҙгә ҡаҙ майы бирә", - тип ихлас яуап бирә. Уҡытыусы: "Афарин, Сидоров! Ҡаҙ беҙгә тағы ла нимә бирә һуң?" - тип һорай һәм ярҙам итергә теләп: "Һин нимәгә ятып йоҡлайһың?" - ти. Сидоров: "Мин ҙур һандыҡ өҫтөнә ятып йоҡлайым", - тип яуаплай. "Ә аҫтыңа нимә түшәйһең?" "Атайымдың фуфайкаһын". "Ә баш аҫтына нимә һалаһың?" "Әсәйемдең фуфайкаһын". "Ә өҫтөңә нимә ябынаһың?" "Олатайымдың фуфайкаһын". "Ә атай-әсәйең нимәгә ятып йоҡлай һуң?" "Ҡаҙ йөнөнән яһалған түшәктә". Уҡытыусы шатланып: "Үәт, үәт, хәҙер әйт инде: тағы нимә бирә беҙгә ҡаҙ?" Сидоров: "Ҡаҙ беҙгә ҡаҙ майы бирә", - ти...

Был көләмәс иҫкә төшөүҙең сәбәбе: шул Сидоров кеүек ҡаҡ түшәккә ҡалғас, үҙгәртеп ҡороуҙар беҙгә гимн, герб һәм флаг бирҙе. Әммә милләттең хәле СССР осорондағынан да хөртөрәккә әйләнде түгелме? СССР заманында, исмаһам, күҙ буяу өсөн булһа ла милли сәнғәткә, әҙәбиәткә ярҙам күрһәтелә ине. Ә хәҙер бындай ярҙам һиҙелмәй. Үҙгәртеп ҡороуҙар, эйе, һүҙ азатлығы бирҙе. Тик шул һүҙ һөйләүҙән ары китеп булмай ҙаһа бөгөн. Ниндәйҙер статистик мәғлүмәттәр килтерелә, йәшәү кимәле күтәрелә, тиҙәр. Әммә осон-осҡа ялғап йәшәү дауам итә. Әйткәндәй, баяғы көләмәс Үҙәк - ҡаҙ мамығынан яһалған түшәктә, ә беҙ, Рәсәй төбәктәре, ҡаҡ түшәктә, тигән ишараға тап килә икәнен аңғарғанһығыҙҙыр.

# ТЕЛЕВИЗОР ҠАРАМАЙЫНСА...
## йәшәп булырмы, тим

**Мине ошо арала бер һорау ҡыҙыҡһындыра әле. Телевидениелағы ҡайһы каналды нисә процент кеше ҡарай икәнен нисек иҫәпләп сығаралар икән? Ул мониторинг нисек үткәрелә? Юҡһа, телевидение каналдары гел ошондай статистиканы ҡабатлап, лаф ора башланы бит.**

Бына минә 71 йәш, ошо оҙон ғүмеремдә, исмаһам, бер тапҡыр булһа ла минең телевидение тураһындағы фекеремде һорашыусы булманы. Әлбиттә, мин бик әүҙем телевизор ҡараусы түгелмен. Күберәк китап, гәзит, журналдар уҡыйым. Ә йәшерәк саҡта телевизор ҡарарға ваҡыт та ҡалмай ине. Телепрограмманы уҡып сығам да, минә ҡыҙыҡлы тапшырыуҙар тәңгәленә йондоҙ төшөрөп сығам. БСТ-ла "Хазина", "Башҡорт йыры", "Ауылыма ҡайтам", "Байтус", "Йома", "Автограф", "Тылсымлы ҡурай", "Башҡорттар" тигән тапшырыуҙарҙы ҡарайым. Тик был тапшырыуҙар аҙнаһына бер, йә айына бер тапҡыр күрһәтелә. Ә туп тибеү, шайба ҡыуыу көндәрендә ҡарарлыҡ тапшырыуҙар юҡ кимәлендә. Ул көндәрҙә иһә телевизорҙы һүндереп кенә ҡуям. Мин генә түгел, күптәр шулай итә икәнен беләм. Шулай булғас, футбол, хоккей ҡараусылар әллә ни күп тә түгелдер, ә ҡиммәтле эфир ваҡытын биләй был уйындар.

Хәйер, мин һанап үткән тапшырыуҙарҙан башҡалары әллә ни шатлыҡ та килтермәй инде ул тамашасыға. Яңылыҡтарҙы бөтөнләй ҡарай алмайым. Енәйәттәрҙән башлана бар тапшырыу, енәйәттәр менән тамамлана. Мәскәү тапшырыуҙарына эйәреп, беҙҙең урындағы радио-телевидение ла шуны уҡ ғәҙәт итеп алды. Күптән түгел урамда Рәйлә исемле танышымды осраттым. Шундай матур, бит остары алһыуланып үтеп бара. "Рәйләкәй, кәйефең бик шәп күренә, һаулығың да һәйбәттер?" - тип өндәштем. "Кәйефем һәйбәт, сөнки тормоштағы кире күренештәргә иғтибар итмәҫкә булдым әле. Бына өс айға яҡын телевизор ҙа ҡарамайым. Ҡайҙа ниндәй юл фажиғәһе, ниндәй шартлау, ниндәй янғын булғанын да белмәйем. Китаптар уҡыйым, шиғырҙар уҡып-ятлайым", - шулай тине лә, бер шиғыр уҡып ишеттерҙе. Рәйлә ханымдан өлгө алып, әллә телевизорҙы бөтөнләй ҡабыҙмай йәшәп ҡарарғамы икән, тип уйланым әле мин дә.



# ЙОМОРТҠА ҺУРПАҺЫЛАЙ...

**Бөтәһе лә нимәлер етештерә, нимәлер һата бит бөгөн. "Баҙар иҡтисады" башланыу менән берәү баҙарҙа "Бешерелгән йомортҡалар" тип аталған киоск асып ебәргән, ти. Шул уҡ баҙарҙан йомортҡалар һатып ала ла, өйөндә бешерә лә, шул уҡ хаҡҡа һата, ти был. Был эште күреп дуҫҡайы: "Һин ни өсөн улай итәһең, ниндәй файҙа алаһың һуң?"- тип һорай ҡуйған. Ә "бизнесмен": "Беренсенән, йомортҡаларҙы бешергәс, һурпаһы ҡала бит, икенсенән, һәр саҡ эш менән мәшғүлмен", - тип яуаплаған, ти.**

Шуның кеүек, беҙҙең ил дә һәр саҡ эш менән мәшғүл бит. Йә паспорттар алыштырабыҙ, йә нумерология, йә льготалар бирәләр, йә кире алалар, йә яңы медицина полистары уйлап сығаралар, милицияны полицияға алыштыралар - халыҡтың һәр саҡ ҡыбырҙап тороуы кәрәк. Буш мәшәҡәттәр уйлап табып ҡына торола. Берәүҙәр анкета тултыра, ә икенселәр уларҙы һаҡлап йөрөй. Шунан: "Был эштәрҙе үткәреү өсөн бик күп аҡса сарыф ителә", - тип телевизор аша һөйләйҙәр. Эйе, илебеҙ етәкселәре лә, халҡы ла һәр саҡ эш менән мәшғүл һәм ул эштең һөҙөмтәһе йомортҡа бешергәс ҡалған һурпалай халыҡ өсөн. Бына шулай йәшәйбеҙ инде...

# НИ МӘҒӘНӘ...
## дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән

**Бер башҡорт халыҡ әкиәтен хәтергә төшөрҙөм әле. Уны бик күп йылдар элек уҡығайным. Бер егет, донъя күреп килергә тип, ауылынан сығып киткән, ти. Бара торғас, йылға буйында бер һылыу ҡыҙыҡайҙың илап тороуын күреп ҡалған да, уның янына барып: "Нимә илайһың, һылыуҡай?" - тип һораған. Ҡыҙыҡай йылға уртаһында кәмәлә балыҡ тотоп ултырыусыға күрһәтеп: "Ҡаты дауыл сығып, кәмәһе ауҙарылып, батып ҡуймаһа ярай ине был кеше, тип ҡурҡып илайым", - тип яуап биргән. Юлаусы егет ҡыҙҙы йыуатҡан да: "Һинән дә ғәжәберәк тағы берәйһен осратһам, боролоп ҡайтып, һине кәләш итеп алырмын", - тип, юлын дауам иткән, ти.**

Бара торғас, бер ауылға еткән егет. Күрә, бер ир менән ҡатын буш күнәкте ҡояш аҫтында тота ла, өҫтөн тиҙ генә туҡыма менән ҡаплап, өйҙәренә йүгереп инеп китә, бер аҙҙан тағы ла йүгереп сығып, тағы ла күнәктәрен ҡояшҡа ҡаратып тота, ти. Хәләхүәл һорашҡас, ни эш ҡылыуҙары менән ҡыҙыҡһынған егет. Ә хужалар: "Өй эсебеҙ ҡараңғы, ҡояш нуры, яҡтылыҡ ташыйбыҙ", - тип яуап биргән. Егет балта, бысҡы һорап алып, уларҙың өйҙәренең көньяҡ яғынан тәҙрә уйып бирә лә, юлын дауам итә.

Икенсе ауылға барып еткәс, бер әбей менән бабайҙың һыйырҙарын баҡыртып, таҡта буйлатып, һарай башына мендерергә маташыуын күреп ҡала егет. "Нимә яфалайһығыҙ ул малҡайҙы?" - тип һорай егет. "Күрмәйһеңме ни, һарай башында ҡуйы булып, йәмйәшел үлән үҫкән бит", - тип яуап бирә былар. Егет ураҡ һорап алып, һарай башына менеп, йәм-йәшел үләнде урып төшөрөп бирә лә, боролоп, үҙ ауылына юл тота, ти. Юл ыңғайында баяғы илаҡ ҡыҙыҡайҙы кәләш итеп алып ҡайтып, бәхет-шатлыҡҡа күмелеп, бик оҙаҡ ғүмер иткән, ти.

Матур әкиәт. Минә оҡшай. Ә уны иҫемә төшөрөп, һеҙгә яҙып һалыуымдың сәбәбе - гәзитебеҙҙең халҡыбыҙҙың яҙмышын ҡайғыртып, уның рухын күтәреүҙә ҙур, мөһим эш башҡарыуы менән һоҡланыуҙа. Дөрөҫ, милләтебеҙ йотолмаҫ, упҡынға батмаҫ, бөлмәҫ борон "алдан илайыҡ", ҡайғыртайыҡ. Шағирыбыҙ Рәми Ғарипов үҙенең "Дүрт юллыҡтар"ында ла:

*Ирлек булһын шағирлыкта;*
*Шағирлыкта ирлек булмаһа,*
*Ни мәғәнә дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән,*
*Дөрөҫ һүҙең инде һуңлаһа?*

тип бик дөрөҫ әйткән бит.

**Әйткәндәй, Рәсәй телевидениеһының "Время" тапшырыуында һалҡын Хабаровск өлкәһендә йәшәүсе юғалыу сигенә еткән (улар 3 мең генә тороп ҡалған), эшһеҙлектән эскелеккә батып барған бер милләт тураһында һөйләнеләр. Һуңғы осорҙа улар ойошоп, үҙҙәренең боронғо ата-бабалар кәсебен - балыксылыҡты тергеҙеп, матур итеп йәшәй башлаған. Шамандары ла бар икән. Ул шаман бубенын ҡағып, "күктәге идара менән һөйләшә, бәйләнешкә инә, уңыш һорай, имеш. Ошондай милләт хәләнә ҡала күрмәйек, туғандар.**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

# НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә "Динамо" спорт комплексында билбау көрәше буйынса Донъя кубогы старт алды. Ярыштарҙа Рәсәй, Әзербайжан, Әрмәнстан, Белоруссия, Греция, Грузия, Израиль, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Латвия, Литва, Молдова, Монголия, Норвегия, АҠШ, Тажикстан, Төркмәнстан, Төркиә, Үзбәкстан, Украина, Швеция, Эстония - йәмғеһе 22 илдән спортсылар ҡатнаша. Турнирҙы ойоштороусылар - Халыҡ-ара билбау көрәше федерацияһы, Бөтә Рәсәй билбау көрәше федерацияһы, БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты. Рәсәй йыйылма командаһында - 40 спортсы. Улар араһында Башҡортостандан 11 көрәшсе бар.

✓2013 йылда "Һөтсөлөк малсылығын үҫтереү һәм һөт етештереүҙе арттырыу. 2012-2016 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһында 500 һөтсөлөк-тауар фермаһын комплексы яңыртыу" республика маҡсатлы программаһында Башҡортостандың 90-ға яҡын фермер хужалығы ҡатнашасаҡ. 2012 йылда "500 ферма" программаһында ҡатнашыуға 86 ауыл хужалығы предприятиеһы заявка биргән. Уларҙың 60-тан ашыуы һөттауар фермаларын төҙөү, реконструкциялау һәм уларға капиталь ремонт үткәреү буйынса әүҙем эшмәкәрлек алып бара. Ағымдағы йыл аҙағынаса республикала 70-кә яҡын бындай объект ремонтланасаҡ.

✓Республикала "Кандракүл" тәбиғәт паркы тураһында Положение раҫланды. БР Хөкүмәтенең тейешле ҡарарына ҡул ҡуйылған да инде. Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығына "Кандракүл" тәбиғәт паркы ҡарамағына Туймазы урман хужалығының айырыуса һаҡланған тәбиғәт урман фонды участкаларын сикләнмәгән ваҡытҡа даими файҙаланыуға бирергә ҡушылды.

✓Рәсәй Федерацияһы Президенты һәм Хөкүмәте стипендияларын Башҡортостанда 2012-2013 уҡыу йылында 27 студент һәм 7 аспирант аласаҡ. Уларҙың күпселеге Өфө дәүләт авиация техник университетында белем ала. РФ Президенты стипендиялары менән әлеге университетта уҡыған 19 студент һәм 4 аспирант билдәләнгән. РФ Хөкүмәте стипендияларына 66 кеше лайыҡ булды. Бында шулай уҡ Өфө дәүләт авиация техник университеты алдынғылыҡты бирмәй: 48 студент һәм 7 аспирант.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Балалар баҡсаһы менән башланғыс мәктәп бергә булыуы баланы башҡорт рухлы итеп тәрбиәләүгә ҙур өлөш индерә. Сөнки баланың үҙаңы, уның киләсәктә ниндәй кеше булыры ун йәшенә тиклем ата-әсәһе, мәктәп тарафынан билдәләнә.*



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҠАЛА БЮДЖЕТЫ...
## өс йылға алдан күҙалланасаҡ

**Календарҙың биттәре, йыл аҙағына яҡынлашыуын белдереп, көҙгө япраҡтар кеүек ҡойолғанда, халыҡтың "себеште көҙ һанайҙар" тигән аҡыллы әйтемен раҫлағандай, Өфө ҡала округы хакимиәтенең финанс идаралығы етәксеһе Илгиз Насретдинов журналистар менән осрашып, йылдың туғыҙ айында ҡала бюджетының үтәлеше хаҡында бәйән итте.**

Ҡала округының бюджеты ошо осорҙа килемдәр буйынса 13 млрд 483 һумға, йәғни раҫланған йыллыҡ планға ҡарата 71 процентҡа үтәлгән. Алынған килем былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 2 млрд 152 млн һум тәшкил итә, йәғни 19 процентҡа күберәк. Халҡы миллиондан артҡан ҡалалар араһында Өфө бюджетҡа килем күләме буйынса Дондағы Ростов, Пермь, Һамар, Красноярскиҙан ҡала бишенсе урынды биләй. Һалым һәм һалым булмаған килемдәр күләме буйынса алтынсы баҫҡыста. Туғыҙ айға раҫланған план 11 процентҡа артып үтәлгән һәм бюджетҡа өҫтәмә ингән килем 640 миллион һум тәшкил итә. Былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда бюджеттың килем күләме дөйөм алғанда 700 миллион һумға кәмегән. Был - бюджет мөнәсәбәттәренең үҙгәреүе, республика менән ҡала округы араһында сығым вәкәләттәрен айырыу һөҙөмтәһе. Шул арҡала граждандарҙың килеменә һалым нормативы 30 проценттан 20 процентҡаса кәметелгән. Килемдәрҙең дөйөм кәмеүенә ҡарамаҫтан, айырым күрһәткестәр буйынса үсеш динамикаһы күҙәтелә. Мәҫәлән, ер һалымы - 14, шәхси эшҡыуарҙарға берҙәм һалым күләме - 10, тирә-яҡ мөхиткә кире йоғонто яһаған өсөн түләүҙәр 20 процентҡа тиклем үҫкән. Ергә һалым буйынса ғына алғанда ла, киләһе йылға уның бюджетҡа өҫтәмә рәүештә 83 миллион килем килтереүе күҙаллана. Шулай уҡ граждандарҙың милегенә һалымдың арттырылыуы 2013 йылда өҫтәмә рәүештә 18 миллион табыш килтереүе ихтимал. Сағыштырып ҡарағанда, бөгөн баш ҡалала граждандарҙың милкенә һалым күләме 333 һум тәшкил итһә, Екатеринбургта, Силәбелә был һан мең һумдан ашыу.

Бынылға ҡала округы бюджеты 19 миллиард самаһы тип күҙалланһа, йыл һуңындағы аврал сығымдарҙың артыуы был һанды 21 миллиардҡа еткереү ихтималлығын да инҡар итмәй. Шулай итеп, әлегә профицит менән килгән бюджеттың йыл һуңында дефицитҡа әйләнеүе лә мөмкин. Әммә, Илгиз Диҡҡәт улы белдереүенсә, ҡала округында был дефицитты ҡапларлыҡ резерв бар.

Әлеге ваҡытта 2013-2015 йылдарҙы күҙаллаған бюджет проекты әҙерләнгән, ноябрҙә ул фекер алышыуға сығарыласаҡ. Бында шуны ла әйтеп китергә кәрәк: 2014 йылдың бюджет проекты тулыһынса тиерлек маҡсатлы программалар нигеҙендә эшләнгән.

Әйткәндәй, сығымдарҙы тармаҡтар киҫешендә ҡарағанда, баш ҡалала мәғарифҡа дөйөм күләмдең 39 проценты бүленә, торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа - 19, иҡтисадҡа - 13, дөйөм дәүләт мәсьәләләрен хәл итеүгә - 10, һаулыҡ һаҡлауға - 8, социаль сәйәсәткә - 3, мәҙәниәт, кинематографияға - 2, дәүләт бурысын хеҙмәтләндереүгә - 1 процент ҡаралған. Физик культура, спорт, киң мәғлүмәт саралары иһә был исемлектә иң һуңғылар иҫәбендә...

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

АФАРИН!

# ТАМЫР ТАРТҠАН...
## тарыҡмаҫ



**Һәр кем үҙе өсөн йәшәгән, үҙ мәнфәғәттәрен ҡайғыртҡан заманда зат-ырыуын белгән кешеләр һирәгәйә. Әммә 13-сө башҡорт мәктәп-балалар баҡсаһында уҙғарылған Шәжәрә байрамы тамырҙарына битараф булмаған ғаиләләр барлығына тағы бер ҡат инандырҙы. Сараның һөҙөмтәләре тураһында мәктәптең директоры Гөлсара Шамил ҡыҙы Килдеғолова бәйән итте.**

- Беҙ Шәжәрә байрамын 2006 йылда Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарары ғәмәлгә ингәндән алып йыл да уҙғарабыҙ. Быйыл уны фестиваль рәүешендә үткәрҙек, шуға күрә урындар билдәләнмәне. Әммә һәр ғаилә ихлас әҙерләнгән, бер нисә йыл рәттән ҡатнашҡандары быуын сылбырҙарын тулыландырып килгән. Был сара йыл дауамында бара. Башта балалар баҡсаһына йөрөгән ике төркөм: бәләкәстәр һәм өлкәндәр, мәктәп уҡыусылары һәр кабинетта ғаиләләренең фотоһүрәттәренән стенд эшләне, һуңынан шәжәрәһен төҙөп килтерҙе. Һәр төркөмдән, синыфтарҙан иң сағыу шәжәрәләрҙе бөгөн үткәрелгән байрамға күргәҙмәгә сығарҙыҡ. Был ғаиләләр шәжәрәһе, ҡул эштәре, һөнәрҙәре менән таныштырып сыҡты. Бәләкәстәр төркөмөнә йөрөгән ике-өс йәшлек балаларҙың ярты сәғәттән ашыу тып-тыныс ултырыуы иҫте китәрҙе. Тимәк, хатта кескәйҙәр ҙә ниндәйҙер кимәлдә ете быуынды белеү кәрәк икәнлеген аңлай.

Шәжәрә төҙөүгә Бикмәтовтар, Байназаровтар, Ҡәнәғәтовтар, Ишкининдар, Бүләковтар, Булатовтар бик етди ҡараған. Уларҙың эштәре быуын сылбырҙарының тулылығы, сағыу биҙәлеше менән айырылып торҙо. Йәш тә һигеҙ айлыҡ Алтынай Байназарованың шәжәрәһен ата-әсәһе йорт рәүешендәге фотоһүрәттәр менән тулыландырып төҙөгән. Кескәйҙәрҙең шәжәрәһе акварель һүрәттәр, ҡағыҙҙан эшләнгән фигуралар, сағыу төҫтәргә бай булһа, мәктәп уҡыусыларының эштәре ололарса етди, күберәк таблица формаһында булыуы менән айырылып торҙо. Нисек кенә булмаһын, ғаиләлә бала тәрбиәһенә ниндәй әһәмиәт бирелеүе лә сағылды был фестиваль барышында. Башҡорт ғаиләләрендә киләсәк быуын тәрбиәһенә, тамырҙарға ҡарата ҙур иғтибар бирелеүен, милләттәштәребеҙҙең битараф булмауын күреп һоҡландым.

Балалар баҡсаһы менән башланғыс мәктәп бергә булыуы баланы башҡорт рухлы итеп тәрбиәләүгә ҙур өлөш индерә, тип һанайым. Сөнки баланың үҙаңы, уның киләсәктә ниндәй кеше булыры ун йәшенә тиклем ата-әсәһе, мәктәп тарафынан билдәләнә. Шәжәрә байрамы, башҡа милли байрамдарыбыҙҙы беҙ башҡорт балаларына рух, сәм бирер өсөн уҙғарабыҙ. Шуға күрә, берҙән, шәжәрәләр стенды Яңы йыл байрамына тиклем эшләйәсәк. Икенсенән, иң сағыу тип табылған Бикмәтовтар һәм Байназаровтар шәжәрәһен район күләмендә үткәреләсәк Шәжәрә байрамына алып сығырға иҫәп тотабыҙ.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ЙӘҮКӘ ТЕЛЕФОН




# АЛЫРҘАРМЫ, АЛМАҪТАРМЫ ИКӘН?

**Ҡасан ғына әле төрлө кимәлдәге депутаттарҙы "халыҡ хеҙмәтселәре" тип атап йөрөтә инек. Күрәһең, был атама уларҙың күңеленә хуш килмәне һәм улар яйлап ҡына түгел, ҙур аҙымдар менән үҙҙәрен депутат итеп һайлауға тос өлөш индергән халыҡ төркөмөнән айырыла башланы...**

Элекке ҡануниәт буйынса "халыҡ хеҙмәтселәре"н, ысынлап та, халыҡ үҙе күрһәтә, лайыҡлы кандидатураға, үҙен яҡларлыҡ кешегә өҫтөнлөк бирә ине. Хәҙер иһә һайлау системаһы тамырынан тигәндәй үҙгәргән. Кандидатарҙы һанына сығып та бөтөн булмаған партиялар күрһәтә йәки үҙен лайыҡлы тип һанаған кеше үҙ-үҙен күрһәтергә хоҡуҡлы. Шул сәбәпле, төрлө кимәлдәге депутат мандатын алыусыларҙы хәҙер бары тик һайлауға бер ай ҡалғас һәм һайлауҙан һуң ғына белеп ҡалаһың. Ә халыҡ фекере нимә инде: власть бит халыҡ менән эшләмәй, депутаттар менән эшләй. Ә депутаттар туранан-тура халыҡ менән эшләй... тип хыялланырға ғына ҡала. Әлбиттә, ҡағыҙҙа, ысынлап та, шулай. Хатта төрлө кимәлдәге депутаттарға халыҡ менән осрашыуға киткән сығымдарын ҡаплау өсөн компенсация ла түләнә, имеш. Уны муниципалитеттар, кеҫә ҡалынлығына ҡарап, төрлө күләмдә ҡуйырға мөмкин. Мәҫәлән, Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттарының сығымдарын ҡаплау өсөн (телефондан һөйләшеү, канцелярия тауарҙары алыу һ.б.) ай һайын 5 мең һум аҡса бирелә. Кемдәндер бер айлыҡ эш хаҡы, тип күҙҙәрегеҙҙе шаҡмаҡландырҙығыҙмы? Юҡҡа иҫегеҙ китмәһен, Алтай крайында был сумма хатта 10 мең икән әле. Ә бына Өфө ҡала округы Советы депутаттарына компенсация күләме тағы ла аҙыраҡ - ни бары 3 мең һум ғына булыуы мөмкин. Әле улар, был сумманы алырғамы, алмаҫҡамы икән, тип бер дөйөм фекергә килә алмай баш вата. Депутат корпусын, нигеҙҙә, юғары вазифа биләгән етәкселәр тәшкил итеүенән сығып ҡарағанда, уларҙың баш ватыуы аңлашыла ла һымаҡ - өс мең улар өсөн өс тин кеүек кенә бит инде, шуның өсөн ваҡланып, абруй төшөрөп торорғамы, юҡмы, тигән һорау нығыраҡ борсойҙор, моғайын. Әллә борсомаймы икән? Ни тиһәң дә, "халыҡ хеҙмәтселәре" бит әле улар... Ә хеҙмәтселәр бер ваҡытта ла бушҡа эшләмәгән - "тамаҡ ялына" булһа ла тир түккән...

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡорт дәүләт университетында абитуриенттар менән рәсми осрашыуҙарға - Асыҡ ишектәр көндәренә старт бирелде. Асыҡ ишектәр көндәре 10 ноябрҙә - физика-техник институтында, филология факультетында, хоҡуҡ институтында, 17 ноябрҙә - химия һәм иҡтисад факультеттарында, 24 ноябрҙә - математика һәм мәғлүмәт технологиялары; башҡорт филологияһы һәм журналистика; психология факультеттарында, 1 декабрҙә - биология һәм тарих факультеттарында, 8 декабрҙә география факультетында, Эшҡыуарлыҡ идаралығы һәм хәүефһеҙлеге институтында үтә. Сара 15 декабрҙә тамамлана. Дөйөм университет сараһы төп корпуста ойошторола.

✓"Рәсәй почтаһы"ның Башҡортостан филиалы автопаркы яңы почта автомобилдәре менән тулыланды. Әле 39 автомобиль килде лә инде, улар иҫәбендә өс күсмә почта элемтәһе бүлексәһе лә бар. Республика филиалы өсөн был бигерәк тә ҡиммәтле бүләк. Был мобиль бүлексәләр Ғафури, Белорет, Бәләбәй, Бишбүләк, Йәрмәкәй районларында хеҙмәтләндерәсәк.

✓Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Ботаника баҡсаһы уны ҡарарға килеүселәр өсөн сәғәт 10-дан алып 18-гә тиклем аҙна дауамында ял көндәрһеҙ эшләй. Оранжереяға килеүселәр менән эшләү графигы өфөләрҙең һәм республика халҡының күпләп мөрәжәғәт итеүе айҡанлы үҙгәртелгәйне. Хәҙер Ботаника баҡсаһына эш көндәрендә генә түгел, ял көндәрендә лә килергә була.

✓Өфө хакимиәтенең рәсми сайтында яңы рубрика булдырылды, унда Башҡортостан баш ҡалаһының иҫтәлекле урындары тураһында мәғлүмәт урынлаштырылған, тип хәбәр иттеләр мэрияның матбуғат хеҙмәтенән. Яңы рубрика "Уфимские ведомости" гәзите менән берлектә булдырылған. Сайттың яңы бүлегендә 15 биләле архитектура объекттының барлыҡҡа килеү тарихы тураһында мәғлүмәт бар. Улар араһында - Өфө циркы, Телеүҙәк, "Ағиҙел" ҡунаҡханаһы, Башҡорт дәүләт аграр университеты.

✓Өфөнөң мәшғүллек үҙәге "Эшҡыуарлыҡ нигеҙҙәре" тигән ике аҙналыҡ түләүһеҙ курстар ойоштора. Уҡыусылар 12 ноябрҙән 23 ноябргә тиклем дауам итәсәк. Өфө ҡалаһы, Ибраһимов бульвары, 47/1 йорт адресы, йә булмаһа 8(347)251-51-83 телефоны буйынса шылтыратып яҙылырға була.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



**Демография мәсьәләһе ҡайһы саҡ диңгеҙҙәге тулҡынға оҡшап китә - ниндәйҙер ваҡытта унда штиль, ә инде мәле етһә, Айвазовский картинаһындағы "туғыҙынсы тулҡын" ябырылғандай. Шул рәүешле бер мәл баш ҡалала мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары бушап тигәндәй ҡалды һәм белем биреү өсөн тәғәйенләнгән бинаhарға реконструкция үткәрелеп, улар йә торлаҡ бина итеп, йә икенсе маҡсатта файҙаланылды. 2008 йылдан башлап Өфө илебеҙҙә халҡы миллиондан ашҡан ҡалалар араһында тыуым арткан, ә үлем кәмегән берҙән-бер мегаполис булып иҫәпләнһә, былтыр был исемлеккә Екатеринбург, Новосибирск, Силәбе һәм Ҡаҙан ҡалалары ла өҫтәлгән. Быйыл иһә 8 ай мәғлүмәттәре буйынса баш ҡалала 10 470 бала тыуған. Был инде былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 665 сабыйға күберәк. Демография күрһәткестәре яҡшырыуы ҡабаттан балалар баҡсалары проблемаһын көн үҙәгенә сығарҙы. Ошо мәсьәләгә бер аҙ асыҡлыҡ индереү йәһәтенән Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитовҡа мөрәжәғәт иттек:**

# ДЕМОГРАФИЯЛА...

## "туғыҙынсы тулҡын"!

- Мәктәпкәсә белем биреү системаһы үҫеше мәсьәләләрен хәл итеү маҡсатында 2010 йылдан "Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округының 2010-2012 йылдарға мәктәпкәсә белем биреү системаһының үҫеше" Ҡала маҡсатлы программаһы тормошҡа ашырыла, - тине Сынтимер Биктимер улы. Уның төп маҡсаты - мәктәпкәсә белем биреү хеҙмәтен һәр ата-әсә файҙалана алырлыҡ кимәлгә еткереү. Йәғни йәше еткән һәр бала балалар баҡсаларына бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ алынырға тейеш. Был мәсьәләне тулыһынса атҡарыу, әлбиттә, ваҡыт талап итә, ләкин бөгөн шуны әйтергә мөмкин: ошо программа тормошҡа ашырылған осорҙа балалар баҡсаларында урындар 29 меңдән 36 меңгәсә артты. Ете яңы балалар баҡсаһы төҙөлдө, йыл һуңына тиклем тағы ла өс балалар баҡсаһын файҙаланыуға тапшырыу планлаштырыла. Элек балалар баҡсалары булып, ҡасандыр улар бушап ҡалып, икенсе маҡсатта файҙаланылған һигеҙ балалар баҡсаһы бинаһы кире ҡайтарылды, өс бинала әле ремонт эштәре бара.

Дөйөм алғанда ҡалала 36 126 урынлыҡ 242 мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы эшләй, уларға мәктәпкәсә йәштәге 45 мең бала йөрөй. Ошо 242 һанына 226 балалар баҡсаһы һәм 3 балалар баҡсаһы-мәктәп муниципаль белем биреү учреждениелары; 5 ведомство балалар баҡсаһы; белем биреүгә лицензияһы булған 8 дәүләттеке булмаған мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы инә. Бынан тыш, мәктәпкәсә белем биреүсе 39 учреждениела белем биреүгә лицензияһы булмаған 39 шәхси эшҡыуар балаларҙы ҡарау һәм тәрбиә биреү хеҙмәте күрһәтә.

**➔ Бер генә һанға ныҡлап туҡталғы килә: дөйөм алғанда ҡалала 36 меңдән ашыу урынлыҡ мәктәпкәсә учреждение иҫәпләнһә лә, уларға 45 мең бала йөрөй. Тимәк, был учреждениелар булған ҡеүәтенән артыҡ хеҙмәт күрһәтә, ә балалар баҡсаларына сират кәмемәй. Бер кемгә лә сер түгел, балаларҙы балалар баҡсаһына урынлаштырыу еңелдән түгел...**

- 2011 йылдың 1 сентябренән ата-әсәләр балаларын балалар баҡсалары сиратҡа мәғариф бүлегенә барып тормайынса, интернет аша ғына ҡуя ала. Ә инде ҡала буйынса балаларҙы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларына ылыҡтырыу күләме быйыл 71 процент тәшкил итте. 3 йәштән ете йәшкә тиклем балаларҙы урынлаштырыу - 90, 5 йәштән ете йәшкә тиклемгеләр - 31,4 процент тәшкил итә. Был мәктәпкәсә йәштәге барлыҡ балалар беренсе синыфҡа барғанға тиклем мәктәпкәсә белем алыу мөмкинлегенә эйә икәнлеген раҫлай. Шулай ҙа, һандар күрһәтеүенсә, проблема бар, һәм беҙ уны хәл итеү юлдарын эҙләйбеҙ. Мәҫәлән, мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында балаларға урындар булдырыу маҡсатынан балалар баҡсалары-башланғыс мәктәптәр үҙгәртеп ҡоролдо, ғәмәлдәге балалар баҡсалары бинаhары камиллаштырылды. Ҡыҫҡаһы, программаны тормошҡа ашырыу осоронда мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн өҫтәмә рәүештә 1000 урын булдырылды. Мәктәпкәсә белем биреү хеҙмәтен һәр кем ала алһын өсөн яңы формалар ҙа ғәмәлгә индерелә: улар ғаилә тәрбиәһе төркөмдәре, ҡыҫҡа көн төркөмдәре, йәш ярымдан өс йәшкә тиклем балалары булған ғаиләләргә компенсация түләү. 2011 йылдан ҡалала инвалид балаларға өҫтәмә белем биреү хеҙмәтен күрһәтеү ойошторолдо.

**➔ Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә балаларҙы урлау осраҡтары ишетелә. Хәҙер хатта мәктәптәрҙә лә балаларҙың именлеген тәьмин итеү маҡсатынан төрлө һаҡ системалары ҡуйылған...**

- Беҙҙә лә был мәсьәлә күҙ уңынан ысҡындырылмай. Бөгөнгә балаларҙың һәм хеҙмәткәрҙәрҙең именлеген тәьмин итеү маҡсатынан 125 мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһында (55 процент) видеокүҙәтеү һәм инеүҙе контролләү системаһы (инеү ишеге пластик карта ярҙамында асыла) ҡулайлаштырылған. Был эште киләсәктә лә яйлап тулыһынса тормошҡа ашырырбыҙ, барлыҡ мәктәпкәсә учреждениелар һаҡ хеҙмәте менән тәьмин ителеп бөтөр, тип планлаштырабыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өфө ҡала округы хакимиәте тормошҡа ашырған программа үҙенең кәрәклеген раҫланы һәм ошолай, йылына унар балалар баҡсаһын сафҡа индереп торғанда, был проблеманы өс йыл эсендә йыйып сығыу мөмкин, тип күҙаллана. Әгәр инде сираттағы демографик "туғыҙынсы тулҡын" күҙәтелгәндә, мәсьәләнең сиселеше тағы ла бер нисә йылға арткараҡ шылдырылыуы ла ихтимал.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ӘБЕЙҘӘР, ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

**Баш ҡалала көн һайын ваҡ хулиганлыҡ һәм тыйылған урында спиртлы эсемлектәр эсеүселәргә ҡаршы 500-гә яҡын административ протокол төҙөлә. 25-30 тирәһе кеше закон буйынса тәғәйенләнгән штрафтарҙы түләмәгән өсөн 1 тәүлектән алып 15 тәүлеккә тиклем административ ҡулға алыуға дусар ителә. Волга буйы федераль округы төбәктәре буйлап өлкән ҡатын-ҡыҙҙарҙы үлтереп йөрөгән маньяк әле ҡулға алынмаған. Ошо һәм башҡа яңылыҡтар менән журналистарҙы Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының Өфө ҡала идаралығы начальнигы урынбаҫары, полиция полковнигы С.И.Сергеев таныштырҙы.**

Йылдың үткән туғыҙ айына баһа биреп, С.Сергеев дөйөм алғанда криминоген хәлдең тотороҡланыуын, енәйәттәр һанының бер аҙ кәмеүен, уларҙы фашлауҙың элекке кимәлдә ҡалыуын билдәләп үтте. Шулай уҡ көс ҡулланып талауҙар 40 процентҡа һәм урлашыуҙар 32 процентҡа кәмегән икәне лә әйтеп үтелде. Ҡалала педофилдар бандаһы йөрөүе, шулай уҡ йорт хайуандарын порошок менән ағыулап үлтереүсе төркөм тураһындағы хәбәрҙе полиция полковнигы инҡар итте. Журналистарҙы иғтибарлы булырға, халыҡтың аңын юҡ-бар мәғлүмәт менән томаламаҫҡа, дөрөҫлөккә тап килмәгән факттар менән баштарын бутамаҫҡа саҡырҙы.

Шулай уҡ баш ҡаланың баш полицейскийы нигеҙҙә өлкән ҡатын-ҡыҙҙарҙы үлтереү менән шөғөлләнеүсе маньяктың федераль кимәлдә эҙләнеүе тураһында ла хәбәр итте: "Беҙ уның ҡиәфәтен, нимә кейгәнен, ҡара эштәрен нисегерәк тормошҡа ашырғанын яҡшы беләбеҙ. Енәйәтсенең фоторобbooты эшләнеп, бар ил буйлап таратылған да инде. Әлеге ваҡытта маньякҡа бар һиҙаттары менән дә оҡшаған кеше табылды. Ләкин төп шаһит был кешелә енәйәтсене танымаhы. Эҙләү дауам итә", - тине ул.

## ИСЛАМ ҠИММӘТТӘРЕН ӨЙРӘНЕҮ...

**Ислам мәғарифы ниндәй булырға тейеш? Өфөлә Үҙәк диниә назаратына ҡараған Рәсәй Ислам университетының алты йыл эшләп килеүен иҫәпкә алғанда, был һорау урынлы. Ошо осор эсендә юғары уҡыу йорто Рәсәйҙең һәм БДБ-ның мосолман мәхәлләләре өсөн 700-ҙән ашыу имам-хатыб уҡытып сығарған.**

Ләкин әленән-әле уртаға һалып кәңәшләшеү һәм ҡәтғи ҡараштар талап иткән яңы проблемалар сығып тора. Шуларҙың береһе ислам мәғарифының артабан ниндәй йүнәлештә үҫәсәгенә ҡағыла. Нимә мөһимерәк: Рәсәй Ислам университеты сиктәрендә дин әһелдәре һәм дини уҡыу йорттары өсөн педагогтармы, әллә Башҡорт дәүләт педагогия университетында ислам ғилемен ныҡлап өйрәнгән юрист ар әҙерләүме? Өфөлә үткән "XXI быуаттың мәғариф киңлектәрендә ислам идеалдары һәм ҡиммәттәре" V халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция сиктәрендә ҡаралған төп һорау ошо булды ла инде. Конференцияла Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты рәйесе Тәлғәт Таджетдин менән менән БДПУ ректоры Раил Әсәҙуллин ҡатнашты.

Сарала үрҙә телгә алынған мәсьәлә Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә нисек хәл ителеүе, сит илдәрҙән ҡабул итеп булырҙай тәжрибә хаҡында ла һүҙ барҙы. Философия фәндәре докторы В.С. Хәзиевтың, сит ил ҡунаҡтары - Словакиянан теология фәндәре докторы Михаел Моравчиковтың, Австриянан Сәйәси тикшеренеүҙәр институты профессоры Дитер Зегерттың, Тунис Ислам университеты ректоры Абдулжәлил бин Абделкәрим Сәләмдең сығыштары мауыҡтырғыс булды.

Ҡайһы бер идеялар һәм тәҡдимдәр яҡлау тапты, икенселәре аудитория тарафынан ҡабул ителмәне. Ләкин ҡатнашыусылар бер нәмәлә берләште: Рәсәйҙә ислам мәғарифын үҫтереүгә булышлыҡ иткән махсус программаны тормошҡа ашырыу һөҙөмтәле, донъя стандарттарына яуап биргән Рәсәй уҡытыу системаһын эшләргә булышлыҡ итәсәк.

**Зөфәр ТИМЕРБУЛАТОВ,**
**философия фәндәре кандидаты.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Үпкәгә ҡапыл һалҡын тейһә

Сөгөлдөр һутын әҙерләп, 2-3 сәғәттән һуң ашар алдынан көнөнә 3-4 мәртәбә ярты-шар стакан эсергә.

### Ҡан баҫымы күтәрелһә

4-5 бешкән сөгөлдөр, 1-2 ҡыяр, 2-3 өләш һарымһаҡ алына. Сөгөлдөр менән ҡыяр ит турағыстан үткәрелә, уға иҙелгән һарымһаҡ ҡушып болғатыла. Укроп, петрушка һибергә һәм 1-2 ҡалаҡ үҫемлек майы ҡушырға. Ҡан баҫымы яҡшырғансы ашарға.

### Аяғың тирләһә

Кистән аяҡтарға төйөлгән имән ҡайырыһы онтоғы һибеп, ойоҡбаш кейеп ятырға. Иртәнсәк аяҡтарҙы һалҡын һыу менән йыуырға.

### Сәс ҡауаҡлаһа

1 стакан ҡайнаған һыуға 1 ҡалаҡ кесерткән япрағы һалып, 1,5 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Сәсте йыуғас, аҙ ғына киптерергә һәм әлеге төнәтмәне баш тиреһенә һөртөргә. Оҙайлы ваҡыт эшләһәң, ҡауаҡ та бөтә, сәс тә ҡойолмай.

### Лимфолейкоздан

25-әр грамм гөлйемеш менән ҡара ҡарағатты ҡайнар һыуҙа бешерергә, төнәтергә. Шуны ярты стакан көләмендә көнөнә 3-4 мәртәбә эсергә.

### Гөлйемеш

Организмдың төрлө ағзаларындағы таштарҙы иретеү өсөн ваҡлап туралған гөлйемеш тамырын ҡулланығыҙ. 1 стакан һыуға 2 ҡалаҡ гөлйемеш тамыры һалып, 15 минут ҡайнатырға, һыуынғас, һөҙөргә. Бер аҙна дауамында көнөнә 3 мәртәбә 1-әр стакан эсергә.

### Үҙәк көйһә

❖ Үҙәк көйгәндә бармаҡ битенә тоҙ элэктереп йотоу ҙа ярҙам итә.

❖ Ашауҙан һуң бер семтем тоҙ йотоу йәки бәләкәй генә бер киҫәк сельдь ашау ҙа шифа бирә.

❖ Шулай уҡ 1 стакан һыуға 1 ҡалаҡ алма һеркәһе ҡушып эсеү ҙә үҙәк көйөүҙе бөтөрә.

❖ 1-2 сәғәт һайын 1 киҫәк киптерелгән аҡ икмәк ашау ҙа ыңғай һөҙөмтә бирә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА

# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

## Туғыҙынсы дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Изге яҙмалар тураһында һөйләгән саҡта, Муса бәйғәмбәр - Тәүратты, Ғайса бәйғәмбәр - Инжилды, Мөхәммәт бәйғәмбәр Ҡөрьән-Кәримде таратҡан, килтергән, халыҡҡа ҡалдырған, тигән рәүешле һөйләргә кәрәк. Бер генә бәйғәмбәр ҙә был Изге яҙмаларҙы үҙ ҡулдары менән яҙмаған. Шуға ла "Изге яҙмалар Алла тарафынан ебәрелгән" тип аңлатырға кәрәк.

Изге яҙмалар бер-береһен инҡар итмәй. Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙе үк Ҡөрьәнгә тиклем булған изге яҙмаларға оло ихтирам күрһәтә. Бер генә дингә өҫтөнлөк биреү, Иҫке Ғәһедте һәм Яңы Ғәһедте кире ҡағыу - Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең үҙен ихтирам итмәү ул. Изге яҙмаларҙа бер үк бәйғәмбәрҙәр күрһәтелә. Был китаптар диндәрҙе лә тиң күрә, халыҡтарҙы ла айырмай. Уларҙың маҡсаты - әҙәпкә, яҡшылыҡҡа, татыулыҡҡа саҡырыу.

## Туғыҙынсы дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Яҡшылыҡ менән яуызлыҡ төшөнсәһен бөтөн диндәр ҙә бер төрлө аңлай. Әммә ҡайҙан килеп сығыуы тураһында фараздар ғына төрлө. Ғөмүмән, нимә ул Яҡшылыҡ? Нимә ул Яуызлыҡ? Тормоштан миҫалдар килтерәйек. Әйҙәгеҙ, уйлайыҡ, атай-әсәйгә булған мөнәсәбәттә ул нисек сағыла? Уҡытыусыға, дуҫ-ишкә? Тәбиғәткә? Ғаиләгә? Мал-тыуарға? Шулай итеп, дәресте яҡшылыҡ менән яуызлыҡ төшөнсәһен уҡыусыларҙың үҙҙәренең аңлау кимәленән сығып башлау яҡшы булыр. Ҡайҙан килеп сыҡҡан һуң ул был донъяла ошо төшөнсәләр? Бына, мәҫәлән, Урал батыр эпосында Яҡшылыҡ менән Яманлыҡ төшөнсәләре Урал батыр менән Шүлгән аша сағылдырыла. Был төшөнсәләрҙең башланғысы - кешенең йәшәү маҡсатында. Үҙе өсөн генә йәшәргә теләйме ул, әллә үҙен генә түгел, башҡалар мәнфәғәтен дә хәстәрләйме, халыҡ өсөн йәшәйме? Эпоста шундай ваҡиға бар. Шүлгән ҡустыһы Уралға көнләшеп, уны үлтермәксе була. Урал менән уландары бергәләшеп Шүлгәнде тотоп алалар һәм Урал ағаһына былай ти:

*Дейеүҙәрҙе дуҫ иттең,*
*Кешеләрҙе үс иттең;*
*Йөрәгеңде таш иттең,*
*Атам йөҙөн ят иттең,*
*Әсәм һөтөн ыу иттең…*

Бына ҡайҙа икән яуызлыҡтың башы. Эпоста Урал менән Шүлгәндең йәшәү маҡсатының тәүҙән үк билдәле булыуы асыҡ күрһәтелә. Төрлө диндәр был төшөнсәләрҙе нисек күрһәтә? Әйҙәгеҙ, шул хаҡта һөйләшәйек, тип, теманы дәреслек буйынса дауам итеү - уҡыусыға аңлатыу өсөн еңелерәк булыр.

## Туғыҙынсы дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Кешенең әхлаҡи азатлығы тураһында һөйләгән саҡта, уҡыусыларҙың үҙҙәренән башларға кәрәк. Нимә ул азатлыҡ? Кеше ни теләһә, шуны эшләй аламы? Минең хоҡуғым бар, тип кенә йәшәй аламы? Мәҫәлән, төн уртаһында берәй ҡайҙан ҡайтып киләһең һәм ҡыҫҡырып һөйләшәһең йәки машинаңда музыка аҡырта башлайһың. Был күренеш азатлыҡтан файҙаланыуҙы аңлатамы? Бәхәс барышында уҡ әгәр береһе икенсеһен туҡтатһа, тыйһа, класташының фекеренән көлһә, һорарға кәрәк: әле һин дөрөҫ эшләнеңме? Уҡыусылар бәхәсләшеп бөткәндән һуң, һығымта яһарға кәрәк. Ә һығымта шулай булыр: һәр кеше үҙ азатлығынан файҙаланырға тейеш. Әммә башҡаларҙың мәнфәғәтен күҙәтмәү - әхлаҡһыҙлыҡ, яманлыҡ. Самаһыҙлыҡтың да самаһы бар, тигән мәҡәлде онотоорға ярамай.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ТҮҢӘРӘК КЕНӘ ЙӘШТӘБЕҘ

**6 ноябрҙә баш ҡалабыҙҙа Нефтселәр мәҙәниәт һарайының ҙур залында "Киске Өфө" гәзитенең сыға башлауына 10 йыл тулыуға арналған театрлаштырылған тамаша булып үтте. Сараның оло зал тулы тамашасы йыйып, юғары профессиональ кимәлдә, йәнле һәм зауыҡлы итеп үткәрелеүендә мотлаҡ сценарий авторы, билдәле яҙыусы, Ш. Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Зөһрә Бураҡаеваның, режиссеры, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Башҡортостандың һәм Рәсәй Федерацияһының халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшевтың, тамашаның төп йөгөн тартыусы М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры йәш актерҙары Фирғәт Ғарипов, Айһылыу Йомағолова, Руслан Хайсаров, Ирада Фазлаева, Артур Кәбиров, Юнир Ҡоланбаевтың роле баһалап бөткөһөҙ булды.**

# "КИСКЕ ӨФӨ" ТАМАШАҺЫ - профессионалдар йыйыны

Кисәне алып барыусы йәш актерҙар бер-бер артлы милләт, кешелек үҫеше өсөн төп йүнәлеш булырҙай, милли идеяға торош фекерҙәрҙе тамашасының йөрәгенә үтеп инерлек итеп бәйән итә:

- Бал ҡорто күсенең төп йәшәү законы - Конституцияһы - берҙәмлек һәм фиҙаҡәрлек. Күс ни тиклем көслө булған һайын, ул балды ла күберәк етештерә, күберәк бала тыуҙыра, күберәк күс айыра. Тимәк, әгәр ҙә беҙ, бал ҡорто күсендәге кеүек көслө ғаиләләрҙә күберәк балалар тыуҙырып тәрбиәләһәк, һан яғынан да, сифат яғынан да күпкә алға киткән булыр инек...

-Рәсәй кимәлендә милли идея эҙләйҙәр һәм таба алмайҙар. Ә беҙҙең милли идея электән бар, булған, буласаҡ. Әллә ниндәй башҡа төрлө идея эҙләү кәрәкмәй. Милли идеябыҙ -үҙ еребеҙҙә үҙ телебеҙҙә һөйләшеп, ғөрөф-ғәҙәт үтәп, үҙаллы һәм ғорур йәшәү. "Башҡортостансы" милли идеяһының нигеҙендә, тамырында башҡорт милли идеяһы ятырға тейеш...

-Милләт Ҡото - ул Шәхестәр. Шәхестәр - тәбиғәттең милләткә яһаған иң ҡиммәтле бүләге. Тәңре был бүләкте халыҡтың мәртәбәһен күтәрер өсөн бирә. Әммә Шәхес Тәбиғәт тарафынан ни тиклем генә талантлы итеп тыуҙырылмаһын, туған халҡының телен, тарихын, йолаларын белмәһә, бик һәйбәт белгес кимәленә күтәрелһә лә, тулы ҡанлы Шәхес була алмай. Туған телендә йырламаған, туған телен аңламаған кеше халҡының күңелен дә аңлай алмай. Халҡының күңелен аңламаған кеше уның киләсәген дә күҙаллай алмай. Шуға ла милли идеяның нигеҙендә һәр кемдә милли үҙаң тәрбиәләү ятырға тейеш...

Гәзиттең 10 йыллығына арналған сараның төп мәғәнәүи йөкмәткеһен билдәләгән, тамашасыларҙы тәрән уйланырға мәжбүр иткән өлөшө йәш актерҙар башҡарыуында яңғыраған тап ошондай фекерҙәргә ҡайтып ҡала ла инде. Республикабыҙҙың билдәле шәхестәре, зыялылары, ғалимдары, яҙыусылары, сәйәсмәндәре ошондай милли идея, тарих, сәнғәт, мәҙәниәт, ғаилә мөхите һәм башҡа проблемалар хаҡындағы фекерҙәрен гәзит асылғандан бирле әйтә килә. Ғөмүмән, "Киске


Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡотлай.


Ирек Ишмөхәмәт улын Сибай һәм Өфө ағинәйҙәре таҡмаҡлап-йырлап ҡаршы алды.


БР Хөкүмәте вице-премьер Лилиә Ғүмәрова ҡотлай.








Тамашасылар шулай кинәнеп аралашты.

**✓ *Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте вице-премьеры Лилиә Ғүмәрова баҫманың 10 йыллығы менән ихластан ҡотлаһа, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов "Киске Өфө"гә еңел автомашина бүләк итте.***



Өфө" гәзитенең үҙенсәлеген билдәләүсе төп сифаты ла уның биттәрендә ошондай арҙаҡлы шәхестәрҙең төрлө көнүҙәк проблемалар хаҡындағы ҡыҙыҡлы һәм фәһемле әңгәмә-бәхәстәренән туҡыла бит. Был йәһәттән редакция хеҙмәткәрҙәре республиканың ғилми, әҙәби-мәҙәни көстәрен ижтимағи фекер үҫеше йүнәлешендә бер ҡорға туплауға өлгәште лә инде. Баҫманы был осраҡта ғилми-ижтимағи фекер тресы тип тә атарға мөмкин булыр ине.

Ә инде гәзиттең 10 йыллығы тамашаһына килеүселәр тап ошондай, йәғни профессиональ ғилми-мәҙәни-әҙәби эшмәкәрлектең һөҙөмтәһен күрҙе. Ғөмүмән, профессионаллек тап ошо рәүешле булырға тейештер ҙә. Кисәлә ғилми, мәҙәни, әҙәби, актерлыҡ, режиссерлыҡ һәм дә журналислыҡ профессионаллеге бергә ҡушылып, шундайын үҙенсәлекле синтезды тәшкил итте.

Халыҡсанлыҡты профессионаллектең иң юғары нөктәһе тиҙәр. Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ. Сибай институты нигеҙендәге Асия Ғәйнуллина етәкләгән "Арҡайым" фольклор түңәрәге башҡарыуындағы "Мөнәжәт-тәсбих" сығышы менән Баязит Ғәйнуллиндың ҡыл ҡумыҙға ҡушылып өзләүе һәм йырлауы кисәнең иң илаһи өлөшө булғандыр. Шулай уҡ Артур Ҡәйепҡолов, Заһир Иҫәнсурин башҡарыуындағы йырҙар, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Республика башҡорт гимназия-интернатының бейеү ансамбле, баш ҡалабыҙҙың "Мираҫ" бейеү ансамбле, донъяның виртоуз ҡумыҙсыһы Миңлеғәфүр Зәйнетдиновтың балалары менән сығышы, Әбйәлилдән таҡмаҡсы Заһит Нурғәлиндың, "Тамыр" балалар ансамбле сығыштары профессионаллектең иң юғары нөктәһе булды.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Республикабыҙ һәм баш ҡалабыҙ етәкселеге лә Өфөнөң башҡорт телендәге тәүге матбуғат баҫмаһына матур хөрмәт күрһәтте һәм үҙенең профессиональ бурысын юғары кимәлдә үтәне. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте вице-премьеры Лилиә Ғүмәрова баҫманың 10 йыллығы менән ихластан ҡотлаһа, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов "Киске Өфө"гә еңел автомашина бүләк итте. БР Президенты Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Марат Мәрҙәнов, БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт агентлығы етәксеһе Борис Мелкоедов исеменән дә ҡотлау еткерелде. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румиль Аҙнабаев иһә "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаеваға ҡоролтайҙың "Ал да нур сәс халҡыңа!" миҙалын тапшырҙы. Әлбиттә, баҫма өсөн иң мөһим бүләктәрҙең береһен Сибай педагогия институты директоры Зиннур Йәрмөхәмәтов эшләне: уның исеменән институттың алдағы ярты йыллыҡҡа 200 дана гәзиткә яҙылыу хаҡындағы килешеүе тапшырылды. Бындай үҙенсәлекле бүләкте кисәгә килеүсе тамашасылар ҙа яһаны, 70-тән ашыу кеше "Киске Өфө" гәзитенә яҙылды.**

**Әйткәндәй, ошо кистә гәзиткә яҙылыусылар араһынан Өфөнән Ғәлимйән Фәйзрахманов - микротулҡынлы мейес, Саҡмағош районынан Лилиә Ғиззәтуллина, Чесноковка ҡасабаһынан Р. Сабитова, Өфөнән Фәнәзит Йыһангиров, Әлмира Исхаҡова, Зифа Йәнғәлина - электр сәйнүге, Өфө районы Миловка ауылынан Фидалия Ишкинина, Өфөнән Венера Хажина, Зиннур Нурғәлин, Сәлимә Линадзе "400 башҡорт халыҡ йыры" китабы кеүек бүләктәргә лайыҡ булды.**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**



Баязит Ғәйнуллин.



Артур Ҡәйепҡолов.

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Венера ХӘКИМОВА, Өфө ҡалаһы:** Уҙған ун йыл ваҡыт беҙгә, гәзиттең тоғро уҡыусыларына, бер һулыштай ғына булды. Минеңсә, "Киске Өфө" кеүек мәртәбәле баҫманың йәшен үткән йылдарға ҡарап түгел, ә уның халыҡҡа, илгә килтергән файҙаһы һәм әһәмиәтенән сығып баһалау дөрөҫөрәк буласаҡ. Ошо ваҡыт эсендә күңелде ярһытҡан, йөрәкте йышыраҡ тибергә мәжбүр иткән, иртәгеһе көнгә ышаныс менән ҡарарға, ерҙә ныҡлы баҫып торорға өйрәткән мәҡәләләрҙән сығып һүҙ йөрөткәндә, баҫма үҙенең олуғ йәшен туйлай, тип тулы ышаныс менән әйтергә мөмкин. Ғөмүмән, гәзит биттәрендә донъя күргән һәр мәҡәләнең әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ, сөнки уларҙың һәр ҡайһыһы кешегә уйланыу өсөн тос орлоҡ, донъяуи хәлдәр хаҡында тулы һәм аныҡ, асыҡ мәғлүмәт биреүе менән әһәмиәтле. "Киске Өфө"нө юбилейы менән ҡотлайым. Халҡыбыҙҙың таянысы, ярҙамсыһы һәм терәге булып, тағы оҙаҡ йылдар йәшәүен теләйем.

**Рәсүл СӘҒИТОВ, радиожурналист:** Мәғлүмәт биреү сараһының йөҙөн билдәләгән, халыҡ араһында уны таныҡтан йүнәлеше булырға тейеш. Тап ошо бушлыҡты тултырып, матбуғат сараһы мәғлүмәт донъяһында үҙ урынын билдәләй. Минеңсә, милләт, тел, ил яҙмышын хәстәрләп, уның рухи хазиналарын тергеҙеү өсөн янып-көйгән, кешеләрҙең күҙҙәрен асҡан "Киске Өфө" үҙ йүнәлешен тапҡан һәм ошо тәңгәлдә алһыҙ-ялһыҙ әүҙем эшләй. Гәзитте икенсе яҡҡа бороп ебәрергә теләктәр ҙә, тәҡдимдәр ҙә булғандыр, ләкин ул тәүҙән үк алған маҡсаттарынан ситкә тайпылмайынса, еңелерәк темалар һайлап, "һары" пресса юлына баҫмайынса, ҡыйыу аҙымдар менән алға бара. Ошо яғы менән ул ҙур хөрмәткә лайыҡ.

Бөгөнгө тамашаны ҡарап, үрҙәге һүҙҙәргә раҫлау алдым. Сара бик яҡшы ойошторолған. Килеүем менән шуға иғтибар иттем: кешеләр бер-береһен байрам менән ҡотлай, шуның менән байрам мөхитен бар мәҙәниәт йортона таратып, башҡорт халҡының ҡунаҡсыллыҡ йолаһын күрһәтәләр. Зал тултырып килеүселәр араһында ябай гәзит уҡыусыларҙың да, Хөкүмәт вәкилдәренең дә булыуы гәзиттең оло абруйы хаҡында, "Киске Өфө" әйткән һүҙҙең халыҡҡа барып етеүе тураһында һөйләй.

**Артур ДӘҮЛӘТБӘКОВ, БР Журналистар союзы идараһы рәйесе:** Республикала башҡорт телендә нәшер ителгән гәзит-журналдар байтаҡ ҡына һәм уларҙың араһында "Киске Өфө"нөң үҙенең лайыҡлы урыны бар. Ун йыл элек был баҫманың барлыҡҡа килеүен тәбиғи хәл тип иҫәпләргә кәрәк, сөнки халыҡтың рухын уятырлыҡ гәзит милләтебеҙгә бик кәрәк ине һәм "Киске Өфө" гәзите был йәһәттән барыһының да өмөтөн аҡланы. Һәр заманда ла үҙенең йөкмәткеһе, рухы менән халыҡҡа яҡын баҫмалар була. Үткән быуаттың туҡһанынсы йылдарында башҡорт донъяһын яҡтыртыусы, барыһын да берҙәм идея менән тоҡандырыусы булып "Йәшлек" гәзите иҫәпләнһә, хәҙер күптәр "Киске Өфө"нө яратып уҡый. Башҡорт телендәге гәзит-журналдар ни тиклем күберәк булған һайын, шул тиклем яҡшыраҡ, сөнки уларҙың һәр береһенең үҙенең тәғәйен тематикаһы, үҙенең уҡыусылары бар. Ошолай күмәк булыуыбыҙ, бер-беребеҙгә терәк булып ижад итеүебеҙ үҙе үк ҡыуаныслы хәл.

**Айгөл БУРАНҒОЛОВА, Ә. Вәлиди исемендәге Милли китапхананың башҡорт әҙәбиәте һәм тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге мөдире:** Бөгөн беҙ иҫ киткес ихлас һәм күркәм тамашаның шаһиты булдыҡ. "Киске Өфө"нө яратып уҡыйбыҙ, әммә кисәлә гәзит биттәрендә даими яҡтыртылып килгән милли идея, рух, аң тураһындағы фекерҙәрҙе сәхнәнән актерҙар теленән ишеттереү үҙенсәлекле һәм бик уңышлы алым булды, тип иҫәпләйем. Тамашасылар араһында йәштәр күп ине, күптәр күңелендә генә йөрөткән күп һорауҙарына яуап тапҡандыр, быға тиклем был турала уйланмаһа, күңеленә һеңдереп ултырғандыр.

Баш ҡалала йәшәгән һәм эшләгән милләттәштәребеҙҙе берләштереүсе баҫма тип атар инем мин был гәзитте. Өфөлә яҡташтар ойошмалары әүҙем эшләй ҙә, тик беҙгә милләт булараҡ та берҙәм һәм бергә булыуыбыҙ кәрәк. Ғәҙәттә, халҡыбыҙҙың аҫыл ир-уҙамандары, гүзәл заттары төрлө концерттарға, осрашыуҙарға йыш йөрөмәй, ә "Киске Өфө" уларҙы ла бер урынға йыя алды, аралашыу майҙансығы ойошторҙо.

**Суфия ҠОРБАНҒӘЛИЕВА, Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисткаһы:** Халҡыбыҙҙың рухын сағылдырған иҫ киткес гүзәл гәзитебеҙ ул "Киске Өфө". Милләтебеҙҙең үҙаңын, булмышын уятыусы, бөйөклөгөн һәм абруйын күтәреүсе баҫма булараҡ, уның роле баһалап бөткөһөҙ. Үҙе ярған игелекле лә, изгелекле лә юлдан ситкә тайпылмай, артабан да абыныуһыҙ, төрлө ҡаршылыҡтарға осрамайынса алға барыуын теләйем.

**Римма ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА, Башҡортостан Республикаһы Мәғарифты үҫтереү институтының редакция-нәшриәт үҙәге директоры:** "Киске Өфө" кеүек матур гәзитебеҙ булыуы менән бәхетлебеҙ. Гәзит әле оло юлдың башында ғына тороуына ҡарамаҫтан, халыҡ араһында киң танылыу яуланы. Был баш мөхәррирҙең, журналистарҙың тырыш хеҙмәте, үҙ эшенә яуаплы ҡарауы, ил һәм милләт яҙмышына битараф булмауы һөҙөмтәһендә яуланған бейеклек. Артабан да әлеге дәрт-дарманығыҙҙың, рухығыҙҙың һүнмәүен теләйем, сөнки һеҙҙең ошо ут-ялҡынығыҙ беҙгә, гәзит уҡыусыларға ла күсеп, тормошобоҙҙо нурлай һәм йәмләй.

**Ғәлимә ҒӘЛИНА, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте факультеты доценты:** Беҙгә бай рухи аҙыҡ биреүсе гәзитте 10 йәшлек юбилейы менән ҡотлайым һәм уға алдағы көндәрҙә лә балҡып йәшәүен һәм йәшнәүен теләйем. "Киске Өфө" гәзите бөгөнгө көндә иң уҡымлы, иң көтөп алынған, яратып ҡабул ителгән баҫмаларҙың береһе. Шәхсән минең һәм шулай уҡ яҡындарым өсөн ул тәүге урынды биләй, тип тулы ышаныс менән әйтә алам. Гәзиткә яҙылмай ҡалғаныбыҙ юҡ, һәр саҡ алдырабыҙ һәм ҡулдан төшөрмәй уҡыйбыҙ. Әле бына ошо матур кисәлә лә апайымдың тыуған көнөнә бүләк итеп "Киске Өфө"нө яҙҙырҙым. Фәһемле, фекерле һәм тәрән йөкмәткеле гәзитте бүләк итеү үҙе ҙур ҡыуаныс.



"Өфө гимны"н шулай бергәләп яңғыраттыҡ.

*✓ Унда барлыҡ халыҡтар ҙа этнос статусына ҡалдырылған. Этностың территорияһы, үҙбилдәләнешкә хоҡуғы юҡ. Беҙҙең халыҡтың иһә, милләт булараҡ, ергә, телде һәм мәҙәниәтте үҫтереүгә, дәүләтселеккә хоҡуғы бар.*

# ҠАТЫҒА УЛТЫРМАЙЫҠ, аҡылға

**2012 йылдың 27 сентябрендә Рәсәй Федерацияһы Президенты Советы янындағы эш төркөмө "Рәсәй Федерацияһы дәүләт милли сәйәсәте стратегияһы" проектын ҡабул иткән. Әйтергә кәрәк, Рәсәй Федерацияһын ойоштороусы республикалар һәм уларҙа йәшәүсе киң йәмәғәтселек вәкилдәре тарафынан был документ ҙур ризаһыҙлыҡ менән ҡабул ителде. Философия фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр академияһы академигы Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН, философия фәндәре докторы, профессор Айрат ЗАРИПОВ һәм сәйәсәт фәндәре кандидаты Әхтәр БОҪҠОНОВ стратегия проекты хаҡында фекер алыша.**

**▸ Башҡортта "Йомшаҡ йәйеп, ҡатыға ултыртыу" тигән киң мәғәнәле бер әйтем бар. Рәсәй Федерацияһының дәүләт милли сәйәсәт стратегияһы проектын уҡып ҡараһаң, уның инеш өлөшөндә милләттәрҙең үҙбилдәләнешкә хоҡуғы хаҡында матур һүҙҙәр әйтеп кителә лә, был хоҡуҡтарҙы тормошҡа ашырыу механизмдары хаҡында, әйтәйек, республикалар, уларҙа йәшәүсе төп халыҡтар тураһында ләм-мим. Бында, күренеүенсә, Рәсәйҙә йәшәүсе күп һанлы милләттәр йомшаҡ йәйеп, ҡатыға ултыртыла төҫлө. Шулай түгелме?**

**Ә. Боҫҡонов:** Мин был йәһәттән үҙ фекеремде рәсми рәүештә белдерҙем. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетында үткән фекер алышыуҙарҙа ла ҡатнаштым. Шулай сәй Федерацияһын ҡороусылар булып күрһәтелгән.

Әгәр ҙә был стратегия программа документы булараҡ ҡабул ителә ҡалһа, ул бөтөн халыҡтарҙың да статусын кәметәсәк. Унда барлыҡ халыҡтар ҙа этнос статусына ҡалдырылған. Ә этнос нимә ул? Ул ҙур милләттең айырым бер өлөшө генә. Этностың территорияһы, үҙбилдәләнешкә хоҡуғы юҡ. Беҙҙең халыҡтың иһә, милләт булараҡ, ергә, телде һәм мәҙәниәтте үҫтереүгә, дәүләтселеккә хоҡуғы бар. Дәүләтселеккә килгәндә, милләт ниндәйҙер икенсе бер дәүләт эсендә лә, үҙенең дәүләтендә лә йәшәргә хаҡлы. Был шарт сәйәси шарттарҙан һәм ваҡиғаларҙан һәм милләттең үҙенең ихтыярынан тора. Был стратегияла күберәк кеше хоҡуҡтары хаҡында һүҙ бара. Ә халыҡ-ара нормаларҙа кеше һәм милләт ҡасан һәм нисек ҡулланырға һуң? Стратегияла улар буталып бирелгән. Беҙ этносты халыҡтың бер өлөшө генә тибеҙ. Бәлки, был йәһәттән икенсе фекерҙәр ҙә барҙыр? Халыҡ-ара милләт хоҡуҡтары документтарында төп ерле халыҡтың билдәләмәһе, кемдәрҙе төп ерле халыҡ тип атап булыуы барыһы ла яҙылған. Ә был стратегияла ул нормаларҙан ситкә сығыу күҙәтелә. Хәҙерге ваҡытта Берләшкән Милләттәр Ойошмаһына ингән халыҡтар шул нормаларға таянып эш итә. Әгәр ҙә ул нормалар донъя кимәлендә танылған һәм ҡабул ителгән икән, тимәк, улар донъяның иң алдынғы ҡарашлы эксперттары тарафынан тикшерелгән, тигән һүҙ. Һәр хәлдә, терминологик яҡтан документ бик аҡһай һәм ул халыҡ-ара нормаларға тап килтерелергә тейеш.

билдәләнешкә хоҡуғын инҡар итеүгә ҡоролһа, был сәйәсәт милли республикаларҙа ҡаршылыҡҡа осраясаҡ. Әлегә был ҡаршылыҡ фекер, идея көрәше кимәлендә генә бара. Әгәр ҙә уның менән экстремистар файҙалана башлаһа, нимә буласаҡ? Минеңсә, яңы стратегияла иң беренсе урынға федерация идеяһын ҡуйыу фарыз. Хәҙер ике термин йыш ҡулланыла: унитаризация һәм этнизация. Кемдер унитаризацияны - модернизацияға, этнизацияны архаизмға тиңләй. Ә кешенең милли үҙаңын ҡайҙа ҡуйырға һуң? Уны юйып та, кешенән йолҡоп алып та булмай. Халыҡ булған саҡта уның үҙаңы һәр ваҡыт йәшәйәсәк. Мәскәү ғалимдары йыш ҡына, бына был илдә былай, шул илдә шулай, әйҙә, беҙ ҙә шулай эшләйек, тип йәһәт кенә ниндәйҙер яңылыҡ индерергә тырыша. Европа илдәрендә, мәҫәлән, демократик дәүләт төҙөү йөҙәр-йөҙәр йылдар буйы барған. Ә беҙҙә нисек: Советтар Союзы тарҡалыуға егерме йыл үтте һәм ҡапыл икенсе ижтимағи ҡоролошҡа ырғырға тырышалар. Ул кимәлгә ҡапыл ғына барып етеп булмай бит инде. Рәсәй милләтен төҙөү өсөн ваҡыт үтеүе талап ителә. Бындай стратегия өҫтән килергә тейеш түгел, ә аҫтан, милләттәрҙең үҙенән сығырға тейеш. Әгәр ҙә милләт үҙе теләй икән, тик шул осраҡта ғына был идеяны тормошҡа ашырып буласаҡ.

был, үҙҙәренең сайтына ҡуйып, беҙҙе Интернет аша эҙләп таптылар. Баҡтиһәң, Себерҙәге халыҡтар үҙ-ара бәйләнештә торалар икән. Улар артабан бергәләп эш итергә теләк белдерҙе.

Шундайын мөһим документ хаҡында фекер алышырға барлығы бер ай ғына ваҡыт биргәндәр. Был мөмкин булмаған хәл. Тимәк, документты күҙ буяу өсөн генә таратҡандар һәм әгәр ҙә уға рәсми төҫ бирер булһалар, беҙҙең фекерҙе иҫәпкә алмаҫҡа ла мөмкиндәр. Ул сағында беҙгә нимә эшләргә? Документты Рәсәй кимәлендә тикшереү булһа, беҙгә унда барып сығыш яһарға кәрәк. Әгәр ҙә беҙҙе унда индермәһәләр, рәсми рәүештә белдереү яһап, үҙебеҙҙең альтернатив проектты ҡабул итергә була. Хатта стратегия юридик көскә эйә документ булмаған хәлдә лә.

**▸ Документта бер-береһенә ҡаршы килгән пункттар байтаҡ ҡына күренә. Шулар хаҡында нимә әйтерһегеҙ?**

**Ә. Боҫҡонов:** Эйе, стратегияла ундай урындар бик күп. Логик яҡтан да, юридик яҡтан да ҡапма-ҡаршылыҡлы урындар бихисап. Бер урында, мәҫәлән, барлыҡ халыҡтарҙың да тигеҙ хоҡуҡлы булыуы хаҡында һүҙ бара ла, икенсе урында урыҫ халҡының мәҙәни доминантаһы хаҡында әйтелә. Рәсәйҙә йәшәүсе халыҡтарҙың телен, мәҙәниәтен һаҡлау, аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү тураһында ла бер һүҙ ҙә юҡ.

булыуға ҡарамаҫтан, был турала һәр ваҡыт һәр урында һөйләргә, аңлатырға кәрәк. Беҙ, ғалимдар йыш ҡына ниндәйҙер мәсьәлә буйынса бер фекергә киләбеҙ ҙә, башҡалар ҙа шулай уйлай икән, тип яңылышабыҙ. Сөнки киң ҡатлам кешеләре был стратегия проектын уҡымайынса ғына фекер йөрөтә, уҡығандары ла үҙҙәре аңлаған кимәлдә генә ҡабул итә. Ҡайһылары үҙенең шәхси хәленә йә дөйөм сәйәси ситуацияға ҡарап фекер йөрөтә, һығымталар яһай.

Әлбиттә, беҙ бында иң беренсе нәүбәттә үҙебеҙҙең милләт мәнфәғәтен күҙ уңында тоторға тейешбеҙ. Рәсәйҙә ҡабул ителгән документты, ул концепция булһынмы, стратегиямы, юридик яҡтан быға тиклем йәшәп килгән ҡанундарға тура киләме-юҡмы, шул күҙлектән ҡарарға кәрәк. Конституциялар ҙа, башҡа төрлө закондар ҙа халыҡ-ара нормаларға яраҡлы булырға тейеш. Ошо йәһәттән алып ҡарағанда, әлеге стратегияның күп кенә урындары юридик яҡтан халыҡ-ара нормаларға ҡаршы килә. Дөрөҫөн әйткәндә, был документта Рәсәйҙең ҡайһы бер сәйәси ойошмалары үҙҙәренең йәшерен идеяларын тормошҡа ашырырға тырыша. Икенсенән, был документ берҙәм Рәсәй милләтен төҙөүҙе маҡсат итеп ҡуя. Беҙ бындай сәйәсәт менән бер ваҡытта ла килешә алмайбыҙ. Америка цивилизацияһы беҙгә өлгө була алмай. Халыҡ-ара хоҡуҡтар һәм ябай логика күҙлегенән ҡарағанда ла Рәсәйҙә "төп халыҡтар" тигән төшөнсә үҙәк урында булырға тейеш. Рәсәй Конституцияһында ла ошо территорияла үҙенең тарихи ватанында йәшәүсе халыҡтар Рәхоҡуҡтары икеһе ике төшөнсә итеп күрһәтелә.

**Ф.Фәйзуллин:** Был стратегияны әҙерләүҙә республикаларҙан бер кемдең дә ҡатнашмауы һиҙелә. Стратегияның 1-се пунктынан уҡ дөрөҫ булмаған ниндәйҙер сәйәси йүнәлеш алына. Унда Рәсәйҙең федератив ҡоролошҡа нигеҙләнеүе хаҡында фекер бөтөнләй юҡ. Документ Рәсәйҙең төрлө республикаларҙан торған федератив нигеҙен тулыһынса инҡар итә. Бер генә урында ла милли республикалар тураһында һүҙ юҡ. Шул уҡ ваҡытта милли проблемаларҙың ҡайһыһын федераль органдар, ҡайһыһын регион кимәлендә, ҡайһыһын муниципаль кимәлдә хәл итеү хаҡында ла әйтелмәгән. Балаларҙы мәктәптәрҙә туған телдә уҡытыу ҙа документта абстракт рәүештә генә билдәләнгән. Ә абстракт ғәмәлде бер кем дә үҙенә яуаплылыҡ итеп алмай, уға дөйөм һүҙ итеп ҡарай. Уны тормошҡа ашырырға ла, ашырмаҫҡа ла мөмкин.

Стратегияла гел ваҡ мәсьәләләр күтәрелә. Документ стратегия тип аталһа ла, унда стратегияның юлы күренмәй. Төрлө тармаҡтарҙа милли сәйәсәт нисек тормошҡа ашырылырға тейешлеген дә документта төҫмөрләп булмай. Беҙ теге йәки был милли сәйәсәтте хәл иткәндә илдең, республиканың иҡтисади мөмкинлегенән сығып, ниндәй маҡсаттар билдәләргә тейешбеҙ һуң?

**А.Зарипов:** Беҙ этнос, халыҡ, милләт тибеҙ. Был төшөнсәләрҙе

Әгәр ҙә беҙ этнос тип әйтәбеҙ икән, уның, ысынлап та, субъекты юҡ. Этнос дәүләт ҡора алмай, халыҡ-ара мөнәсәбәттәргә инә алмай. Бөтә донъя Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы бар, ә этностар ойошмаһы юҡ. Этнос нимә ул? Халыҡ нимә ул? Милләт нимә ул? Халыҡ араһында йөрөгәндә хатта уларҙың айырмаһын ныҡлап аңлаған һәм аңлата алған кешене осратмаҫһың. Бына беҙ үҙебеҙ ҙә, хатта ғалимдар булараҡ, был төшөнсәләрҙең айырмаһы тураһында бәхәсләшеп ултырғаныбыҙ бар. Был стратегияны ҡабул итер өсөн барлыҡ территорияларҙың, милләттәрҙең килешеүе, конвенцияһы булырға тейеш.

Ысынлап та, был мөһим документ һәм ундай документтар күптән булғаны юҡ беҙҙә. Рәсәйҙә хатта милли мәсьәләләр менән шөғөлләнеүсе министрлыҡ та юҡ хәҙер. Милли мәсьәләләрҙе хәҙер Төбәк үҫеше министрлығы ҡарамағында ҡалдырҙылар. Беҙҙең тарих Америкаға, Германияға, Францияға ҡарағанда бөтөнләй икенсе төрлө. Беҙ, башҡорттар, Башҡортостанда төп ерле халыҡ, сөнки беҙ ошо ерҙә тыуып, милли холҡобоҙ, булмышыбыҙ ошо ергә яраҡлы формалашҡан. Күпме быуын ата-бабаларыбыҙ ошо ерҙе һаҡлап ҡан түккән. Әгәр ҙә беҙ, стратегияла күрһәтелгәнсә, ситкә тайпылып китһәк, халыҡ хәтере тигән төшөнсәне ҡайҙа ҡуябыҙ? Әгәр ҙә Рәсәйҙең яңы милли сәйәсәте милләттәрҙең үҙ-

Был документ әле тикшереүгә генә сығарылған. Өфөлә этносоциология буйынса үткән сессияла Саха Якутиянан Сәнғәт һәм мәҙәниәт институты проректоры Ульяна Винокурова сығыш яһаны һәм документтың идеологик кимәлдә генә яҙылғанын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Улар документты ныҡлап тикшергәндәр һәм ысынбарлыҡта Рәсәйҙә 5 кенә милләт дәүләт төҙөүселәр булып ҡала аласаҡ, тине. Улар һаны буйынса миллиондан ашҡан милләттәр: урыҫтар, башҡорттар, татарҙар, чечендар һәм украиндар. Һуңғы халыҡ иҫәбен алыуҙа сыуаштар был исемлектән төшөп ҡалды.

**▸ Сессияла башҡа төрлө сығыштар ҙа булғандыр бит…**

**Ә. Боҫҡонов:** Сессияла сығыш яһаусы Рәсәй Фәндәр академияһының почетлы докторы Леокадия Дробижева стратегия төшөнсәһенең был документҡа бөтөнләй тап килмәүе хаҡында фекерен белдерҙе. Ә яҡуттарға килгәндә, мин уларҙы һуңғы арала бөтөнләй яңы яҡтан астым. Стратегия буйынса фекер алышыуҙарға иң беренселәрҙән булып, Татарстан да түгел, Кавказ халыҡтары ла түгел, яҡуттар ҡушылды. Улар Марат Ҡолшәрипов менән минең сығышты та-

Ғөмүмән, стратегияла Рәсәйҙә йәшәүсе халыҡтар һыуға ташланған бесәй балаһы хәлендә. Йәғни бесәйҙәрҙең ҡайһыһы йөҙөп сыға ала, ул уның үҙенең эше.

Икенсе ҙур ҡапма-ҡаршылыҡ: бер урында федерализм хаҡында әйтелеп үтелһә, документтың төп асылы унитар дәүләт ҡороуға йүнәлтелгән. Документта хатта административ-сәнәғәт төркөмдәре төҙөү хаҡында ла әйтелә. Ундай төркөмдәр иҡтисадҡа ҡараған төшөнсәләр. Ә бит стратегияла дәүләт төҙөлөшө хаҡында һүҙ барырға тейеш. Әгәр ҙә иҡтисад үҫеше талап итмәй икән, бер ниндәй ҙә сәнәғәт төркөмө төҙөп булмай.

Был документтың авторҙары йәшерелгән. Унда бер кешенең дә фамилияһы юҡ, ул ниндәйҙер министрлыҡ йә институт тарафынан да әҙерләнмәгән. Ул - ниндәйҙер аноним төркөм. Уның адресы ла, телефондары ла юҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, аноним документ тикшерәбеҙ. Стратегияны кемдәр ниндәй финансҡа таянып тормошҡа ашырырға тейешлеге хаҡында ла бер һүҙ ҙә юҡ. Әгәр ҙә финанс сығанағы юҡ икән, был ябай ҡағыҙ ғына.

Стратегияла этник мобилизация насар күренеш тип табыла. Тимәк, беҙ оло ғына бер яҙыусының 70 йәшлек юбилейын үт-

***✓ Стратегия проектындағы "русские и другие" тигән терминға иҫем китте. Был ниндәй төшөнсә һуң ул? Рәсәй ул Русь түгел, ә Рәсәй Федерацияһы, ә ул милли-территориаль берәмектәр ойошоуынан барлыҡҡа килгән.***



# Тиңәк... ултырайыҡ

Үҙ республикаларында йәшәүсе төп халыҡтарҙың статусын күтәреү тураһында ла бөтөнләй һүҙ юҡ. Статус хаҡында ғына ла түгел, республика һүҙе үҙе юҡ. Ә төп халыҡтың мәнфәғәтен инҡар итеү - ул милләттәр араһындағы конфликттың төп нигеҙе. Минеңсә, стратегия тап ошо мәсьәләнән башланып китергә тейештер ҙә. Әгәр ҙә халыҡтың статусы түбән икән, уны бөгөн бер аҙ түбәнгәрәк баҫып, әүрәтеп торорға булалыр, әммә ергә күмелгән нәмә нығыраҡ шытып, үҫеп, нығынып, шартлауға килтереүе лә бар.

Шунан һуң тағы ла стратегия проектындағы "русские и другие" тигән терминға иҫем китте. Был ниндәй төшөнсә һуң ул? Рәсәй ул Русь түгел, ә Рәсәй Федерацияһы, ә ул милли-территориаль берәмектәр ойошоуынан барлыҡҡа килгән. Беҙ башҡа халыҡтар түгел, ә шул уҡ урыҫтар кеүек, үҙ еребеҙҙә йәшәүсе төп халыҡтар.

Стратегия милли-мәҙәни автономиялар төҙөүҙе күҙ уңында тота. Ундай автономиялар диаспоралар өсөн генә ҡулай. Шул уҡ ваҡытта Свердловск, Силәбе, Ҡорған, Ырымбур, Һамар, Һарытау, Пермь, Ульяновск өлкәләрендә,Татарстандың бер нисә районында башҡорттар диаспорала түгел, үҙ тыуған ерҙәрендә йәшәй.

**А.Зарипов:** Документтың популистик моменты бар. Йәғни республикаларҙа Үҙәккә ризаһыҙлыҡ бармы-юҡмы, шул мәсьәләне асыҡлау өсөн ебәрелгәнгә оҡшай был стратегия. Һәр хәлдә, документтың шулай ашыҡ-бошоҡ эшләнеп ебәрелеүенең бер маҡсаты шулай булыуы ихтимал. Әгәр ҙә милли яҡтан ҡаршылыҡ килеп сыҡһа, был хәрәкәтте туҡтатып булмаясаҡ. Икенсенән, Рәсәй властарына дәүләтселекте хәҙерге кимәлдә һаҡлап ҡалыу өсөн барыһын да белергә кәрәк. Был - мониторинг. Сөнки беҙ иҡтисади күрсәткәстәң бөтмәүен, киреһенсә, киңәйеп барыуын яҡшы беләбеҙ. Халыҡта йәшәү кимәле лә түбәнәйеп бара. Әгәр ҙә аҫтан да, өҫтән дә шундай хәрәкәт барһа, уның шауҡымы бик ныҡ булыуы бар.

**Ә. Боҫҡонов:** Һуңғы егерме йылда милли мәсьәләләр менән ил кимәлендә шөғөлләнеүсе исемдәре киң билдәле шәхестәр барлыҡҡа килде. Шул уҡ Дробижева, Рамаҙан Абдулатипов кеүек белгестәр, Федераль үҙәктә төрлө-төрлө ойошмалар бар. Документта ул белгестәрҙең һәм ойошмаларҙың, дәүләт институттарының ҡатнашлығы юҡ. Беҙ хатта уларҙың был документҡа ҡарата фекерҙәрен дә белмәйбеҙ. Беҙҙең бит 1996 йылда ҡабул ителгән Рәсәй Федерацияһының милли сәйәсәт концепцияһы бар. Уның менән бергә милли-мәҙәни автономиялар хаҡында закон да ҡабул ителде. Был закон диаспорала йәшәүсе халыҡ вәкилдәре өсөн эшләнгән. Ул, яҡшымы-насармы, эшләп килә. Уларҙың әле дәүләт ҡоролошона зыяны теймәй. Шул уҡ ваҡытта стратегия авторҙары документты концепция тип түгел, ә стратегия тип атаған. Ә бит, дөрөҫөн әйткәндә, документ концепция булырға тейеш ине. Әгәр ҙә документ концепция булһа, ул сағында теге концепцияны юҡҡа сығарырға йә уны үҫтерергә кәрәк булыр ине. Теге концепцияны юҡҡа ла сығарманылар, инҡар ҙа итмәнеләр, уның өҫтөнә стратегия уйлап сығарҙылар. Тимәк, уларҙың иҫәбе киләсәктә ошо стратегияға ярашлы рәүештә Конституцияны үҙгәртеү.

кәрергә йыйылһаҡ, был да этник мобилизация тип ҡабул ителергә тейеш булып сыға. Йәй башында халыҡ һабантуйға йыйылһа ла, был этник мобилизацияны властар туҡтатырға бурыслы. Элекке йыйындар үткәреүҙе тыйған һымаҡ була инде. Бына ошондай абсурд урындар документта бик күп. Мин хатта документты юрамал эшләмәнеләрме икән, тип тә уйлап ҡуям. Документты теләһә ниндәй курс студентына биреп, теоретик-методологик яҡтан баһа бирергә ҡушһаң, ул студент документтың башынан аҙағынаса логик һәм юридик ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы табасаҡ.

**Ф.Фәйзуллин:** Эйе, логик, юридик ҡапма-ҡаршылыҡтар документта бик күп. Әгәр ҙә документ тормошта күҙәтелгән ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы иҫәпкә алып, ғәҙелһеҙлектән зыян күреүсе яҡты яҡлай икән, шул сағында уның ниндәйҙер әһәмиәте хаҡында әйтергә булыр ине. Әйтәйек, беҙ Рәсәй бюджетына индергән өлөшөбөҙ буйынса даими рәүештә 8-9-сы урын биләп киләбеҙ. Беҙ - донор республика. Ә йәшәү кимәле буйынса 54-56-сы, ҡайһы бер күрһәткестәр буйынса 80-се урындарҙа торабыҙ. Бындай проблемалар документта бөтөнләй ҡуйылмай.

Республикабыҙҙың төп халҡы - башҡорт халҡы, ә башҡорт халҡы үҙенең республикаһында статусы менән дүртенсе урында тора.

**▸ Ә бит документтың нигеҙендә милләттәрҙе инҡар итеү, совет халҡы барлыҡҡа килтереү һымаҡ яңы Рәсәй милләте формалаштырыу идеяһы ята. Тимәк, стратегияны яҙыусы төркөм Тишковтың идеяларына ла таяна...**

**Ә. Боҫҡонов:** Тишков бит гражданлыҡ менән милләтте, ябайлаштырып әйтһәк, парта менән аҡ төҫтө лә айыра алмай. Уларҙың береһе - предмет, икенсеһе - төҫ...

**Ф.Фәйзуллин:** Минең был йәһәттән үҙ сағыштырыуым бар. Бына был кеше - ҡатын-ҡыҙ, ә бына быныһы - ир кеше, әгәр ҙә уларҙы бергә ҡушырға теләйбеҙ икән, уныһы инде клиника тип атала. Ҡыҫҡаһы, документ стратегия принциптарына бөтөнләй тап килмәй.

**Ә. Боҫҡонов:** Документ һөйләм төҙөү грамоталығы кимәле буйынса ла бер ниндәй тәнҡитте лә күтәрә алмай. Уны төҙөүселәр ошондай тексты тикшереүгә ебәрергә нисек оялманылар икән?

**▸ Халыҡ үҙенең ихтыярын яҡлар, һаҡлар һәм үҫтерер өсөн үҙ дәүләтселеген барлыҡҡа килтерә һәм милләткә әүерелә. Хәҙер иһә милләтте, ҡасандыр динде лә айырған кеүек, дәүләттән айырырға итәләр, булып сыға инде...**

**Ф.Фәйзуллин:** Әгәр ҙә милләт дәүләт яҡлауынан ситкә сығарылһа, ундай милләттең киләсәге юҡ. Шул уҡ ваҡытта милләттән айырылған дәүләттең дә киләсәге юҡ. Бер үк ваҡытта туҡтауһыҙ миграциялар барған шаулы заманда таҙа ғына бер милләттән торған дәүләттәр ҙә ҡалмай бара. Әммә мигранттарҙың донъя буйлап күсенеп йөрөүе генә дәүләттең милләтте һаҡлау һәм үҫтереү ихтыяжын юҡҡа сығара алмай.

**А.Зарипов:** Әгәр ҙә дәүләт милләттәрҙе һаҡлау менән ҡыҙыҡһынһа, хатта уларҙы һаҡлауға һәм үҫтереүгә булышлыҡ итеүсе фонд та булдыра ала. Донъялағы алдынғы дәүләттәр миҫалында бындай практика етерлек.

**▸ Ә һеҙ ошо стратегияның төп маҡсаты милләт ихтыяжын дәүләттән айырыуға йүнәлтелгән тип уйламайһығыҙмы?**

**Ф.Фәйзуллин:** Нәҡ шулай. Унда яҙылған төп идеяларҙы тормошҡа ашырыу милли республикалар территорияларын бөтөрөү һәм Рәсәйҙең федератив ҡоролошон юҡҡа сығарыу буласаҡ. Һуңынан, ил емерелгәс, терһәкте тешләү мөмкин булмаясаҡ.

**Ә. Боҫҡонов:** Дәүләтселеккә аҙ һанлы халыҡтар ҡурҡыныс менән янамай. Ни өсөн? Сөнки ХХ быуатта Рәсәй ике тапҡыр 1917 һәм 1991 йылдарҙа тар-мар килеп, яңынан төҙөлдө. Бында аҙ һанлы халыҡтарҙың ғәйебе юҡ. Ике осраҡта ла Үҙәктә власть өсөн тартҡылаш арҡаһында Рәсәй тарҡалып, яңынан йыйылды. Рәсәйгә ни өсөн федерализм кәрәк? Сөнки урыҫ булмаған халыҡтар өсөн Мәскәү бер ваҡытта ла этноядро була алмай. Халыҡтар ҡайҙа формалашҡан һәм үҫешкән, шул урында уларҙың ядроһы булырға тейеш. Милләттәрҙе йәшәгән ерендә һаҡлар өсөн Рәсәйгә федерализм кәрәк тә инде. Рәсәйҙең, әгәр ҙә камил ғына булып үҫешәм, тиһә, ана шул этноядроларҙы һаҡлауҙан башҡа юлы юҡ. Ә этноядроны һаҡлар өсөн ул халыҡтың статусы булырға тейеш.

Документта урыҫ халҡының статусы ла ныҡ төшөрөлә. Унда урыҫ халҡы ни этнос түгел, ни халыҡ түгел, ни милләт түгел. Ул бары тик этномәҙәниәт доминантаһы ғына. Этнос сәйәсәттең объекты түгел, ә субъекты. Мәҫәлән, керәшендәр, нуғайбәктәр, казактар үҙбилдәләнешкә дәғүә итә алмай. Сөнки улар этностар ғына. Беҙҙе, башҡортто һәм татарҙы, ана шулар хәленә ҡалдырырға итәләр.

**А.Зарипов:** Этнос ижтимағи мөнәсәбәттәрҙең үҙаллы субъекты була алмай, ул, әйтәйек, өйрәнеү объекты ғына. Милләтте үҙаңы һәм үҙбилдәләнеше милләт итә. Әгәр ҙә милләттең ере, мәҙәниәте, үҙаңы булмаһа, һин бер нисек тә үҙеңде шул милләттең бер ағзаһы итеп тоя алмайһың. Был осраҡта һин үҙеңдең аңыңда был төшөнсәләрҙе төҙөй башлайһың. Әгәр ҙә милләттең объектив күренештәре булмаһа, ул милләт үҙе лә юҡ.

**Ә. Боҫҡонов:** Был документ ҡабул ителә ҡалһа, урыҫтар ҙа субъект булыуҙан туҡтаясаҡ һәм халыҡ-ара мөнәсәбәттәр ҙә тиң итеп ҡабул ителмәйәсәк.

**Ф.Фәйзуллин:** Бөгөн милләттәрҙе һаҡлап ҡалыу өсөн күп кенә үҙгәрештәр индереү талап ителә. Элек күп милләтле Советтар Союзында, РСФСР-ҙа һәм беҙҙәге парламентта милләттәр палатаһы була торғайны. Бөгөн беҙ шундай палатаны булдыра алмаһаҡ та, Дәүләт Думаһында милли мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса закондар проектын әҙерләүсе комитет булдырыу фарыз. Бындай комитет бөгөн юҡ. Милли мәсьәлә менән шөғөлләнеүсе ҙур министрлыҡ булыуы шарт. Беҙҙең илдә милли мәсьәләләр менән шөғөлләнеүсе министрлыҡ булмауына сит илдәрҙә аптырап ҡарайҙар. Беҙҙең күп милләтле илдә милләттәр хаҡында һөйләүсе һәм күрһәтеүсе бер генә махсус телерадио каналы ла, бер генә гәзит тә юҡ. Хәҙер милли мәсьәләләрҙе этнография кимәленә төшөрөп, кемдең ниндәй күлдәк, ниндәй салбар кейгәнен генә тикшерәләр. Беҙгә милләтебеҙҙе һаҡлап ҡалыр өсөн социаль-сәйәси, иҡтисади мәсьәләләр менән шөғөлләнергә кәрәк. Шул стратегияны һәм программаны эшләй торған социаль институт булыуы ла зарур. Документта был мәсьәләләр бөтөнләй ҡуйылмаған.

**Ә. Боҫҡонов:** Парламентта милләттәр палатаһын төҙөүе ауыр буласаҡ. Әммә беҙгә хәҙер йәмәғәтселек башланғысындағы милләттәр палатаһын төҙөү хаҡында һүҙ ҡуҙғатырға кәрәк. Беҙҙә, мәҫәлән, йәмәғәтселек палатаһы бар, тап шуның кеүек берәмек кәрәклеге хаҡында һүҙ бара бында.

**Ф.Фәйзуллин:** Стратегияла алдағы 25-30 йылға ташланған ҡараш та сағылырға тейеш. Әлеге документта был юҡ. Әгәр ҙә шундай прогноз булмаһа, халыҡ нимә менән шөғөлләнергә белмәйенсә, өмөтһөҙлөккә бирелеүе бар. Милли кадрҙар әҙерләү сәйәсәте лә ул стратегияның төп һыҙаты булыуы мотлаҡ. Хәҙерге сәйәси партияларҙың береһенең програмаһында ла милли мәсьәләне хәл итеү хаҡында һүҙ юҡ. Киләсәктә беҙ беҙҙең милли проблемаларҙы хәл итеүгә йүнәлеш алған сәйәси партияларға ғына тауыш бирергә тейешбеҙ.

**Ә. Боҫҡонов:** Фәнил Сәйетович, беҙгә, бәлки, Рамаҙан Абдулатиповҡа сығып, уның ассамблеяһы исеменән ил етәкселегенә сығырға кәрәктер? Әгәр ҙә ул үҙенең ойошмаһы исеменән стратегия хаҡында һөйләшеү үткәрһә, унда беҙ ҙә ҡатнаша алыр инек. Аҙаҡтан шул һөйләшеү һөҙөмтәләре буйынса ҙур ғына матбуғат конференцияһы бирергә була. Сөнки беҙҙең бындағы һөйләшеүҙәр ошонда ғына ҡала ла, Үҙәккә барып етмәй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"...Стратегия"ла ысынында милли республикаларҙы юҡҡа сығарыу күҙ уңында тотола, документтың 23-2 бүлегендә шундай һүҙҙәр бар: "Рәсәй Федерацияһында эре территориаль-сәнәғәт райондарын ойоштороу практикаһын дауам итеү, уларҙа Рәсәйҙең яңы территориаль ҡоролошон һынап ҡарау...". Беҙ иң беренсе нәүбәттә милли мәктәптәрҙе ябыуға килтергән мәғарифты оптималләштереү тәжрибәһе менән таныш инде. Был осраҡта инде милли республикаларҙы оптималләштереү юлы аша Рәсәйҙе губерналаштырыу, унитар дәүләткә әүерелдереү хаҡында һүҙ бара..." ти стратегия проектына ҡарата үҙ ҡарашын белдереп тарих фәндәре докторы Марат Ҡолшәрипов. Ысынлап та, әгәр ҙә халыҡ мәҡәлендә әйтелгәнсә, стратегия проектында йомшаҡ йәйеп ҡатыға ултыртыу ҡурҡынысы бар икән, беҙгә аҡылға ултырырға кәрәктер, туғандар. Беҙҙең ил һаман да шул бер үк тырмаға килә лә баҫа, килә лә баҫа. Бер тапҡыр беҙҙән совет халҡы яһап маташтылар бит инде. Бының аҙағы һәр ваҡыттағыса тамамланды. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

***✓ Ҡосаҡланы ла һулҡылдарға тотондо. Шул рәүешле, күләгә тартып, ул йыуан ҡарағас төбөн ҡосҡан килеш оҙаҡ ятты. Яңғыҙ ҡарағас тыуған төйәгенә яҡынлашып килеүенең тәүге хәбәрсеһе икәнлеген Ғайса әле белмәй ине...***



Иҙрис Ноғоманов

# ҠАҘАҠҠАР

(хикәйәт)

Күҙгә текләп торған хәтәр хәүефтән шулай анһат ҡотола алыуына әле булһа ышанып етмәгән Ғайсаның быуындары ҡапыл ғына тирелде лә төштө. Ул, һушын йыйып, ҡамыш араһында байтаҡ ваҡыт салҡан ятты: ысынмы-бушмы, ниндәйҙер мөғжизә менән тере лә баһаң! Шулай ҙа уяулыҡ хаҡында бөтөнләйгә онотоп ебәрмәгән егет, һаҡлыҡ менән ҡалҡынды ла, йылға аръяғына ҡараш ташланы, һыбайлылар күренмәй ине. Ҡыуғын кире боролған! Буп-буш дала менән бергә-бер ҡалған Ғайса хәҙер япа-яңғыҙы. Был яғына уға һис кем ярҙам да итә, шул уҡ ваҡытта ҡамасау ҙа була алмай. Ул ирекле! Ул тулыһынса азат! Сынға бей һәм уның ярамһаҡ ярандары өсөн тотҡон Ғайса инде Яйыҡ тулҡындарында батып үлгән булһа, Арыҫланғәле ағай менән Байым, йәнә лә Уҡабикә генә хәҡиҡәттең асылын белә. Ике үксәһенә баҫа алмаған ҡасҡындың әле тере һәм ул тыуған яҡтарына ҡарап зарыға икәнлеге бары уларға ғына билдәле...

Дүрт аяҡлап ярға сыҡҡан хәлһеҙ Ғайса эҫелектән көйә башлаған сәнскеле далаға ҡарап шыуышты. Ҡалҡыуыраҡ урынға еткәс, тағы артына боролдо. Ҡыуғынсыларҙың ысынлап та юҡлығына ул ошонда ғына тулыһынса ышанды шикелле, тамам тынысланып, ҡылған араһына салҡан һуҙылды. Бая, башы етеп, моҡсай менән турһығын артмаҡлап алыуына ҡыуанып ҡуйҙы. Ни тиһәң дә, янында хәҙер аҙмы-күпме ризығы бар. Ике-өс көн йән аҫырауға етергә тейеш. Ә артабан? Артабан күҙ күрер. Илдә сыпсыҡ үлмәй, тиҙәр. Иң мөһиме: ул, ниһәйәт, үҙ ерендә! Ул ирекле, тимәк, ул йәшәй! Ә йән биргәнгә Хоҙай йүнен дә бирер, һис шикһеҙ, бирмәй ҡалмаҫ...

Ошо уйҙарҙан ҡанатланып киткән Ғайса башта аяҡ остарына ғына баҫып атларға маташты, ләкин ыратып китә алманы. Тиҙ арала ҡабарып сыҡҡан табан осо ирек бирмәне. Имгәкләгән көйө лә күпкә сыҙаманы - сейләнеп ҡанһыраған тубыҡтары юл ҡуйманы. Ни хәл итмәк, ташбаҡа тиҙлеге менән булһа ла, артабан шыуышып барыуҙан башҡа сараһы ҡалмай. Ярай, ҡалмаһын! Ташбаҡа ла, ана, ғүмере буйына шыуыша, әммә йәшәп ята бит. Ә Ғайсаға бары тыуып үҫкән ерҙәренә ҡәҙәре генә шыуышаһы...

Эт ылҡаһы ҡалмаған күкрәге менән дүртенсе тәүлек даланы үтекләгән Ғайсаның ашарына тамам бөттө, һуңғы уртлам ҡымыҙын эсеп ҡуйғандан һуң, ярай, турһығына инеш һыуы тултырып алғайны, шуны йота-йота килгән була. Аптырағандың көнөнән ул бүтәгә тамырын тәмләп ҡараны, һутлы ғына икән былай, туҡланырлыҡ. Йәғни, астан үлмәҫ өсөн бара инде. Хәҙер, ана, шул әскелтем тамырҙы сәйнәп имә-имә шыуыша. Ғәжәп, ниндәйҙер бер үлән тамыры уның йөрәгенә шөйлә ял булһа, тарамыштарына көс өҫтәй.

Дала - дала инде, көндәре түҙеп торғоһоҙ томра булыуға ҡарамаҫтан, төндәрен апаруҡ ҡына һыуытып ебәрә. Ҡояш аҫтында янып килгән Ғайса ныҡ өшөй. Төн һалҡынлығында хәрәкәт итергә ине лә, юлдан яҙлығып китеүенән ҡурҡа. Сөнки, ни ғәләмәттер, ҡараңғы төшөү менән болоттар артына инеп ышыҡлана һалған йондоҙҙары күренмәй ҙә ҡуя һәм һинең ҡайһы яҡҡа китеп барғанлығыңды бер Хоҙай ғына белә. Шул сәбәптән ул өшәнес таңдарҙы ҡылған араһында ҡырҡҡа кәкерәйеп ятҡан килеш ҡаршылай. Уяулы-йоҡоло көйө: "Аһ, ҡасан ҡояш сыға инде?" - тип уйлаһа, аҙаҡ, өтөп барған шул ҡояштан ҡасып ҡотолор урын таба алмағаны хәтеренә төшөүҙән бошоноп ҡуя. Ғәҙәттә, ул таңғы шәфәҡ белен-нер-беленмәҫ ҡуҙғала. Бер аҙҙан өшөп-ҡатҡан тәне яҙылып китә, маңлайына тир бөрсөктәре бәреп сыға. Ә инде арҡаһына тәүге ҡояш нурҙары ҡағылыу менән, наҙланып, аҙ ғына ялға туҡтай. Ошо рәүешле көн дә ҡабатлана.

Ғайсаның бар булмышын хафаға һалып ҡарала көйгән табаһыу һалҡынлығынан тиҙ арала ойошорға өлгөргән ҡан күп аҡманы.

Ғайса еүеш ергә ерегеп үҫкән яр япрағын сайпып сылатты ла, йәрәхәткә йәбештергәндән һуң, инде кәрәге бөткән моҡсайын урталай йыртып, япраҡ өҫтөнән матҡып бәйләне. Ошонан аҙаҡ ул, ысынлап та, рәхәтлектең сигенә сыҡты ла ҡуйҙы. Бөтә тәне буйлап әйтеп аңлатҡыһыҙ еңеллек йүгерҙе. Хатта күҙ алдары, нисектер, яҡтырып киткән һымаҡ булды. Илаһи тороштан бар донъяһын онотоп, ҡылған өҫтөндә бер килке әйгәҙәгәндән аҙаҡ, Ғайса, йылдам ғына ҡуҙғалып, турһығына һыу тултырҙы. Йыпҡы урындан шишмәгә терәлеп тигәндәй ятҡан ҡабауға күтәрелде. Унһың ҡаршыһында әле! Ҡабалана төшкән Ғайса уны ниндәйҙер үтә ҡәҙерле нәмәһен тапҡан кеүек ҡосаҡлап алды. Ҡосаҡланы ла, күңеле тулышыуҙан, һулҡылдарға тотондо. Шул рәүешле, күләгә тартып, ул йыуан ҡарағас төбөн ҡосҡан килеш оҙаҡ ятты. Яңғыҙ ҡарағас тыуған төйәгенә яҡынлашып килеүенең тәүге хәбәрсеһе икәнлеген Ғайса әле белмәй ине...

Ахырҙа, шөйлә ял итеп, күңеле булғас, бысағы менән соҡоп алып, ҡарағастың һағыҙын сәйнәне. Ҡарағас һағыҙы янған йөрәккә май булып яғыла бит ул. Танһыҡлап кителгән тәмдән Ғайсаның бала саҡтары иҫенә төшөп китте: ошолай итеп олатаһы менән һағыҙ йыя торғайнылар. Күп-үп итеп алып ҡайталар ҙа туған-тыумасаларҙы ҡыуандырағы шешә башланы. Шешеүе ярай, ә бына әрнеп һыҙлауы үҙәгенә ифрат ныҡ үтә. Бер көн, кискә ҡарай, ул селтерәп ятҡан саф һыулы, аҡ ташлы шишмәгә килеп юлыҡты. Ошоғаса шишмәнең бындайы әле уға осрағаны юҡ ине. Эсе күпкәнсе һыуһын ҡандырғандан һуң ҡапылғара ауырайып киткән егет төндө ошонда үткәрергә ҡарар итте. Шеш аяҡтары тынғы бирмәй тәҡәтһеҙ һыҙлаған Ғайса, төнө буйына йоҡо төҫө күрмәйенсә, һаташып сыҡты. Нимә булды был? Әллә бысраҡ элэгеүҙән ҡаны боҙола башланымы? Ул сағында аяҡтарыңдан ғына түгел, ғүмереңдән дә яҙыуың бар. Нимәләр эшләргә кәрәк, юғиһә...

Ошолай уйланып, хафаға ҡалған Ғайса иртәгеһен ҡәтғи ҡарарға килде: бер нәмәгә ҡарамай, табандарҙы ярырға! Ул ауыр шыуышып, шишмә янына төштө лә, яйлап, яр ситендә ятҡан келән генә таш өҫтөнә ултырҙы. Ҡайҙа әле бысағы? Әһә, бына икән. Ул үткер бысаҡ йөҙөн күкшелләнеп торған шешеккә терәне һәм сытырлатып күҙҙәрен йомдо. Хәҙер, хәҙер, берҙе генә ауыртыр ҙа бөтөр. Уның ҡарауы, аҙаҡ рәхәтлектең сигенә сығасаҡһың. Йә инде, һуҙма, тиҙерәк бул...

Шул рәүешле үҙ-үҙе менән көрәшкән Ғайса, ахырҙа, тәүәккәлләне. Барлыҡ ихтыяр көсөн туплап, аҙ ғына баҫым яһай бирҙе лә бысаҡты тартты. Хас та мал салғандағы кеүек. Ләкин... Ғәжәп! Йән өҙгөс ауыртыуҙан ҡото осоп ултырған Ғайса уны бөтөнләй тойманы. Бары, ғырш иткән имәнес тауыш ишетелде лә, үксәһе еңелсә сәнсеп алды. Шул әҙере, аяғын һалҡын һыуға тығыу менән, күҙҙәрен асты. Шишмә буйлап өс йыл үҙәгенә үткәргән эренле ҡан ҡатыш ҡарағусҡыл үлек таҫмаһы һуҙылды. Ентекле ҡараш уның араһында ваҡ ҡына ат ҡылдары шәйләй ала ине. Шул уҡ ысул менән икенсе үксәһен дә ярып ебәрҙе. Електәргә үтерлек үҙенең ҡайнар һулышы менән бар нәмәне өҙөк-йыртыҡ үҙгәртеп ебәрергә һәләтле дала тамашаһы асылды. Ҡасандыр олатаһы, ҡуян үрте, тип атаған ошо ғәжәйеп тә, серле лә күренеш - сағым бала саҡтан Ғайсаның күңелен йәлеп итә ине. Шулай ҙа бының ишеһен тәүләп күрә. Ана, ҡағыл ер өҫтөндә, бер ҡараһаң, диңгеҙ сайҡалып ята төҫлө, икенсе ҡарауға ул тулҡынып ултырған ҡылғанға әүерелә. Зәңгәрһыу томанлы сәхрәләргә лә оҡшап киткән сағы була. Ошо мөғжизәле сәхрә өҫтөндә йә юғалып, йә күренеп китеп, дала ҡошо сүсәнде ялпылдай. Ҡайҙандыр, ҡайнар бушлыҡтан, бөтөнләй уйламағанда, шаян мүктәргеһе барлыҡҡа килә. Уларынан арыраҡ, үҙ өлөшөнә дәғүә итеп, торомтай елберләй. Нисек бер урында талпынып, шул ҡәҙәре оҙаҡ тора ала тиһең! Ана, ул бер мәлде кәйелтмәк таш ише шыҡыйҙы ла ергә атылды. Тимәк, маҡсатына өлгәште - оҙаҡ һағалаған ҡорбаны хәҙер уның тырнағында. Тирә-яҡта һәр төрлө тауышлы сиңерткәләр сырылдаша. Уларҙың иҫәбе лә, һаны ла юҡ.

Ҡояш аҫтында йоҡлап китеү - үлемгә тиң. Ошоно яҡшы аңлаған егет, үҙ-үҙен көслөк менән мәжбүр итеп, алға шыуҙы. Үҙе шыуыша, үҙе йоҡлап килә кеүек. Шулай ҙа, иң мөһиме, күләгәһе алда күренә. Тимәк, ул, йоҡо аралаш булһа ла, дөрөҫ йүнәлештә. Бер нәмәгә ҡарамай шыуыша торғас, йоҡоһо ла асылды. Хәҙер уға еңел дә, рәхәт тә. Бая томһаланып күренгән ҡарағусҡыл тап яҡынлашҡан һайын, әкрен-әкрен генә, асығыраҡ төҫкә керә бара. Күп тә үтмәҫтән, ул йәмйәшелгә әйләнде. Бәй, ағас бит! Икһеҙ-сикһеҙ дала ҡамауында япа-яңғыҙ ялбыр ҡарағас үҫеп ултыра! Хатта тәпәш кенә ҡыуағы ла күренмәгән ошо урында үҫкән ағас үҙе бер мөғжизә түгелме? Мөғжизәнең дә ниндәйе бит лар. Эй-й, заманалар! Олатаһы иҫәнме икән бөгөн? Иҫәндер һәм йәйендәй күреп үҫтергән ейәнен һағынып көтәләр. Башҡаса булыуы мөмкин дә түгел. Ә ата-әсәһе? Улары ни хәлдә генәләр икән? Бәлки, барыһы ла Ғайсанан төңөлөп бөткәндәрҙер әле. Өс йылдан ашыу ваҡыт! Әйтеүе генә рәхәт. Шулай ҙа төңөлмәй тороғоҙ, туғандар! Мин бар! Мин ҡайтып киләм! Тоҡомоғоҙҙо ҡаршы алырға әҙерләнегеҙ!

Ҡарағас күләгәһе еләҫлегенә иҙрәп, арҡаһын ҡытыршы олонға терәгән Ғайса нисек ойоп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Бер нәмә белмәйенсә күпме ятҡандыр, кинәт башланған тоноҡ геүләүгә һиҫкәнеп уянды. Уянды ла, күҙҙәрен асырға иренгән һымаҡ, сәйер тауышҡа ҡолаҡ һалып ятты: бынының тағы нимә? Ә-ә, төшөндө: шаян ел ҡылғанды берберенә ышҡып ҡыштырлатһа, нескә генә ҡарағас ылыҫы араһынан һыҙғырып үтә, ҡарт ағас олононондағы ярыҡтарға инеп уйнай. Ошо ауаздар барыһы бергә ҡушыла ла әлеге илауға тартым геүләгән тауышты барлыҡҡа килтерә. Илаһи моң шул рәүешле тыуа икән! Мәңге тыныслана алмаҫ тынғыһыҙ ел Ғайсаның битенән һыйпап уҙырға ла онотмай, иркәләнеп иркәләнә генә. Ҡайҙан беләһең, бәлки, ул егетте ҡабаландыралыр ҙа әле, төйәгеңә етергә күп ҡалманы, йоҡлап ятма, тип әйтергә теләйҙер. Йәл, егет ел телен аңламай...

Ауырлыҡ менән тороп ултырған Ғайса күҙҙәрен асты. Ҡуян ите төрөлгән турһыҡты йәшел себен көтөүе һырып алғайны. Ҡан еҫен тойған ул һөмһөҙҙәр аяҡтарында ла мыжғыша. Аҙ ғына хәрәкәткә лә болот булып һауаға күтәреләләр ҙә баяғы моңға йәнә бер үҙенсәлекле ауаз өҫтәп ебәрәләр. Бына тағы бер мөғжизә! Тәү ҡарамаҡҡа дала исемле бушлыҡта ырғандаҡ сиңерткәнән башҡа бөжәк тә юҡ һымаҡ, ә баҡһаң...

Эйе, дала ла үҙенсә йәшәп ятҡан була: һауаһында бөркөтө менән башҡа ҡоштары талпынып осһа, ерҙә йомраны һыҙғыра, ҡуяны йөрөп ята. Үткән йылғы ҡыу үлән араһында соҡсонған эшем эйәһе сысҡаны сипылдап ҡуя. Хатта, ана, ҡарайып ҡарға ояһы күренгән ҡарағас ботаҡтары эсендә ниндәйҙер сыпсығы сырҡылдап ебәрҙе. Аптырарһың, тереклек ҡайҙа ла ҡулайлаша икән. Ә иң ғәжәбе, хатта шаҡ ҡатырғаны: шулар араһында, үлмәйем дә ҡалмайым, тип, шыуыша-шыуыша булһа ла, яңғыҙ кеше китеп бара.

* * *

Ҡояш торошона самалағанда Ғайса арыу уҡ ваҡыт йоҡлағайны. Йоҡоһонан ул бөтөнләй икенсе кеше булып уянды: бер ере лә һыҙламай, бар тәнендә ниндәйҙер сихри еңеллек тойола, кәйефе күтәренке. Бөгөнгө төн дә аяҙ булырға оҡшай, шуға күрә ҡараңғылыҡҡа ҡарамай, юлын дауам итергә йыйынды. Шөкөр, көндөҙгө ялы һәләк урынлы булды. Инде йомшарып, былйырай башлаған ит өҫтөндә лә, аяҡтарында ла ағарышҡан себен күкәйҙәрен асыу менән һыпырып төшөрҙө: былай ята торғас, ҡортлап китеүең бар. Ҡуҙғалғанында ҡыҙыл ҡояш офоҡҡа яҡынлашып, киске һалҡын төшә башлағайны. Бара биргәс, боролоп артына ҡараны: хуш, мәрхәмәтле ағас! Күләгә биргәнең өсөн дә, һағыҙың өсөн дә рәхмәт үҙеңә!

Төн ифрат ҡараңғы килде. Кистән аяҙыта биреп ҡуйһа ла, йондоҙҙар ҙа, ай ҙа күренмәне. Тимәк, күк йөҙөн тағы болоттар ҡаплап алды. Һауала бөркөлөп торған сафлыҡ менән танауға килеп бәрелгән еүешлек, күрәһең, ямғыр яҡынлашыуы хаҡында иҫкәртә, һәм шулай булып сыҡты ла. Күп тә үтмәҫтән, ҡайҙалыр ер ситендә һымаҡ ялағай ялтлап үтте лә, артынса уҡ, яман сирҡандырып, арҡаһына тәүге тамсылар һибелде. Тамсылар башта һирәк булһалар ҙа, ғәжәп эре инеләр, әммә тора-бара яуын ғәҙәти ямғырға әйләнде. Хәҙер ул тигеҙ шаулап, тандыры менән генә һибәләргә тотондо. Баш осонда ғына тоноҡ деһерләү ишетелеп ҡалыуға, ул һиҙелерлек көсәйә төштө. Эҫенән ҡорғаҡһыған далаға йәшенле ямғыр килә һәм дымға сарсаған ерҙе тере һыу менән һуғара! Ғайса быға көйөнмәне лә, һөйөнмәне лә. Уға барыбер ине. Эҫеһенә түҙгәнде еүешен нисек тә үткәреп ебәрер.

Башта шулай уйлаһа ла, ямғыр ҡойоп яуа башлағас, үҙе хафаға ҡалды: оҙаҡҡа һуҙылып китмәһә ярай ҙа. Көслө яуын көлһыу тупраҡты тиҙ арала иҙеп йомшартты. Хәҙер Ғайсаға шыуышып барыуы байтаҡҡа еңеләйгән кеүек. Өҫтәүенә, өҙлөкһөҙ ялт-йолт килгән күҙ сағылдырғыс йәшен уттары юлын яҡтырта. Шулай ҙа уяу булыуың яҡшы: ҡараңғылыҡҡа юлдан яҙлығып китеүең бар.

Болоттары ҡайнап торған һауаны сираттағы йәшен уғы ярып уҙған мәлдә Ғайсаның күҙ алдынан ниҙер балҡып үткәндәй тойолдо. Ул туҡталды ла, ҡараңғыға төбәлгән килеш, ҡолаҡ һалып ятты. Алыҫ түгел йылға шауы ишетелә кеүек. Сираттағы йәшен уты уның ошо өмөт тулы фаразына асыҡлыҡ индерергә теләгәндәй, тирә-йүнде яман яҡ-

✓ *Бөйөк фәйләсуф Иммануил Кант йәмғиәт ҡанундарын инҡар итеп, үҙенең ҡағиҙәләре буйынса ғына йәшәгән, тиҙәр. Эйе, ирекле йәшәгән ул, әммә ул да үҙ ҡағиҙәләренең ҡоло булған түгелме?*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘНҺҮРӘТТЕҢ ДӘ...
## төрлөһө бар

■ Мүк еләгендә органик кислоталар, А, В төркөмө, С витаминдары күп. Шуға ла табиптар көҙ миҙгелендә өлгөргән был еләкте рационға күпләп индерергә кәңәш итә. Бынан тыш, мүк еләге антиоксиданттарға бай. Бары 240 грамм еләктә 567 миллиграмм полифенол була. Был матдә "насар" холестеринды сығарыусы булып иҫәпләнә. Еләктәге фенол берләшмәләре бактерияларға ҡаршы яҡшы көрәшә, шуға ла уны һалҡын тейгәндә ҡулланыу дөрөҫ буласаҡ. Көнөнә бер ус мүк еләге ашау хәтерҙе яҡшырта, ҡан тамырҙарын нығыта.

■ Балалар тәрбиәһе буйынса белгестәр шундай тикшеренеү үткәреп ҡараған: 4 йәшлек сабыйҙарға бер нисә минут "Губка Боб" йәнһүрәтенән сюжеттар күрһәткән. Һуңынан уларға берәй нәмә эшләргә ҡушылған. Тиҫтерҙәре йәнһүрәт ҡараған ваҡытты уйнап, йә һүрәт төшөрөп үткәргән балалар был эштәрҙе тиҙ үк башҡарған, ә йәнһүрәт ҡараусылар төркөмө иғтибарын туплай алмай йонсоған. Ғалимдар фекеренсә, балалар үҙҙәрен йәнһүрәт геройы итеп тойоп, уларҙың "хаослы ҡылығы"н ҡабатлай, ә был персонаждар тиҙ хәрәкәт итә һәм уларҙың ҡылығында йышыраҡ логика бөтөнләй булмай. Бындай йәнһүрәттәр ҡараған балалар ҙа бер урында ултырып сыҙамай, иғтибарһыҙ булғанлыҡтан, киләсәктә улар насар уҡыясаҡ, шулай уҡ улар үҙҙәрен нисек тотоуҙарын һәм тойғоларын контролдә тотмаясаҡ.

■ Һуңғы осорҙа бөтөн донъяла хроник арыуға зарланып, табиптарға мөрәжәғәт итеүселәр артҡан. Уларҙың барыһы ла тиерлек симптом сифатында тиҙ арыуҙы атаған. Табиптар иһә был сирҙең уларҙың һәр бишенсеһендә генә булыуын раҫлай. Һәм ул сир "Электрон йоҡоһоҙлоҡ" тип атала. Бөгөнгө заман кешеһе тәүлек әйләнәһенә яҡшылап ял итә алмай: кинола, театрҙа ултырғанда ла социаль селтәрҙә аралаша, төндә һыу эсергә торғанда ла электрон почтаһын тикшереүҙән тыйыла алмай, кеҫә телефоны ла гел үҙе янында. Шулай уҡ ҡала ситендә лә, метро һәм кафеларҙа ла интернеттың булыуы был сирҙе аҙҙыра ғына. Төрлө форумдарҙа ултырыусылар "XXI быуат эпидемияһы"на килтереүсе ике сәбәпте билдәләй: гипотиреоз - ҡалҡан биҙе әүҙемлеге түбәнәйеүе һәм "адреналинлы арыу". Был симптом, арыуҙан тыш, үҙенең эсенә аш һеңдереү, йоҡо менән проблемаларҙы, нервылар ҡаҡшыуын, аңлатып булмаған ауыртыныуҙарҙы ала. Оксфорд университеты профессоры, эндокринолог Джон Васс иҫәпләүенсә, кешеләрҙең үҙҙәренә үҙҙәре диагноз ҡуйыуҙары һәм мейенең адреналин системаһын түбәнәйтеүсе дарыуҙар ҡабул итеүе бауыр, йөрәккә насар тәьҫир яһауы ихтимал. Профессор фекеренсә, был "сир"ҙән ҡотолоу өсөн йоҡларға ятыр алдынан телефон, ноутбук һәм башҡа ҡорамалдарҙы һүндереү, ә ял көндәренең береһендә өйҙән ситтә ял итеү ҙә етә.

■ Әүҙем физик күнекмәләр интеллект кимәлен үҫтереү һәләтенә эйә. Канада ғалимдары 49 йәштән оло кешеләрҙе тикшереп ҡараған. Уларҙы барыһы ла аҙ хәрәкәт иткән. Был тикшеренеү өсөн улар ғәҙәттәге тормоштарынан баш тартып, 4 ай дауамында физик күнекмәләр яһаған. Һөҙөмтәлә, уйлау һәм тиҙ ҡарар ҡабул итеү һәләте күпкә яҡшырған. Ғалимдар быны спорт менән шөғөлләнеү арҡаһында мейелә ҡан әйләнеше яҡшырыу менән аңлата.

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

**Донъя ҡасан яралған, ваҡыттың, йәғни мәңгелектең сиге бармы? Йыһан киңлеге ҡайҙа бөтә, ғөмүмән, бөтәме ул? Ошо турала уйланғанығыҙ бармы? Ғөмүмән, йәшәйешебеҙҙең һәр мәле ниндәйҙер төшөнсәгә эйә һәм мең төрлө һорауҙар тыуҙыра. Бындай төшөнсәләр алдында сал сәсле Фән дә әлегә бер ҡатлы бала-саға һымаҡ. Ә шулай ҙа ҡайһы берҙәре буйынса яуап эҙләп ҡарайыҡ әле.**



# НИНДӘЙ ЙӘМҒИӘТТӘ ЙӘШӘЙҺЕҢ...
## шуның йырын йырлайһың

### Буйһоноу

Уйҙарыбыҙ менән яңғыҙ була алһаҡ та, йәмғиәттә йәшәйбеҙ икән, социаль яҡтан тормошта беҙ яңғыҙ түгелбеҙ шул. Теләйбеҙме-юҡмы, һәр беребеҙ кешелек уйлап тапҡан ҡанундарға, бөтмәҫ-төкәнмәҫ ҡағиҙәләргә буйһона, беҙгә тиклем йәшәгәндәрҙең һабаҡтарын өйрәнә, киләсәк быуынға яңы ҡағиҙәләрҙе көсләп таға. Шунһыҙ булмай: тормош бит ул - ниндәй йәмғиәттә йәшәйһең, шуның йырын йырлайһың. Социаль мөнәсәбәттәрҙе үҙең йәшәгән йәмғиәттән ситтә ҡороп булмай. Ситтә ҡорһаң, ситтәге йәмғиәттең йырын йырларға тура киләсәк. Хатта берәй сит планетала йәшәү мөмкинлеге була ҡалһа, унда ла үҙенә күрә йәмғиәт барлыҡҡа килер, моғайын.

Бөйөк фәйләсуф Иммануил Кант йәмғиәт ҡанундарын инҡар итеп, үҙенең ҡағиҙәләре буйынса ғына йәшәгән, тиҙәр. Ул тик бер тапҡыр ғына, никах теркәргә барған ваҡытта ғына, ҡағиҙәләренән тайпылған, йәмғиәт ҡушҡанса эшләгән. Эйе, ирекле йәшәгән ул, әммә ул да үҙ ҡағиҙәләренең ҡоло булған түгелме? Тимәк, үҙе йәшәгән йәмғиәттең ағзаһы булараҡ, тулыһынса азат була алмаған, үҙ ҡанундарына бикләнгән.

"Йәмғиәттә йәшәп, йәмғиәттән азат булып булмай", тигән Ленин бабай ҙа. Быны, исмаһам, дөрөҫ әйткән. Үҙенең хаҡ юлда булыуына йөҙ процентҡа ышанмаһа, ҡанлы революция яһап та тормаҫ ине. Социаль мөнәсәбәттәрҙең бер кимәлдә булыуын, йәғни бөтәбеҙҙең дә тиң хоҡуҡлы булыуын теләгән бит ул. Әммә бының өсөн социаль мөнәсәбәттәрҙең вертикаль, йәғни юғарынан түбәнгә идара ителеүе кәрәклеген инҡар итә алмаған. Теләге лә булмаған. Юғиһә, Бөйөк француз революцияһы осоронда уҡ яңғыраған "Туғанлыҡ. Тигеҙлек. Азатлыҡ" лозунғыһы ғәмәлгә ашырылыр, һәм ул йәшертен генә "Абруй. Буйһоноу. Тәртип" һүҙҙәренә алмаштырылмаҫ ине. Буйһоноу аңлашыла. Был осраҡта мөнәсәбәт хакимлыҡҡа һәм буйһоноуға ҡорола. Ябай мөнәсәбәт. Нәҡ әрме уставындағы кеүек: "Беренсе параграф - командир һәр саҡ дөрөҫ әйтә, икенсе параграф - дөрөҫ әйтмәһә, беренсе параграфты ҡара". Ҡыҫҡаһы, көсләнөкө - замана, йәғни джунгли законы. Тәртип тә шулай уҡ ябай мөнәсәбәткә ҡайтып ҡала. Ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәһәң, һинән дә аҡыллы, һинән дә тәртипле кеше юҡ. Иң мөһиме, закондар кешене бурыслы ғына итмәй, хоҡуҡтар ҙа бирә, йәғни азатлығын сикләмәй. Хоҡуҡтарыбыҙ ни тиклем күп, беҙ шул тиклем азат, йәнәһе. Ә бит һәр хоҡуҡ беҙҙе нимәгәлер бурыслы итә, йәғни хоҡуҡ-азатлыҡ бушҡа бирелмәй - буштың атаһы күптән үлгән. Мәҫәлән, һинең тегейәки был йәмғиәттә йәшәргә хоҡуғың бар икән, һин ул йәмғиәттең йырын йырларға тейеш. Яп-ябай.

### Абруй

Абруй төшөнсәһен ҡарап үтәйек. Был төшөнсә бөгөн барлыҡҡа килмәгән, бөтөн кешелек донъяһы уны меңәр йылдар буйы туплаған. Ана шул меңәр йылдар буйы тупланған, аңыбыҙға һеңдерелгән стереотиптарҙан, йәғни кешелек абруйынан ҡотолоуы, ай-һай, еңел түгел. Унан нисек ҡотолорға һуң? Һәм, ғөмүмән, ҡотолоу кәрәкме икән? Кешелек донъяһы үҫешкән һайын, ана шул абруй-йолаға беҙ йә тулыһынса буйһоноп йәшәйбеҙ, йә ҡаршы сығып маташабыҙ. Ер йөҙөндә йәшәгән кешеләр араһындағы төп мөнәсәбәт ошо ике арауыҡта ҡорола - йә инҡар итеп, яңы мөнәсәбәт барлыҡҡа килә, йә ятҡлашып, ағым буйынса йәшәү дауам итә. Тимәк, һәр кеше бер үк ваҡытта буйһона ла, ризаһыҙлыҡ та белдерә, йәғни ҡапма-ҡаршылыҡлы ике полюс араһында йәшәй. Социаль мөнәсәбәттә быны күреп, тойоп була. Ә бит кеше үҙенең эске уйхистәр, кисерештәр донъяһында ла ҡапма-ҡаршылыҡлы уйҙар менән йәшәй. Бер төрлө уйлай, икенсе төрлө эшләргә мәжбүр. Сөнки көйҙө боҙорға ярамай, йәғни йырҙа артыҡ һүҙ булмай.

Фекер ебен артабан тағатып тормай, рубриканың талабына ярашлы, кинәйә тәҡдим итәбеҙ. Ул бынан алдағы "Бер ҡыйыҡ башы... ике төрлө донъя" кинәйәһе кеүек, кешеләр араһындағы мөнәсәбәткә ҡоролған.

### Өлгө

Бер кеше берҙән-бер ҡыҙын тормоштағы бөтөн ҡурҡыныс күренештәрҙән ҡурсаларға булған. Үҫмер йәшенә етеп, сибәрлеге сәскәләргә тиңләшкәс, ул ҡыҙын үҙе янына саҡырып алған да был тормошта уға ниндәй мәкерлектәр, әшәкелектәр осрарға мөмкинлеге тураһында аңлата башлаған. "Һөйөклө ҡыҙым, мин әйткәндәрҙең бөтәһен дә иғтибар менән тыңла һәм аңлап ҡабул ит, - тип башлаған ул һүҙен. - Бөтөн ирҙәр ҙә тик бер нәмә тураһында уйлай. Улар шул тиклем хәйләкәр: үҙҙәренең мәкерле уйҙарын тормошҡа ашырыу өсөн һәр ерҙә ау ҡора. Енси теләктәрен ҡандырыу өсөн улар бөтәһенә әҙер. Һин яңылышып ҡуймаһын өсөн мин һиңә бәхетһеҙлеккә илтеүсе юлды аңлатып бирәм. Ирҙәр иң тәүҙә һинең матурлығыңа һоҡланасаҡ. Бер көн шуларҙың береһе: "Әйҙә, урам буйлап йөрөп киләйек", - тип, тәҡдим яһаясаҡ. Өйҙәренең эргәһенән үтеп барғанда ул юрый ғына: "Пальтом өйҙә ҡалған, шуны алып сығам, бәлки, һин дә беҙгә инерһең", - тип әйтәсәк. Өйҙәренә ингәс, ул һине өҫтәл артына саҡырасаҡ һәм сәй тәҡдим итәсәк. Һеҙ бергәләп сәй эсә-эсә, музыка тыңлаған ваҡытта, ул ҡапыл, уйламаҫтан, һиңә ташланасаҡ һәм... һине хур итәсәк. Был минең өсөн дә, әсәйең өсөн дә күтәрә алмаҫлыҡ ҡайғы буласаҡ. Бөтөн затырыуыбыҙ өсөн бынан да ҙур оят юҡ!"

Ҡыҙ атаһының һүҙҙәрен бик иғтибарлы тыңлаған һәм йөрәге менән ҡабул иткән. Көндәрҙән бер көндө ҡыҙ атаһы янына ғорур атлап килгән дә: "Атай, һин күрәҙәселер ул, - тигән. - Тап шулай булырын ҡайҙан белдең? Бөтәһе лә нәҡ һин һөйләгәнсә булды. Башта ул минең сибәрлегем менән һоҡланды. Һуңынан урам буйлап йөрөп килергә саҡырҙы. Өйҙәренең эргәһенән үтеп бара инек, ул, пальто һылтауы менән, өйөнә саҡырҙы. Итәғәтле генә итеп сәй тәҡдим итте, музыка ҡуйҙы. Шул саҡ мин һин әйткән һүҙҙәрҙе иҫемә төшөрҙөм. Һин өйрәткәнсә, ни булырын алдан белә инем бит! Ҡайғырма, атай, ҡыҙың йөҙөңә тап төшөрмәне! Егет миңә ташланырға тейеш мәлдә генә мин үҙем уға ташландым - үҙен дә, ғаиләһен дә, затырыуын да оятҡа ҡалдырҙым..."

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

✓ Дауаланырға кәрәкмәй, ә организмдың үҙенә үҙ торошона асыҡлыҡ индереү һәм булған сырхауҙарын бөтөрөү мөмкинлеге бирергә кәрәк - яңы тормош башлағандан һуң биш йыл үткәс, мин шундай һығымтаға килдем.



ӘЙҘӘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!

# КҮҢЕЛ ТАҘАЛЫҒЫ...

## тәнде сафландыра



**"Үҙеңде сәләмәтмен тип иҫәпләйһеңме һәм сәләмәт булыу өсөн нимәләр эшләйһең?"**

- Сәләмәт булыуҙың, һәр хәлдә, үҙеңде шулай тип таныуҙың төп шарты - күңел торошон тәртиптә тотоу. Сөнки асыу, нәфрәт ҡанды боҙа, тиҙәр. Көн һайын иртән күҙемде асыу менән таң тыуғанына, уны үҙемдең һау-сәләмәт булып ҡаршылағаныма ҡыуанам. Тороп йыуынғас, бер стакан таҙа һыу эсеп ҡуйырға онотмайым. Һуңғы ваҡытта, ылыҫ (терпентинное масло) майы эсәм. Тәнде шлактарҙан таҙартыу өсөн уны 2 миллиграмдан башлап 8 миллиграмға еткергәнсе 40 көн эсәһең, аҙаҡ шулай уҡ кәметә барып, тағы ла 40 көн дауамында эсәһең. Иммунитетты нығытыу өсөн дә файҙалы. Кирелеп-һуҙылып алыу, гимнастика яһау, контраст душ та һаулығыма ыңғай йоғонто яһай. Эшемдә компьютер алдында ултырырға тура килгәнгә күрә, саф һауала, күберәген йәйәү йөрөргә тырышам. Элегерәк бейеүгә йөрөй инем, хәҙер йәшәү урыным алыҫлашҡас, был яратҡан шөғөлөмдән баш тартырға мәжбүрмен.

Шулай уҡ аҙнаһына бер мәртәбә бассейны булған саунаға йөрөү ҙә һаулыҡҡа ыңғай тәьҫир итә. Аҙна буйына йыйылған арыу-талыуҙар ҡул менән һыпырып алғандай була.

Йылына бер тапҡыр һөлөк ултырттырырға тырышам. Массаж да файҙалы. Республика шифаханаларында ял итеү ҙә көс өҫтәй, яңырыу бирә. Ундағы процедуралар хаҡында һөйләп тә тороу кәрәкмәйҙер.

Аҙнаһына бер мәртәбә булһа ла мунсала тирләү, миндек менән сабыныу ҙа һәйбәт. Баҡсала сәскәләр үҫтереү, еләк-емеш йыйыу, йәшелсәләрҙең үҫеүен күҙәтеү, үҙең үҫтергән аҙыҡтар менән туҡланыу ҙа - сәләмәтлекте хәстәрләүҙең бер сағылышы. Өҫтәлдәрҙә тик хәләл ризыҡ ҡына булһын. Сусҡа ите, иҫерткес эсемлектәр ҡулланыу, тәмәке тартыу, туйғансы йоҡламау - һаулыҡҡа зарарлы. Тыйылғандан һаулығым файҙаһына баш тартам.

Ҡамыр аштарын, шәрбәтте күп ҡулланмайым. Улар һимереүгә килтерә. Артыҡ ауырлыҡ та йөрәккә зыянлы.

Ә шулай ҙа, һаулығымды тейешенсә ҡайғыртып етмәйем кеүек. Эшкә бирелһәм, саманы онотоп ташлайым. Ҡайһылыр ер ауыртып, сигнал бирә башлағас ҡына иҫкә төшә лә бит. Ысынында, күберәк ваҡытты хәрәкәткә бирергә кәрәктер, хәрәкәттә - бәрәкәт, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Һәм дөрөҫ туҡланыуға. Ҡайһы ваҡыт ҡабаланып, ярымфабрикаттар һатып алыу ҙа һуңынан үҙен белгертеп ҡуя. "Киске Өфө" уҡыусыларына сәләмәт рух теләйем. Ә сәләмәт рух - сәләмәт тәндә генә. Һау булайыҡ!

**Азалия ҒӘЙНУЛЛИНА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Камиллыҡҡа һигеҙ асҡыс

Беҙ теләктәр күҙ йомоп асҡан арала тормошҡа аша торған йәмғиәттә йәшәйбеҙ. Факс ярҙамында мәғлүмәт тотош ҡитға аша кәрәкле урынға секундтар эсендә барып етә, компьютерҙар клавишаға бер нисә тапҡыр төртөп алғандан һуң быуаттар буйына йыйылған аҡыл байлығын асып һала. Беҙгә тиҙ бешкән аҙыҡ, тиҙ белем алыу һәм тиҙ хеҙмәтләндереү кәрәк.

Әммә ҡайһы бер эштәр билдәле ваҡытты, маҡсатҡа ярашлы эшмәкәрлекте һәм фиҙаҡәр хеҙмәт талап итә. Был яҙмаларҙың икенсе бүлеге һеҙгә уңыштың 200 төп серен асыр, ә өсөнсө бүлек иһә тормош камиллығына өлгәшеү өсөн үҙенсәлекле 30 көнлөк программа тәҡдим итер. Әммә артабанғы аҙымды яһар алдынан, әйҙәгеҙ, "Нимә ул камиллыҡ?"тигән һорауҙы асыҡлап китәйек.

Йәғни, нимә ул камиллыҡ һәм оҫталыҡ? Ул - һөнәри ғәҙәттәрҙең төпкө аң ярҙамында юғары оҫталыҡ менән башҡарылыуы. Мәҫәлән, бишенсе дан ҡара билбауға эйә көнсығыш алышы оҫтаһын күҙ алдына килтерегеҙ. Уға һәр хәрәкәт тураһында йәки таҡтаны уртаға ярыу алдынан үҙенең нимә эшләргә тейешлеге хаҡында уйланырға кәрәкмәй. Йөҙҙәрсә көн дауамында күнекмәләр үткәреү һөҙөмтәһендә хәрәкәт тын алған кеүек еңел һәм тәбиғи эшләнә. Башҡа һөнәр эйәләре лә, ысын оҫта кимәленә еткәс, үҙенең эше менән мәшғүл булып, бары тик тулыһынса һәм мәл менән генә йәшәй. Уның башында шунан башҡа бер генә сит нәмә лә юҡ, башҡа нәмәгә әһәмиәт бирелмәй. Тап шул саҡта сәғәттәр минут һымаҡ тиҙ үтә һәм ләззәт һәм ҡәнәғәтләнеүҙән башҡа бер нәмә лә кисермәйһегеҙ. Яратҡан эшең артында ваҡыттың һиҙелмәй ҙә үтеүе "ағым торошо" тип атала һәм маҡсатлы тырышлыҡ һөҙөмтәһендә өлгәшелергә мөмкин. "Ағым торошо" - иғтибарҙы идеаль туплау һәм ул мөғжизә тойғоһо тыуҙыра.

Оҫталыҡ һәм "ағым торошо" ваҡыттың теләһә ҡайһы мәленең тормош нөктәһендә тап килә. Үҙ эшенең оҫталары шул мәл менән йәшәй, тормоштарын камиллыҡ стадияһына еткергән барлыҡ шәхестәр ҙә "ағым торошо"нда ҡыуаныс кисерә. Улар өсөн тормоштоң һәр минутына айырым әһәмиәт биреп, тап ошо мәлдең башҡаларына ҡарағанда мөһим, тип баһаланыуы икеле-микеле уйҙарҙың башҡа инеп оялауына юл ҡуймай.

**Беренсе асҡыс:**
**ныҡлы ҡарар һәм көслө теләк**

Теләһә ниндәй мөһим маҡсат ҡуйғандағы кеүек, нимә теләгәнегеҙҙе һәм һуңғы һөҙөмтәнең ниндәй булыуын белергә кәрәк. Өҫтәл артына ултырып, теләгегеҙҙе яҙығыҙ. Ул һеҙҙең өсөн лайыҡлымы һәм һөҙөмтәлеме? Үҙегеҙ ынтылған эшмәкәрлектә камиллыҡҡа өлгәшкәс, ниндәй өҫтөнлөк аласаҡһығыҙ? Һуңынан инде оҫталыҡтың иң юғары кимәленә етергә ныҡлы ҡарар ҡабул итегеҙ. Маҡсатығыҙға өлгәшеү өсөн нимә талап ителә, шуның барыһын да үтәргә тип, үҙегеҙ менән килешеү төҙөгөҙ. Һайлаған эшмәкәрлегегеҙҙә камиллыҡҡа өлгәшкәс, үҙегеҙҙе нисек тоясағығыҙ хаҡында уйлағыҙ. Үҙегеҙҙә ныҡлы ышаныс тойоғоҙ. Һеҙ - көслө характерлы кеше, билдәләгән маҡсатығыҙға өлгәшергә үҙегеҙҙе мәжбүр итегеҙ.

**Робин ШАРМА.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Ауырыуҙарҙан ҡотолоу: башы

**Күңелем төбөндә зирәклек асылды: ауырыуҙар менән бары тик эске көстәреңде файҙаланып ҡына көрәшергә кәрәк. Баҡтиһәң, организм үҙен-үҙе һауыҡтырыу өсөн ҡасан, нимә һәм ниндәй эҙмә-эҙлелектә эшләргә кәрәклеген үҙе белә икән.**

Беҙҙең организмыбыҙ кәрәк ваҡытта тән температураһын күтәрә, тымау ебәрә йәки оҙайлы эс китеүен барлыҡҡа килтерә. Дарыу төймәләре ашап һәм уколдар ҡаҙатып, халыҡ дауалаусыларына мөрәжәғәт итеп, кеше үҙ организмының үҙен дауалауға булған көйләнешен юҡҡа сығара. Дауаланырға кәрәкмәй, ә организмдың үҙенә үҙ торошона асыҡлыҡ индереү һәм булған сырхауҙарын бөтөрөү мөмкинлеге бирергә кәрәк - яңы тормош башлағандан һуң биш йыл үткәс, мин шундай һығымтаға килдем.

1990 йылдан 2007 йылға тиклем бер генә төймә дарыу ҙа, витамин да ҡабул итмәнем, бер тамсы микстура ла эсмәнем. Бары тик былтыр ғына (2007 йыл - **Ред.**) теш табибының ныҡышыуы һөҙөмтәһендә биш төймә антибиотик ашарға тура килде. Уколдарҙы сат бүҫеренә ике операция яһағанда эшләнеләр. 18 йыл дауамында, операцияны иҫәпкә алмағанда, мин бер тапҡыр ҙа больничныйҙа булманым. Ит ашаған йылдарҙа аҙна һайын ауырыҡһыныу тоя торғайным һәм йылына бер тапҡыр булһа ла больничныйға китә инем. Был турала һуңыраҡ һөйләрмен, сөнки был өлөш, минеңсә, ит ашауҙан баш тартыуҙың асылын һәм һөҙөмтәһен күрһәтә.

Рухымдың ныҡлығына тамам ышанғас, организм тәнемдән ауырыуҙарҙы даими ҡыуаланы. Быны ул ҡолаҡтарҙан башланы. Биш айҙан һуң уң ҡолағымда ҡысытыу барлыҡҡа килде. Ҡысытыу урыны ҡолаҡ тишегенең аҫҡы өлөшөнән бер сантиметр самаһы түбәндәрәк ине. Ҡысытыу шундай көслө һәм татлы, хатта урынымда ултырып сыҙай алмайым. Бер ваҡыт түҙмәнем, осло итеп осланған ябай ҡәләм алдым да ҡысытыу тирәһен сәнскеләнем. Бер ни тиклем ваҡыттан яра барлыҡҡа килде һәм унан ниндәйҙер шыйыҡлыҡ ағып сыҡты. Ҡайһы бер ваҡыт ул шул тиклем күп аҡты, хатта төнөн мендәрҙә биш тинлек аҡса ҙурлығында тап барлыҡҡа килә ине. Бер мәл был шыйыҡлыҡты еҫе һәм йәбешкәклеге буйынса тикшереп ҡараным. Ул крахмал ҡатнашмаһын хәтерләтә, унан пенициллин еҫе сыға ине. Уң яҡтан шыйыҡлыҡ ағып бөткәс, һул ҡолағым шул уҡ урындан ҡысыта башланы. Уның менән дә ҡәләм файҙаланып көрәшергә тура килде.

Мин шыйыҡлыҡтың ҡайҙан барлыҡҡа килеүенә аңлатма таптым, ул пенициллин еҫе менән бәйле ине. Яҙып үткән ваҡиғаларҙан 10 йыл алда уң яҡ ҡолағыма кастет менән һуҡҡайнылар. Ҡолағымдың яртыһы ярылды, унан ҡан бәреп сыҡты. Ҡанды туҡтатыу өсөн уға ҡульяулыҡ баҫтым. Өйҙә яраны эшкәртеп, бәйләп ҡуйҙым. Әммә ике көндән һуң уң ҡолағым һәм шул тирәләге баш өлөшө шешә башланы. Поликлиникала, абцесс башланған, тинеләр. Дауаханаға һалып дауаланылар. Аҙна буйына таблетка бирҙеләр һәм пенициллин инъекцияһын һалдылар. Аңлауымса, пенициллиндың бер өлөшө организмда тороп ҡалған. Мин ит ашаған ваҡытта дарыу тәнемдең башҡа һуттары һәм башҡа өлөшө менән тыныс, татыу ғына һыйышып йәшәгән. Рациондан итте алып ташлағас, организмда тәрән үҙгәрештәр башланған. Ниндәйҙер күҙгә күренмәгән көстәр тәндең тиресәһен таҙарта башлай. Һәм был эш пенициллиндың ҡалдыҡтарын таҙартыуҙан башлана.

Шул ваҡытта ашҡаҙанымда кислота океаны ҡоторҙо. Уны тынысландырыу өсөн мин сей кишерҙе йәки кәбеҫтәне яйлап ҡына сәйнәнем. Бик ауыр минуттарҙа үҙемде сей картуф киҫәге ашарға мәжбүр итә инем. Ул барыһынан да нығыраҡ ярҙам итте, ләкин был процедура минең өсөн ысын язаға әүерелде.

Телем аҡ ҡуныҡ менән ҡапланып, ауыҙыма саҡ һыя торғайны. Кикереү даими характер алды. Уның сәбәбен бик ябай аңлаттылар: ашҡаҙаным һәм эсәктәрем үҙенең һығылмалылығын юғалтып, эстән шлактар менән ҡапланған. Һөҙөмтәлә даими эс ҡатыуы кисерҙем. Был ваҡытҡа мин йоҡоһоҙлоҡтоң, биттәге һытҡыларҙың, ауыҙҙан насар еҫ килеүҙең һәм даими баш ауыртыуҙың эс ҡатыу эҙемтәләре икәнен белә инем инде. Шул уҡ ваҡытта мин кеше организмының бик аҡыллы һәм үҙ бурыстарын ябай һәм оҫта итеп башҡарыуын белә инем. Баҡтиһәң, уға ҡамасауларға ғына ярамай, ә мөмкинлек булғанда ярҙам итергә кәрәк икән. Ҡалғанын организм тулыһынса үҙ өҫтөнә ала.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

# ТВ ПРОГРАММАҺЫ





## 12 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Женский журнал"
09.15 "Жить здорово!" (12+)
10.25 "Модный приговор"
11.30 "Контрольная закупка"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Федеральный судья" (16+)
16.10 "Убойная сила". Сериал (16+)
17.00 "Неравный брак" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Обратная сторона луны", 9-я и 10-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым (16+)
01.10 Ночные новости
01.30, 03.05 "Конфетти" (18+)
03.00 Новости
03.25 "TERRA NOVA" (12+)
04.15 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Все будет хорошо!" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Всегда говори "Всегда"-6", 7-я и 8-я, закл. серии. Мелодраматический сериал (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Вероника. Потерянное счастье", 8-10-я серии (12+)
00.15 "Дежурный по стране"
01.10 "Девчата" (16+)
01.50 "Вести+"
02.15 "Травля". Триллер (16+)
04.10 "Городок". Дайджест
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.35 "Возвращение Мухтара-2". Детективный сериал (16+)
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!"
10.55 "До суда" (16+)
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт" (16+)
14.35 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (16+)
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка" (16+)
17.40 "Говорим и показываем" (16+)
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Брат за брата-2". Сериал (16+)
21.25 "Дикий-2". "Чужой среди чужих". Криминальный сериал (16+)
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Дикий-2". "Не стреляйте в журналиста" (16+)
01.25 "Центр помощи "Анастасия" (16+)
02.10 "Советская власть" (12+)
03.00 "Висяки". Детективный сериал (16+)
04.55 "Час Волкова". Детективный сериал (16+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00 "Новости недели" (на башк. яз.)**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Новости недели" (на русск. яз.)**
**12.15, 20.45 "Полезные новости" (12+)**
**12.30, 13.30, 14.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Автограф. В. Исхаков"**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Царь горы" (6+)**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 "Дорога к храму"**
**17.15 "Надо знать!"**
**17.45 "Арслан" (16+)**
**18.15 Первенство Футбольной национальной лиги. "Уфа" (Уфа) - "Ротор" (Волгоград). Прямая трансляция. В перерыве: Новости**
**21.00 "Специальный репортаж" (12+)**
**22.00 "Следопыт"**
**22.15 "Позывной "Барс"**
**23.00 "Еду я в деревню"**
**23.30 Художественный фильм (16+)**

## 13 НОЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Женский журнал"
09.15 "Жить здорово!" (12+)
10.25 "Контрольная закупка"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Федеральный судья" (16+)
16.10 "Убойная сила". Сериал (16+)
17.00 "Неравный брак". Сериал (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Обратная сторона луны", 11-я и 12-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 Ночные новости
00.20 "Обитель лжи". Сериал (18+)
00.55 "Калифрения" (18+)
01.25 "Пропавший без вести" (16+)
02.20, 03.05 "К северу от Аляски" (12+)
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Все будет хорошо!" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Всегда говори "Всегда"-7", 1-я и 2-я серии. Сериал (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Вероника. Потерянное счастье", 11-я и 12-я серии (12+)
23.25 "Специальный корреспондент" (16+)
00.30 "Кузькина мать. Итоги"
01.25 "Вести+"
01.50 "Честный детектив" (16+)
02.25 "Американская рапсодия" (16+)

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.35 "Возвращение Мухтара-2". Детективный сериал (16+)
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Профессия - репортер" (16+)
10.55 "До суда" (16+)
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт" (16+)
14.35 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (16+)
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка" (16+)
17.40 "Говорим и показываем" (16+)
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Брат за брата-2". Сериал (16+)
21.25 "Дикий-2". "Ах, эта свадьба". "Взрывная волна" (16+)
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Дикий-2". "Последний киногерой". "Самогонщики" (16+)
01.35 "Главная дорога" (16+)
02.10 "Дикий мир"
03.00 "Висяки". Детективный сериал (16+)
04.55 "Час Волкова". Детективный сериал (16+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Надо знать"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы" (6+)**
**11.00, 23.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Отдел культуры" (6+)**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 19.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.) (16+)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Тэмле" (на баш. яз.)**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Книга сказок" (6+)**
**16.00 "Борсак"**
**16.15 "Йырлы кэрэз"**
**16.45 "Мир вращается вокруг сварки" (12+)**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+)**
**17.45 "Байык-2012"**
**18.45, 19.35, 20.15, 20.35 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Сэнгелдек"**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**23.15 "Взгляд без слов" (12+)**
**23.30 "Вечер памяти Фариды Кудашевой и Бахти Гайсина"**

## 14 НОЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Женский журнал"
09.15 "Жить здорово!" (12+)
10.25 "Контрольная закупка"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Федеральный судья"
16.10 "Убойная сила". Сериал (16+)
17.00 "Неравный брак", 22-я серия (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Обратная сторона луны", 13-я и 14-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Ночные новости"
00.20 "Белый воротничок" (16+)
01.15 "Сколько ты стоишь?" (16+)
03.00 Новости
03.05 "Главная мишень" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Все будет хорошо!" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.45 "Ефросинья. Таежная любовь"
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Всегда говори "Всегда"-7", 3-я и 4-я серии (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Городок". Дайджест
20.50 Футбол. Товарищеский матч. Россия - США
22.55 "Вероника. Потерянное счастье", 13-я и 14-я серии (12+)
00.50 "Вести+"
01.10 "Присяге верны"
02.05 "Государственник"
03.10 "Любовь" (16+)

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.35 "Возвращение Мухтара-2". Детективный сериал (16+)
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Профессия - репортер" (16+)
10.55 "До суда" (16+)
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.00 "Сегодня"
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт" (16+)
14.35 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (16+)
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка" (16+)
17.40 "Говорим и показываем" (16+)
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Брат за брата-2" (16+)
21.25 "Дикий-2". Сериал (16+)
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Дикий-2". Сериал (16+)
01.35 "Квартирный вопрос"
02.35 "Дикий мир"
03.00 "Висяки" (16+)
04.55 "Час Волкова". Сериал (16+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Надо знать"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00, 23.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Автограф. В. Кириченко" (12+)**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 19.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**12.45, 14.15 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Башкорт йыры-2012, II тур"**
**14.45 "Волшебный курай"**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Цирк в 13 метров"**
**16.00 "Семэр"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.45 "Здоровое решение" (12+)**
**17.15 "Надо знать!"**
**17.45 "Алтын тирмэ"**
**18.45, 19.35, 20.15, 20.35 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Сэнгелдек"**
**22.00 "Историческая среда"**
**23.15 "Взгляд без слов" (12+)**
**23.30 Художественный фильм (16+)**

## 15 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Женский журнал"
09.15 "Жить здорово!" (12+)
10.25 "Контрольная закупка"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Федеральный судья"
16.10 "Убойная сила". Сериал (16+)
17.00 "Неравный брак", 23-я серия (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Образная сторона луны", 15-я и 16-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Ночные новости"
00.20 "Гримм", 9-я серия (16+)
01.15, 03.05 "28 недель спустя". Триллер (18+)
03.00 Новости
03.15 "TERRA NOVA" (12+)
04.05 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан"
09.00 "От всей души"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Все будет хорошо!" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь"
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Всегда говори "Всегда"-7", 5-я и 6-я серии (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Вероника. Потерянное счастье", 15-я и 16-я, закл. серии (12+)
23.25 "Поединок" (12+)
01.05 "Вести+"
01.30 "Полтергейст" (16+)
03.45 "Комната смеха"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.35 "Возвращение Мухтара-2". Детективный сериал (16+)
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны" (16+)
10.55 "До суда" (16+)
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт" (16+)
14.35 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (16+)
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка" (16+)
17.40 "Говорим и показываем" (16+)
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Брат за брата-2", 14-я и 15-я серии (16+)
21.25 "Дикий-2". Сериал (16+)
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Дикий-2". Сериал (16+)
01.35 "Дачный ответ"
02.35 "Дикий мир"
03.00 "Висяки" (16+)
04.55 "Час Волкова". Сериал (16+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Надо знать"**
**10.30, 15.35 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00, 23.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+)**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 19.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.) (16+)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Мир Исанбекова" (12+)**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Галямат донья"**
**16.00 "Шэп арба"**
**16.15 "Йырлы кэрэз"**
**16.45 "Лэйсэнем… Юлдашым". 100-летию Файзи Гаскарова (6+)**
**17.45 "Бахетнама"**
**18.45, 19.35, 20.15, 20.35 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Сэнгелдек"**
**22.00 "ФК "Уфа": даешь Премьер-лигу!"**
**23.15 "КВН. РБ. Полуфинал. Игра вторая" (12+)**

## 16 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Женский журнал"
09.15 "Жить здорово!" (12+)
10.25 "Контрольная закупка"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Федеральный судья" (16+)
16.10 "Убойная сила" (16+)
17.00 "Неравный брак" (16+)
18.00 Вечерние новости
18.50 "Поле чудес"
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Голос" (12+)
23.15 "Вечерний Ургант" (16+)
00.10 "Crossfire Hurricane". Док. фильм к 50-летию группы The Rolling Stones
02.20 "Незамужняя женщина". Мелодрама (16+)
04.40 "TERRA NOVA"
05.30 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России"
06.05, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Местное время. Вести - Башкортостан"
08.55 "Мусульмане"
09.05 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Все будет хорошо!" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Евросинья. Таежная любовь"
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 " Вести - Башкортостан"
17.50 "Всегда говори "Всегда"-7", 7-я и 8-я серии. Сериал
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Юрмала-2012" (12+)
23.25 "Любовь до востребования". Мелодрама (12+)
01.35 "Доверие". Драма (16+)
03.45 "Комната смеха"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.40 "Женский взгляд"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели" (16+)
10.55 "До суда" (16+)
12.00 "Суд присяжных" (16+)
13.25 "Суд присяжных. Окончательный вердикт" (16+)
14.35 "Улицы разбитых фонарей" (16+)
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка" (16+)
17.40 "Говорим и показываем" (16+)
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Брат за брата-2". Сериал (16+)
21.25 "Дикий-2". Сериал (16+)
00.30 "Подводные камни". Детектив (6+)
02.25 "Ой, мамочки" (16+)
04.20 "Висяки" (16+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Надо знать"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Галямат донья"**
**11.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.30, 21.30 "Новости" (на русск. яз.)**
**11.45 "ФК "Уфа": даешь Премьер-лигу!"**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 19.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Үткән ғүмер". К 90-летию со дня рождения Ф. В. Султанова**
**15.15, 17.45 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Зеркальце"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.45 "Через две зимы… и 20 "лет" (16+)**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+)**
**18.00 "Йома"**
**18.45, 19.35, 20.15, 20.35 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Сэнгелдек"**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**22.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Донбасс" (Донецк) - "Салават Юлаев" (Уфа)**

## 17 НОЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Забытая мелодия для флейты" (12+)
07.30 "Играй, гармонь любимая!"
08.20 "Дисней-клуб"
08.50 "Смешарики. Новые приключения"
09.00 "Умницы и умники" (12+)
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак" (12+)
10.55 "Первая любовь" (12+)
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Абракадабра" (16+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Да ладно!" (16+)
15.50 "Народная медицина" (12+)
16.50 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.10 "Человек и закон"
19.15 "Минута славы" шагает по стране" (12+)
21.00 "Время"
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым" (16+)
22.50 "Коломбиана". Боевик (16+)
00.50 "На обочине". Мелодрама (18+)
03.20 "Дети Сэвиджа". Трагикомедия (16+)
05.25 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1

05.00 "Алмазы для Марии". Криминальная драма
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Планета собак"
09.25 "Субботник"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Специальный корреспондент"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.50 "Городок". Дайджест"
11.55 "Минутное дело". Семейная игра
12.55 "Вести. Дежурная часть"
13.25 "Честный детектив" (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.30 "Погоня"
15.30 "Субботний вечер"
17.30 "Танцы со звездами". Сезон-2012
20.00 "Вести в субботу"
20.45 "Куклы". Мелодрама (12+)
00.35 "Ключ от спальни". Комедия (16+)
03.40 "Горячая десятка" (12+)
04.45 "Городок. Дайджест"

### НТВ

06.10 "Два голоса" (12+)
08.00 "Сегодня"
08.15 "Золотой ключ"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога" (16+)
10.55 "Кулинарный поединок" с Оскаром Кучерой"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Свадьба в подарок!" (16+)
14.30 "Поедем, поедим!"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..." (16+)
17.20 "Очная ставка" (16+)
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер" (16+)
19.55 "Программа Максимум. Расследования, которые касаются каждого" (16+)
21.00 "Русские сенсации" (16+)
22.00 "Ты не поверишь!" (16+)
23.00 "Реакция Вассермана" (16+)
23.35 "Метла" (16+)
00.30 "Луч Света" (16+)
01.05 "Школа злословия" (16+)
01.55 "Дело Крапивиных". "Короткое замыкание" (16+)
03.55 "Висяки" (16+)

### БСТ

**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.) (16+)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.45 "Фильм детям"**
**09.15 Мультфильм (на башк. яз.)**
**09.45, 12.45 "Надо знать!"**
**10.00 "Бахетнама"**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Арслан" (16+)**
**12.00 "Следопыт"**
**12.15 "Позывной "Барс"**
**12.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**13.00, 21.15 "Полезное новости" (12+)**
**13.15 "Замандаштар"**
**13.30 "Здоровое решение" (12+)**
**14.00 "Дарю песню"**
**15.00 Концерт, посвященный Дню сотрудника органов внутренних дел РФ**
**16.00 "Список Киселева" (16+)**
**17.30 "Йыйын в Биляне"**
**18.45 "Учим башкирский язык"**
**19.00 "Хазина"**
**19.30 "Башкорттар"**
**20.00 "Сэнгелдек"**
**20.15 "Деловой Башкортостан"**
**20.30 "Отдел культуры" (12+)**
**21.00 "Всероссийский форум боевых искусств. Уфа-2012"**
**22.00 "Диспут-клуб "Пятый угол" (16+)**
**22.45 "Башкорт йыры-2012, II тур"**
**23.15 "Смелая музыка" (16+)**
**00.15 Международный рок-фестиваль "DMC-FEST-2012" (16+)**

## 18 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Забытая мелодия для флейты" (12+)
07.40 "Армейский магазин"
08.10 "Дисней-клуб"
08.40 "Смешарики. ПИН-код"
08.55 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" (12+)
10.35 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Гусарская баллада"
14.10 "Эльдар Рязанов. Моей душе покоя нет". Док. фильм к 85-летию режиссера (12+)
15.15 "Берегись автомобиля". Лирическая комедия
17.05 "Большие гонки. Братство колец" (12+)
18.40 "Кубок мэра Москвы". К дню рождения КВН
21.00 "Воскресное Время"
22.00 "Настя" (16+)
23.10 "Познер"
00.10 "Неотразимая Тамара". Мелодрама (16+)
02.10 "Отчаянный папа" (12+)
04.00 "Арина Шарапова. Улыбка для миллионов"

### РОССИЯ 1

05.25 "Бабье царство". Драма
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести - Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "Пусть говорят". Мелодрама (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.30 "Пусть говорят". Продолжение (12+)
15.25 "Рецепт ее молодости"
16.00 "Смеяться разрешается"
17.30 "Битва хоров"
20.00 "Вести недели"
21.30 "Маша". Мелодрама (12+)
23.30 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+)
01.20 "Плохой лейтенант". Криминальная драма (16+)
03.45 "Тайная власть генов". Док. фильм

### НТВ

05.50 Детское утро на НТВ
06.00 "Супруги". Детективный сериал (16+)
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача" (16+)
10.55 "Еда без правил" с Сергеем Жигуновым"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Бывает же такое!" (16+)
14.00 "Развод по-русски" (16+
15.00 "Сегодня"
15.20 "СОГАЗ - чемпионат России по футболу 2012/2013". ЦСКА - "Амкар" (16+)
17.30 "И снова здравствуйте!"
18.30 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание" (16+)
20.50 "Центральное телевидение. Информационно-развлекательный воскресный канал" (16+)
23.20 "Родственник". Боевик (16+)
01.10 "Дело Крапивиных". "Шальная пуля". Сериал (16+)
03.10 "Вернуть на доследование". "Дело № 1". "Детский праздник" (16+)
05.00 "Час Волкова". Сериал (16+)

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**09.00 "Йома"**
**09.30 "Наши годы. 1960 год"**
**10.00 "Баурсак"**
**10.10 "Городок АЮЯ"**
**10.20 "Шэп арба"**
**10.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Шатлык йыры"**
**11.00 "Байтус" (6+)**
**11.15 "Семэр"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.45 "Алтын тирмэ"**
**12.30 Новости недели**
**13.00 "Тэмле"**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Дорога к храму"**
**16.30, 19.30 "Замандаштар" (6+)**
**16.45 Чемпионат России по хоккею - Чемпионат ВХЛ. Во 2 перерыве: Новости**
**19.45 "Сэнгелдек"**
**20.00 "Любимое дело"**
**20.30 "ФК "Уфа"**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 "Новости недели" (на русск. яз.)**
**22.00 "Сказка № …" (16+)**
**22.15 "Байык-2012"**
**23.00 "Вечер.com" (12+)**
**23.45 "Внимание - дорога!" (16+)**
**00.15 Международный рок-фестиваль "DMC-FEST-2012" (16+)**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ДОНЪЯ МАТУР ДУҪТАР МЕНӘН ГЕНӘ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**Өйгә эш: Нисә һүҙҙә "ж" хәрефе бар икәнен 8-962-521-19-39 телефонына шылтыратып әйткән уҡыусы башватҡыстар гәзите менән бүләкләнәсәк.**

**44-се һандағы кроссворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** 1. Дивизия. 3. Сафуанова. 6. Суринам. 11. Солоҡ. 12. Оскар. 13. Нюанс. 14. Липси. 15. Имашева. 18. Яҡшыбаева. 21. Ҡауырый. 26. Рейтуз. 28. Дингеҙ. 29. Ҡар. 31. Йомғаҡ. 33. Маймыл. 34. Ураҙа. 35. Үтәбай. 36. Ләйсән (Нафиҡова). 37. Ҡая. 39. Нәфисә. 42. Әминев. 45. Мәрйәм (Бураҡаева). 47. Айытбаева. 50. Батарея. 55. Латин. 56. Урата. 57. Дәлил. 58. Ойошма. 59. Минниса. 60. Ишбулатов. 61. Ҡандала.

**Вертикаль буйынса:** 1. Джунгли. 2. Иҡсанов. 4. Арҡысаҡ. 5. Вроцлав. 7. Украина. 8. Мөгәзәй. 9. Алмас. 10. Окапи. 16. Атай. 17. Ен. 19. Ырғаҡ. 20. Артур (Батыршин). 22. Угги. 23. Ринг. 24. Ярмуллин. 25. Иҙелбаева. 27. Зәйтүнә (Ниғәмәтйәнова). 28. Диләнкә. 30. Алаша. 32. Ҡуй. 33. Мал. 37. Ҡорот. 38. Яхина. 40. Фетр. 41. Сейә. 43. Март. 44. Негр. 45. Минимум. 46. Маладис. 48. Йүнәлеш. 49. Внуково. 51. Атакама. 52. Янбаева. 53. Стиль. 54. Марат.

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

# ҠАЛАЛАР ТУРАҺЫНДА

● 1800 йылда Ер шарының яҡынса 2,5 процент халҡы ҡалала йәшәгән, 1920 йылға был һан 9,2 процентҡа, ә 1980 йылға иһә 40 процентҡа тиклем артҡан. 2000 йылда инде Ер шарында йәшәүсе халыҡтың яртыһынан күберәге ҡалаларҙа көн күргән. Был һан илдән үсеш кимәленә бәйле. Мәҫәлән, Латин Америкаһының 70 процент халҡы ҡалала йәшәһә, Бөйөк Британияла был һан 90 процентҡа етә. Азия, Африка һәм Латин Америкаһында ауылда йәшәүселәр һаны күберәк булһа ла, иң тиҙ үҫеүсе мегаполистар ҙа нәҡ шунда урынлашҡан.

● Ҡала статусын алыу өсөн халыҡ һаны буйынса критерийҙар төрлө илдә төрлөсә. Мәҫәлән, Данияла быны өсөн ул урында 250, АҠШ-та - 2,5 мең, ә Грецияла иһә 10 мең кешенең йәшәүе шарт.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Баймаҡ районы Икенсе Этҡол ауылында тыуып, хәҙерге ваҡытта Өфө ҡалаһында йәшәүсе беҙҙең ҡәҙерлебеҙ

**Әминева Гөлназ Ринат ҡыҙын**

35 йәшлек күркәм юбилейы менән ҡайнар ҡотлайбыҙ. Һөйөклөбеҙҙе ғүмер байрамы менән тәбрикләп, ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, имен тормош, бәхетле оҙон ғүмер, тормошобоҙға йәм өҫтәп, яҡындарының ҡәҙер-хөрмәтенә төрөнөп йәшәүен генә теләйбеҙ.

*Ғүмерҙе бит йылдар билдәләмәй,*
*Йәшәү дәрте булһын күңелдә.*
*Сәләмәтлек, бәхет-ҡыуаныстар*
*Юлдаш булһын һиңә ғүмергә.*

**Ата-әсәһе, тормош иптәше, ҡусты-килене, һеңле-кейәүе һәм балалар.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**10 ноябрь "Бер мәл санаторийҙа"** (Н.Ғәйетбай), комедия

**11 ноябрь "Бәхет хаҡы"** (Х.Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**13 ноябрь "Ай тотолған төндә"** (М.Кәрим), трагедия

**14 ноябрь "Эдип батша"** (Софокл), хаким ҡарашынан сәхифә

**16 ноябрь "Бирнәһеҙ ҡыҙ"** (А.Островский), драма

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**13 ноябрь "Тоҡ эсендәге бесәй, или башкирская пленница"** (М.Кәрим), спектакль-концерт

**13 ноябрь "Нух кәмәһе"** (У.Хуб), бөтә ғаилә өсөн тамаша. Башлана 10.00, 13.00

**15 ноябрь "Ромео һәм Джульетта"** (У.Шекспир), трагедия

ЙӘШЕЛ ДАУА

# ҠУҘАҠЛЫ ҠЫҘЫЛ БОРОС

Европа беренсе тапҡыр был үсемлек хаҡында Колумб Американы асҡандан һуң белә. Борос Көньяҡ Америка халыҡтарының яратҡан аш тәмләткесе була. Улар итте тоҙламай, ә борослай. Колумб борос тулы ҡапсыҡты король менән королеваның аяҡтары аҫтына килтереп һала. Ул заманда аш тәмләткестәре алтын, алмаздарға ҡарағанда ла ҡиммәтерәк баһалана.

**Борос төнәтмәһе киң билдәле.** Халыҡ уны үҙе әҙерләй һәм артрит, миозит, радикулит, невралгия, ишиас кеүек ауырыуҙар ваҡытында һөртөнөү өсөн ҡуллана.

**Ҡартайыуға ҡаршы халыҡ рецепты бик ҡыҙыҡлы.**

**Иртә ҡартайыу.** 1 ҡалаҡ боросҡа 500 грамм ҡаймаҡлы май һәм 200 грамм бал болғайһың. Уны берәр ҡалаҡлап көнөнә 4-5 тапҡыр ашайһың. Киләһе курс - 3 айҙан һуң.

**Радикулит.** Ике ҡуҙаҡ боросто стакан ярым нашатыр спиртында 2 аҙна төнәтәһең. Һөртөнөү өсөн ҡулланаһың.

**Ҡуҙаҡлы боросто ашҡаҙан, ашҡаҙан аҫты биҙе, эсәк, бөйөр, бауыр ауырыуҙары булғанда ҡулланыу тәҡдим ителмәй. Боросто ҙур миҡдарҙа ҡулланғанда үсемлектә булған капсаицин матдәһе ашҡаҙан-эсәк ағзалары боҙолоуына сәбәпсе була. Ул, үҙ сиратында, үлемгә килтереүе мөмкин.**

Рим ӘХМӘДОВ.

СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

# ЯҢЫ КОМЕДИЯ...

## әммә иҫке ҡараш

**Бөгөнгө заман театрының иңенә төшкән проблемалар байтаҡ ҡына булһа ла, тамашасы өсөн ул һаман да изге бер урын булып ҡала. Тамаша залы, ауыр шаршауҙар, үҙенсәлекле мөхит - быларҙың барыһы ла үҙендә мөғжизәле донъяла хис итергә мөмкинлек бирә һәм һин сәхнәлә барған әҫәрҙән дә үҙең өсөн нимәлер алырға тырышаһың, һорауҙарыңа яуаптар эҙләйһең. Әлбиттә, был өмөт һәр ваҡытта аҡланмай ҙа, әммә һәр спектакль, хатта ул уңышһыҙ булған осраҡта ла, күңелдә ниндәйҙер эҙ ҡалдыра, бәхәстәр тыуҙыра.**



Яңыраҡ Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры үҙ тамашасылары өсөн өр-яңы премьера - Гөлшат Зәйнәшеваның "Ғәйфи ағай, өйлән давай!" комедияһын тәҡдим итте. Режиссеры - Башҡортостандың халыҡ артисы, режиссер булараҡ башҡорт сәхнәһенә Европа театр мәктәбенең яңы йүнәлештәрен индереүсе, заманында ошо уҡ театрҙа М. Кәримдең "Салауат" трагедияһы буйынса "Салауат. Өн аша ете төш" спектакле менән республиканың мәҙәни тормошонда яңы һүҙ әйтеүгә өлгәшә алған Азат Нәҙерғолов.

Комедия жанрын халыҡ ярата. Был спектакль дә халыҡҡа оҡшаны, ихлас көлөүҙәр тамаша бөткәнсе тынманы. Әммә кем нимәнән көлгәндер инде? Кем бары тик тышҡы комизмға ғына ҡоролған комедиянан, кем "современный ҡыҙҙар испорченный булырға тейеш"легенән, кем төп геройҙың йыш ҡабатланыуҙан ялҡыта төшкән "инәндең эске күлмәге" тигән фразаһынан, кем һаман да, шул иҫәптән театр сәхнәһендә лә сит һүҙҙәр менән сыбарланған башҡорт теленән. Үҙендән көлә белеү яҡшы сифат, тик күңелдә был спектакль кәм тигәндә егерме йылға һуңлаған, тигәнерәк көйөк ҡала. Ни тиһәк тә, Маги-Маһинурҙар, туған телендә һөйләшергә оялыуҙар заманы күптән артта ҡалды. Ошолар араһында спектаклдәге кешеләрҙең яңғыҙлығы кеүек проблема хатта юғалып ҡалған кеүек булды.

Ә шулай ҙа төп герой, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Илсур Хәбиров та (Ғәйфи) үҙен тулыһынса асып бөтә алманы кеүек. Спектаклдең актерҙың юбилейына арналыуын да иҫәпкә алһаҡ, ғүмерен балаларға тәғәйенләнгән әкиәттәрҙә ролдәр башҡарыуға арнаған актер өсөн был спектакль үҙенең эске ҡеүәтен, һәләтен тулыһынса ҡулланырға мөмкинлек бирергә тейеш ине. Эйе, ҡайһы бер актер булмышы менән комик, уның сәхнә буйлап бер атлап үтеүе, бер һүҙ әйтеүе үк һине ышандыра. Быға беҙ Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Нәғим Нурғәлин (Саттар) һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Рәмилә Сәлимгәрәева (Суфия) миҫалында тағы бер инандыҡ. Спектаклдә уларҙың икеһенең аралашыу сәхнәһе иң сағыу күренештәрҙең береһе булды. Бәлки, Илсур Хәбиров үҙен комедияла түгел, башҡа жанрҙа уңышлыраҡ күрһәтә алыр ине. Актерҙар уйнауына тағы бер әйләнеп ҡайтҡанда, шәхсән үҙем өсөн Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Альбина Кашанованы яңынан астым. Уның эскерһеҙ, бала күңелле Зәкиәһе спектаклдә берҙән-бер яҡты нур булды кеүек. Сөнки бөгөнгө театрҙың тағы ла бер мөһим үҙенсәлеге - уның замана кешеһенең эске донъяһын, психологияһын күрһәтә алыуҙа.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ЯҢЫ КИТАП

# ПАРИЖДЫ ЛА КҮРҘЕК БЕҘ...

**Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә "Парижды ла күрҙек беҙ..." ("И Париж видали мы...") тип аталған фотоальбом донъя күрҙе.**




Тарих фәндәре кандидаты Р.Н. Рәхимов әҙерләгән был уникаль баҫма 1812 йылғы Ватан һуғышының 200 йыллығына ҡарата нәшер ителгән. Унда башҡорт яугирҙарының 1812 йылғы Ватан һуғышында, 1813-1814 йылдарҙағы сит ил походтарында күпләп ҡатнашыуы, Наполеон һуғыштарының дәһшәтле осорон XIX-XXI быуаттарҙа үҙ ижадтарында сағылдырған рәссамдарҙың мәшһүр картиналарынан алынған фоторепродукциялар тупланған. Был картиналар шул дәүерҙе күҙ алдына килтерергә ярҙам итеүсе изге ҡомартҡы булып тора. Рәссамдар башҡорт батырҙарының төҫ-ҡиәфәтен, кейгән кейемдәрен, һуғыш ҡоралдарын, һыбай сапҡан ғәжәйеп шәп аттарын баҙыҡ буяуҙар менән һынландырған. Шул осорҙоң күренекле полководецтары М.И.Кутузов, М.Б.Барклай де Толли ҡултамғалары ҡуйылған документтарҙа, баҫманың фольклор бүлегендә башҡорт яугирҙарының ҡаһарманлыҡтары тураһында байтаҡ мәғлүмәттәр килтерелә. Шулай уҡ тарихи легендалар, йырҙар, бәйеттәр ингән.

1812 йылғы Ватан һуғышының юбилейы айҡанлы әҙерләнгән фотоальбом нәшриәттең фирма магазиндарына һатыуға сығарылған. Тиражы 2000 дана менән баҫылған был баҫма уҡыусылар, студенттар, мәҙәниәт, тарих уҡытыусылары, крайҙы өйрәнеүселәр, ғөмүмән, киң ҡатлам уҡыусылар өсөн тәғәйенләнгән.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ӨЙӨНӘ КИЛТЕРМӘГӘН...

## иленә килтермәҫ

Һәр кем хаталана ала, әммә ахмаҡтар ғына үҙ хаталарын күккә сөйә.

**(Аристотель).**

Йөрәк беҙҙең берҙән-бер кәңәшсебеҙ.

**(Джон Апдайк).**

Гений барыһына ла оҡшаған кеше, әммә уға оҡшағандар юҡ.

**(Оноре де Бальзак).**

Ҡарттарҙы әрләмәгеҙ: беҙҙең һәр беребеҙ ҡартлыҡҡа тиклем йәшәргә ынтыла бит.

**(Бион Борисфенит).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер батшаның берҙән-бер улы була - ахмаҡ түгел, әммә үҙ-үҙенә ныҡ ышанған, еңел-елпе малай. Ул бар нимә тураһында ла аҙ-маҙ белә, ләкин бер ваҡытта ла урынында ултырып түҙмәй һәм шул арҡала белемде тулыһынса үҙләштерә лә алмай. Улының был холҡон белгәнгә күрә лә батша уны тирә-яҡта киң билдәле хәрби сәнғәт оҫтаһына уҡытырға ебәрә һәм улында көслө рух, ысын ир-егет характеры тәрбиәләргә бойора. Малай тәүҙә оҫтанан бик тырышып төрлө күнекмәләр өйрәнә. Ләкин тиҙҙән бер үк төрлө хәрәкәттәрҙе ҡат-ҡат ҡабатлап күнектереүҙәрҙән ҡыҙыҡ тапмай башлай һәм оҫтаға шулай тип мөрәжәғәт итә:"Хөрмәтле уҡытыусы! Бер үк хәрәкәтте ниңә ҡат-ҡат ҡабатларға? Мин уларҙы үҙләштерҙем бит инде". Оҫта батшаның улына бер ни ҙә әйтмәй һәм бер нисә көндән уға хат тоттороп, өйөнә ҡайтырға һәм атаһына тапшырырға ҡуша. Үҫмер хатты ала ла ҡайтыу яғына юл ала. Ҡайтып барышлай юл ситендәге бер аҡланда өлкән генә ҡарттың әле генә үҙе өйрәнгән хәрби сәнғәт төрө күнекмәләрен яһап йөрөгәнен күреп ҡала. Үҫмер бәлтерәгән ҡарттан көлөргә уйлап, мыҫҡыллап ҡысҡыра:"Эй, ҡарт, етәр һауаны туҡмау!" "Һин минән көлмә, улым, тәүҙә мине еңеп ҡара" - ҡарттың был һүҙҙәре үҫмерҙең сәменә тейә һәм ул:"Үҙеңә үпкәлә, ҡарт алаша!"- ти ҙә алышҡа ташлана. Әммә ҡарт үҙенә ташланған үҫмерҙе бер ҡулы менән еңел генә итеп ситкә алып осора. Үҫмер урынынан тора ла тағы ҡартҡа ташлана, тағы тәкмәсләп барып төшә. Был хәл күп тапҡырҙар ҡабатлана һәм үҫмер тамам хәлдән тая. Шунан ҡарт уға ипләп кенә шулай ти: "Мин һине тәүге һуғыуҙан уҡ ҡуҙғалмаҫлыҡ итә ала инем. Тик һин йәшһең һәм ахмаҡһың. Үҙ юлың менән кит, әйҙә!". Үҫмер ғәрлегенән тороп йүгерә. Өйгә ҡайтып еткәс, ҡулындағы хатты атаһына тоттора. Атаһы хатты асып ҡарай ҙа уны яңынан улына бирә: "Был хат миңә түгел, һиңә". Хатта былай тип яҙылған була:**

**"Күп тапҡырҙар күнектерелгән, камиллыҡҡа еткерелгән бер һуғыу күнектерелмәгән йөҙ һуғыуға ҡарағанда яҡшыраҡ..."**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 9 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5387
Заказ 4409